ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 февраль (шаҡай)

2022

№7 (997)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Үҙ туған телен белмәгән, әммә сит телдә һөйләшкән интеллигент - көлкө генә тыуҙыра. Ул үҙ туған мөхитенән ситләшә, ләкин икенсе, үҙе ҡабул иткән телдә һөйләшеүселәр мөхитенә лә тулыһынса инеп китә алмай.*

*М.Э. РАСУЛАДЗЕ.*


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Баш ҡалаға...**

яңы хакимиәт башлығы килде



5

**Әлеге лә баяғы...**

һүҙҙәребеҙ тамыры хаҡында



8-9

**Баһалап бөткөһөҙ хазина -**

ул туған телебеҙ!



10

**Ул Афған яуын үткән**



12-13

**ТВ-программа** 14


БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# МИЛЛӘТТЕҢ БӨЙӨК ХӘТЕРЕ

Туған телем!

**Туған телгә арнап ниндәй генә шиғыр, йыр, ҡобайыр ижад ителмәгән! Уның матурлығын, бөйөклөгөн төрлөсә асҡан бындай юлдар ҡат-ҡат уҡыла, ятланыла, быуындан-быуынға тапшырыла. Ләкин берәү ҙә, бер ҡасан да туған телдең бөйөклөгөн һәм матурлығын асып бөтә алмаясаҡ, сөнки ул мәңгелек төшөнсәләр иҫәбендә. Һәр быуын уны үҙенсә данлар, үҙенсә асыр. Халыҡ тере икән, тимәк, тел дә тере. Халыҡ булғанда тел йәшәйәсәк.**



Меңәр йыллыҡ тарих эсендә халҡыбыҙға нимәләр генә кисерергә, ниндәй генә ғәрәсәттәр аша үтергә тура килмәгән. Тел һаҡланған. Донъяға тәү ауазын һалған сабыйҙы әсә менән ата үҙ телендә сәләмләгән. Никахҡа фатиханы үҙ телендә биргән. Ир-уҙаманды яуға туған телдә хушлашып оҙатҡандар, туған телдә сәләмләп, ҡаршы алғандар...

Башҡорт ауылында тыуып, туған телемдә һөйләшеп үҫеүем менән уғата бәхетле мин. Беҙҙең эргәлә булған Камила ҡәртәсәйемде боронғолоҡто, хәтерҙе үҙендә һаҡлаған башҡорт ҡатын-ҡыҙының һынланышы тип беләм. Талапсан да, уҫал да, ғәҙел дә ҡәртәсәйемдең милли кейемдә йөрөүе, башҡорт йола, ғөрөф-ғәҙәттәрен теүәл үтәүе - бөтәһе лә беҙҙең өсөн ҙур милли тәрбиә ине. Минең өсөн тыуған ауылым ғына түгел, ә тотош донъя башҡорт телендә һөйләшә кеүек ине. "Әлифба"ла Ленин бабай һүрәте була торғайны. "Лилин бабай"ҙы ла мин башҡорт тип уйлай торғайным. Уның башҡорт түгеллеген аңлатҡастары, хатта риза була алмай, һүрәтенә оҙаҡ ҡарап баҫып торғаным хәтеремдә. Артабан туған телем миңә тотош донъяны асты. Донъяни тиклем күп төрлө булмаһын, йәнем менән, тәнем менән туған телемә бережкәнмен.

(Дауамы 2-се биттә).

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ?

## *Ошо айҙа Халыҡ-ара туған тел көнө (21) билдәләнә. "Яҙмышымда - туған телем" тигән темаға әйтер һүҙегеҙ ниндәй булыр?*

***Мөхәмәтйәр МӘҒӘСҮМОВ, эшсе:*** Туған телемә рәхмәтлемен, ул мине, ябай бер әҙәбиәт һөйөүсене, ғәжәйеп тылсымлы донъя - шиғриәт донъяһына етәкләп алып инде. Мин ҙур уҡыу йорттары бөтмәнем, ун класс белемлемен, ләкин был миңә туған телем хазиналарына һәм әҙәбиәтебеҙгә мөкиббән бер йән булып йәшәргә бер ҙә ҡамасауламай. Әбйәлил районының Аһылай ауылында тыуып үҫеп, уҡып йөрөгән саҡтарҙан көтөү көттөм, ә көтөүсенең, үҙегеҙ беләһегеҙ, тоғро дуҫы - китап. Ун дүрт йыл ҡырҙа, йәмле тәбиғәт ҡосағында мал көтөү дәүере минең өсөн бушҡа ваҡыт үткәреү йә аҡса эшләү генә булманы: был йылдарҙа мин үҙебеҙҙең бөтөн тип әйтерлек башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрен уҡып сыҡтым: Зәйнәб Биишева, Ноғман Мусин, Һәҙиә Дәүләтшина, Дауыт Юлтый, Ғәли Ибраһимов, Шәйехзада Бабич, Рәми Ғарипов...

Иң яратҡаным, донъямды онотторғаны - әлбиттә, Рәми шиғриәте. Үҙем дә шиғырҙар яҙам, улар "Йәшлек" гәзитендә баҫылып сыҡҡаны бар, "Бәйләнештә"ге диуарыма ла һалам уларҙы. Үҙем кеүек үк, шиғыр яҙыуҙы һөнәр итеп түгел, ә күңел торошо, тормошҡа мөнәсәбәт итеп күргән бик күп дуҫтарым, ҡәләмдәштәрем менән бер-беребеҙҙең әҫәрҙәрен алмаш-тилмәш уҡыйбыҙ, фекер алышабыҙ.

Әйткәндәй, кемдәр Бәйләнештәге сығыштарҙы күҙәтеп бара, күрмәйенсә ҡалмайҙыр: бөгөн шиғыр яҙыусы ябай һөнәр кешеләре - замандаштарыбыҙ бик күп! Ир-егеттәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, ә шулай ҙа һуңғылары күберәк, минеңсә. Исем өсөн, шағир булыр өсөн түгел, ә үҙебеҙ, яҡындарыбыҙ, дуҫтарыбыҙ өсөн яҙабыҙ. Ошо телдә һөйләшеп-аңлашыу, аралашыу беҙҙең ғәҙәткә инә бара. Ғәжәп күренеш был. Әлеге лә баяғы туған телебеҙҙең мөмкинлектәрен, үҫеш кимәлен билдәләүсе бер факт, тиер инем быны. Шиғриәттең камиллығына, телебеҙҙең байлығына һоҡланып, мәктәп йылдарында бәләкәй кластарҙа уҡығанда уҡ тәүге шиғырҙарымды яҙа башлағайным. Бәхетемә күрә, шул саҡ эргәмдә ошо тәүге ижад шытымдарын күреп, дәртләндереп, кәңәштәрен биреп тороусы башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусым Вәбилә апай Ғүмәрова булды. Уға бөгөнгәсә рәхмәт тойғолары һаҡлайым. Аҙаҡ Байым мәктәбендә уҡығанда Миҙхәт ағай Мәғәсүмов үҙ ҡанаты аҫтына алды, ярҙам итте. Үҙемдең башҡорт телен яратыуым да шиғриәт менән ныҡлап мауығып китеүемә сәбәпсе булғандыр, әлбиттә. 2018 йылда "Бик көттөрҙөң, яҙым" исемле китабым нәшер ителде. Шиғырҙарыма үҙем көйҙәр яҙам, ҡайһыларын үҙем башҡарам да.

Әле мин төҙөлөштә вахта ысулы менән эшләйем. Бригадабыҙҙа күпселеге башҡорт егеттәре. Шуныһы күңелле: рәхәтләнеп башҡортса һөйләшәбеҙ, үҙебеҙҙең йырҙарҙы йырлайбыҙ. Ә сит ерҙәрҙә йөрөгәндә үҙ телендә һөйләшкән кеше туғаныңдан да яҡын булып китә. Был турала бергә эшләгән иптәштәрем менән дә йыш ҡына һөйләшеп алабыҙ. Уларҙың күбеһе йәштәр, ғаиләләре бар. Араларында өлкәнерәге булараҡ, мин гел уларға әйткеләп алам:

*Үҙ телеңде өйрәт улдарыңа,*
*Ер-һыуыңдың һөйлә тарихын.*
*Белеп үҫһен әсә теленән дә*
*Ҡәҙерлерәге юк икәнен.*
*Хөрмәт итһен*
*ғөрөф-ғәҙәттәрҙе,*
*Башҡорт икәнлеген белһен ул -*
*Ерҙә һинең дауам булһын ул!*

Эйе, әҙәм балаһы үҙ ғүмерендә ҡайҙарҙа ғына йөрөмәһен, кем генә булып эшләмәһен - уны тыуған ере, яҡындары менән бәйләп тороусы кендеге - әсә теле. Әгәр кеше ошо турала онота, үҙ теленә хыянат итеп, белер-белмәҫ көйө икенсе телдә һөйләшә, балаларын илһөйәр, телһөйәр итеп тәрбиәләүгә битараф ҡала икән, әлеге "кендек" өҙөлә. Һөҙөмтәлә бындай кеше үҙенең генә түгел, балаларының да бәхетенә аяҡ сала, нәҫеле ҡотон ҡорота. Ундайҙар ғүмерҙәре буйы рухи бушлыҡ кисереп ғүмер һөрә, тормош юлдарында аҙашып, үҙ асылына төшөнә алмай ҡаңғыра.

Туған телемә тағы бер рәхмәтлемен: рухымды күтәрә, эске донъямды байыта, йәшәргә, эшләргә дәрт өҫтәй, дуҫтарымды арттыра; әсәм теле, шиғырҙарым аша йәндәй күргән йәремде таптым - шунан нисек инде "Әсәм теле - яҙмышым минең," тип әйтмәҫһең!

12+

✓ Элек Рәсәй халҡы иң белемле, китап, гәзит-журналдарҙы иң күп уҡыусылар рәтендә булһа, хәҙер иң уҡымаған илгә әйләнеп баралыр, тип уйлайым. Яҙыусылар, шағирҙар, журналистар кем өсөн яҙа һуң?



БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# МИЛЛӘТТЕҢ БӨЙӨК ХӘТЕРЕ

(Башы 1-се биттә).

Йән һәм күңел сәләмәтлеге бит ул башҡорт телебеҙ! Беҙҙең заман өләсәй-ҡартәсәйҙәре урыҫса белмәне. Шуға ла өләсәйҙәр бәтәһе лә шулай башҡорт телендә генә һөйләшкән, уны баһалаған һәм һаҡлаған кешеләр тип кенә аңлай инем. Заман шул тиклем тиҙ үҙгәрә һәм алмашына икән. Хәҙер иһә өләсәйҙәрҙең ейәндәре менән урыҫса гәп һатҡаны, атайың-әсәйең тип түгел, ә "папаң-мамаң" тип аңлатҡандары, "внуктарым" тип һөйләгәндәре гәҙәти күренешкә әйләнеп бара. Быңдай тел, йәки аралашыу кәмһенеү комплексынан киләме? Әллә туған телгә, киләсәккә вайымһыҙ мөнәсәбәттәнме? Ә бит берәүгә лә дәрәжә бирмәй телде юғалтыу, ҡыҙғаныу хисенән тыш...

Телгә мөнәсәбәт мәҙәниәт кимәлен күрһәтә. Телгә хәүеф янай икән, тимәк, мәҙәниәткә, милләттең йәшәүенә лә хәүеф янай тигән һүҙ. Милли мәнфәғәтте һаҡлау, ә ул туған телдән айырылғыһыҙ - иң оло бурыстарҙың береһе булып ҡала.

Эйе, глобаллашыу бөгөн күп милләттәргә янай. Тағы ла тиҫтә йылдан ер йөҙөндә ниндәй үҙгәрештәр булыр, күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Ләкин иман ныҡлығы телде һаҡларға көс бирер, тигән ышаныс йәшәй миндә...

Туған телде йыш ҡына "әсә теле" тип һөйләйҙәр. Быңдай алмаштырыуға риза булып бөтә алмайым. Сөнки әсәнең икенсе милләттән дә булыуы ихтимал. Һәм телдең функцияһы һөйләшеү, үҙ-ара аралашыуға ғына ҡайтып ҡалмай. Туған телдең бурысы күпкә ҙурыраҡ. Ата-бабаларыбыҙҙың теле ул. Уның өсөн бихисап күп ҡан ҡойолған. Үтә лә ҡиммәт хаҡ түләнгән. Ул дәүләтте ойоштороусы тел, ватаның, тимәк, телен һаҡлап, ир-егет ҡулына ҡорал алыр булған. Сәйәси, иҡтисади мәсьәләләрҙә туған телһеҙ хәл итмәйҙәр. Бөтөн структурала ла беҙҙең тел камил эшләргә тейеш. Ил ҡеүәһе тел ҡеүәһе менән бәрәбәр.

Туған тел - милләттең бөйөк хәтере, ул беҙҙе үткәнебеҙ менән айырылғыһыҙ итеп бәйләгән. Кеше организмы төҙөк системаны хасил итә: тамырҙар буйлап ҡан йүгерә, һәм тәндең бөтөн ағзалары, һәр бер күҙәнәгенә тиклем, туҡландырыла. Ә гәзиз телебеҙ милләт тигән оло организмды туҡландырыусы, нормаль эшкә көйләүсе тамыр түгелме ни? Ул камил йәшәү көсө бирһен, үҙ ҡеүәтен юғалтмаһын өсөн беҙ үҙебеҙ нимәләр эшләй алабыҙ? Айырыуса, бөгөн нимәгә иғтибар итергә кәрәк? Ошо һорауҙар һәр милләттәште борсорға тейеш бөгөн.

Данлы Урал. Күк Урал. Сал Урал. Тыуған ерен нисек кенә данламаған халҡыбыҙ! Тарих, ер-һыу атамалары, ауыҙ-тел әҙәбиәте, ижад ҡомартҡылары - улар менән танышыу, ниндәйҙер үҙең өсөн асыштар яһау - күңелдә ҡабатланмаҫ кисерештәр уята. Быуындарҙың күп быуатлыҡ аҡылы, ижады, тәжрибәһе тел аша тапшырыла килә. Шулай булғас, милләттең иң ҙур байлығы, хазинаһы - туған теле түгелме ни? Бары уның алдында үҙебеҙҙең яуаплылыҡты онотмаһаҡ ине. Халҡыбыҙҙың йәнен һәм йөрәген көйләгән, уның ихтыярын тәрбиәләгән, рух көсөн бар иткән туған телебеҙ бар, булған, буласаҡ!

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА,**
**яҙыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

**Ошо айҙа Халыҡ-ара туған тел көнө (21) билдәләнә. "Яҙмышымда - туған телем" тигән темаға әйтер һүҙегеҙ ниндәй булыр?**

***Ләйсән САФИУЛЛИНА, Республика "Смарт" күп профилле 2-се полилингваль гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Башҡортостаныбыҙҙа үҙ эҙмыштарын, ысынлап та, туранантура туған телебеҙ менән бәйләгән изге һөнәр эйәләре - башҡорт теле уҡытыусылары бик күп. Мин дә һис икеләнеп тормай ошо юлды һайланым. Телебеҙ хазиналарының түкмәй-сәсмәй быуындан-быуынға ташырыла килеүе ата-әсәләр, олатай-өләсәйҙәребеҙҙән ҡала башҡорт теле уҡытыусыларына ныҡ бәйле. Үкенескә, бөгөн туған телебеҙҙе уҡытыу мәсьәләһе ҡыҫырыҡлана барып, күп мәктәптәрҙә ул хәҙер дәүләт теле булараҡ ҡына уҡытыла. Ә инде аҙнаһына 1-2 сәғәт эсендә телде тәрәндән өйрәнеү, һәр хәлдә, был дәрестәр уҡыусылар күңелендә ғүмерлеккә яҡты, матур хәтирәләр уятырлыҡ итеп уҡытыу уҡытыусының белеменә лә, тәжрибәһенә лә, мәҙәни-интеллектуаль кимәленә лә бәйле. Йәғни, быныӊ өсөн үҙенә башҡорт ауылында тыуып-үҫеп, үҙ телендә белем алып, туған телде яҡшы белеү генә етмәй, минеңсә. Балалар менән аралашыу оҫталығы, тәбиғилек, кеше булараҡ та улар өсөн ҡыҙыҡлы була белеү уҡытҡан дәресенә лә иғтибар уята, ихтирам тыуҙыра. Шунда ғына улар аңында ҙә тел "культы" тыуҙырырға, уларҙың бөгөнгө виртуаль донъяһында туған тел тип аталған тәбиғилек, сафлыҡ мөхите - үҙенә күрә бер оазис булдырырға мөмкиндер. Быңа ошо турала уйланғанда, мин үҙемә еңел яҙмыш һайлағанмын, тип әйтә алмайым. Үкенескә, арабыҙҙа тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы һөнәрен бик еңел тип ҡараусылар ҙа етерлек. Тимәк, улар бөгөнгө мәғлүмәт ташҡынында, балалар аңы һәм иғтибары өсөн виртуаль һуғыш барған осорҙа, уҡыусы рухын тарихыбыҙ боронғолоғон һаҡлап килгән телебеҙ мөхитенә йәлеп итеү, ләрҙа сәләмәт илһөйәрлек, телһөйәрлек тойғоһо уятыу бурысын, яңы шарттарҙа тел уҡытыу юлдарын күрмәй, тип уйларға нигеҙ бар, ә ҡыҙғаныс...

Шуныһы ҡыуандыра барыбер: Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән республикабыҙҙа уҡыусыларға тел белеме биреүҙең заманса шарттары - полилингваль мәктәптәр асыу беҙҙең, тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыларының, ижад мөмкинлектәрен арттырып, һулыштарыбыҙҙы киңәйтеп ебәргәндәй булды. Был турала республика Башлығы, мәғлүм булыуынса, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының 1-се Бөтөн Рәсәй съезында белдергәйне. Бөгөнгә көндә Өфөлә уларҙың икәүһе асылып, унышлы эшләй. Беҙҙең "Смарт" гимназияһында башҡорт телен уҡытыуҙа төп иғтибар сифатлы белем биреүгә йүнәлтелә. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүгә 1-6 кластарҙа аҙнаһына - 2, ә 7-11 кластарҙа бер генә сәғәт ҡаралһа ла, уҡыусыларҙың йөҙ проценты ла йәлеп ителгән, ә туған башҡорт теленән 179 бала белем ала. Беренсе кластан башлап махсус инглиз-башҡорт теле класы асылғайны, унда уҡығандарҙың 95 проценты башҡорт телен тәрәндән өйрәнә. Һөнәремдең киләсәген ошо яңы мәктәптә күрәм, сөнки бындай белем үҙәктәрен асыу туған телебеҙ абруйын нығыта, уны өйрәнеүгә күберәк уҡыусыны йәлеп итә.

(Дауамы 7-се биттә).

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# РУХИ АҘЫҠ КӘРӘК



**- Һаумы, еңгә! Хәлдәрең нисек?**
**- Хәлдәр бик хөрт.**
**-Ауырып киттеңме әллә?**
**- Юҡ та ул, рухи аҙыҡҡа һыуһаным. Ней гәзит килмәй, ней китапхананы йүнләп эшләмәй. Йәштәр интернеттан уҡыйҙыр ҙа ул. Беҙ, ололар, интернет ҡарап ултырабыҙмы инде. Телевизоры һөйләп тора ла ул…**

Оло ғына йәштәге бер еңгәм менән ошондай һөйләшеү булғайны. Ысынлап та, һуңғы ваҡытта беҙҙең Учалы районында гәзит-журналдар алдырып уҡыу ҙур проблемаға әйләнеп китте. Учалы районының почтамтын Белореттыҡына ҡушыу, эш хаҡтары кәметелеү, ҡыҫҡартылыуҙар сәбәпле, районың Вознесенка, Уральск, Иманғол, Ҡунаҡбай, Яңы Байрамғол, Бәләкәй Ҡаҙаҡҡол ауылдарында почта бүлексәләре ябылды. Почта таратыусылар булмағас, ваҡытлы матбуғатҡа яҙылдың ни ҙә, яҙылманың ни. Башҡа ауылдар тураһында әйтеп тораһы ла түгел, йылдан ашыу инде Ҡәйепҡол, Муса, Көҙәй ауылдарында халыҡ гәзит-журналдар алдырып уҡый алмай.

Ҡасан ғына әле почтальон һөнәре бик абруйлы була торғайны. Хәҙер бына был эшкә урынлашырға теләүселәр юҡ тиерлек. Эш хаҡтары ла аҙ, унан һуң, почтальонға матбуғат баҫмаларына яҙылыу, гәзит-журналдар таратыу, конверт, лотерея билеттары һатыу ғына түгел, яҡтылыҡ, газ, һалымдар өсөн түләүҙәрҙе йыйыу, хатта төрлө хужалыҡ тауарҙары һатыу планы ла йөкмәтелә. Дефицит тауарҙар булһа - бер хәл. Шул уҡ әйберҙәрҙе магазиндарҙа күпкә осһоҙораҡ хаҡҡа һатып алып була бит. Почта бүлексәләре хәҙер әйләнеп сыҡҡыһыҙ магазиндарға әйләнгән, хатта араҡы һатырға ла ҡушалар икән тип ишеттем.

Элек Рәсәй халҡы иң белемле, китап, гәзит-журналдарҙы иң күп уҡыусылар рәтендә булһа, хәҙер иң уҡымаған илгә әйләнеп баралыр, тип уйлайым. Яҙыусылар, шағирҙар, журналистар кем өсөн яҙа һуң? Кеше гел генә телевизор ҡарап ултырмай бит. Ил эсендә, донъя кимәлендә барған хәл-ваҡиғалар тураһында ҡулына гәзит, журнал тотоп киңәнеп уҡымаған, ни ҡыҙығы, ти оло быуын кешеләре. Матбуғаттың халыҡты тәрбиәләүҙәге роле ҙур икәнен оноторға ярамай. Халҡы мәғлүмәтле, рухи яҡтан көслө ил генә ауырлыҡтарҙы еңеп сыға ала. Рухты аҡсаға һатып та, алып та булмай. Ул матбуғат баҫмалары аша тәрбиәләнә.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы Ҡәйепҡол ауылы.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус таралыу хәүефенә бәйле юғары әҙерлек режимы тураһында указға үҙгәрештәр индерҙе. Документтың яңы редакцияһына ярашлы, Рәсәйҙең Баш дәүләт санитар табибының 2022 йылдың 4 февралендәге ҡарарына ярашлы, ауырыуҙар менән бәйләнешкә ингәндәргә ҡарата мотлаҡ изоляция тәртибе бөтөрөлдө. Эш биреүселәргә, шул иҫәптән дәүләт һәм муниципаль власть органдарына хеҙмәткәрҙәрҙең 50 процентынан күберәген өйҙән эшләүгә күсерергә тәҡдим ителә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, республикала коронавирус инфекцияһы таралыуға бәйле хәл "ябай түгел", ләкин контролдә тотола. "Көсәргәнешле режимда эшләргә тура килер", - тине республика етәксеһе. Башҡортостан Республикаһы һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин әйтеүенсә, сирләләрҙең дөйөм һаны 181 612-гә еткән, бер тәүлектә 4 504 кешелә ошондай диагноз раҫланған. 27 523 сирле өйөндә дауаланһа, 347-һе - стационарҙа, 34 пациент ауыр хәлдә. Республикала ковид-пациенттар өсөн койка фонды арттырылған.

✓Өфө шорт-трексыһы Семен Елистратов Пекиндағы Олимпия уйындарында 1500 метр дистанцияла бронза миҙал яуланы. Ул Рәсәйҙең йыйылма командаһына ун беренсе миҙал килтерҙе. Семен Елистратов - 2014 йылда эстафетала олимпия чемпионы, 2018 йылғы Олимпия уйындарында бронза призёр, 2015 йылда донъя чемпионы, донъя чемпионаттарында ике тапҡыр көмөш призёр, донъя чемпионаттарында биш тапҡыр бронза призёр; күп тапҡыр Европа чемпионы; 1000 метрлыҡ дистанцияла Донъя кубогын яуланы. Был иһә Семёндың карьераһында дүртенсе Олимпиада.

✓Рәсәй Олимпия комитетының биатлон буйынса командалағы дүрт исем мәңгелеккә Олимпия уйындары тарихына индерелде. Ирина Казакевич, Кристина Резцова, Светлана Миронова һәм Ульяна Нигмәтуллина Пекиндағы Олимпиадала көмөш миҙал яуланы. Беҙҙең ҡыҙҙар Швеция вәкилдәренән генә ҡалышты. Бынан алда 4х7,5 саҡрымлыҡ эстафетала иргеттәрҙең бронза миҙал алыуҙары тураһында хәбәр ителгәйне. Бүләкләнеүселәр араһында Башҡортостан биатлонсыһы Эдуард Латипов та бар.

✓ *Халыҡты шәхси машиналарынан йәмәғәт транспортын файҙаланыуға йәлеп итеү, бының өсөн иһә ҡала пассажирҙар транспорты инфраструктураһын заманса үҙгәртеп ҡороу, яңыртыу, артабан үҫтереү мәсьәләләре ҡарала.*



*БЫНАҒАЙЫШ!*

# МАШИНАҺЫҘ ИХАТА КӘРӘК



**Йәйәүлегә хәҙер көн бөттө. Өфө урамдарында ғына түгел, үҙе йәшәгән йорт янында ла иркенләп йөрөү тәтемәй: ҡайҙа ҡарама - машина, цивилизация бәләләренең береһе. Ҡышҡы осор айырыуса маҙаға тейә улар. Йорттарҙың тирә-яғы, тротуарҙар йүнләп таҙартылмау сәбәпле, машина юлынан йөрөргә һәм минут һайын эргәңдән выжлап үтеп торған транспорттан янтайып, тубыҡтан көрткә сумырға мәжбүрһең.**

Йорт алды халыҡ, мәктәптән ҡайтыусы балалар, коляскалы әсәләр менән тулы булыуға ҡарамаҫтан, еңел автомашина хужалары ҡайҙалыр ашыға, тиҙлекте ташламай, тегендә-бында туҡтауһыҙ хәрәкәттә. Һәм, ғөмүмән, ҡаланың күп ҡатлы торлаҡ йорттары машиналар сылбыры тоҙағында тороп ҡалды бөгөн. Бер түгел, ике-өс машина тотоусылар бар һәм шуларҙың барыһы ла - йорт алдында. Элегерәк кеше эштән һуң шәхси транспортын дөйөм гаражға илтеп ҡуйып, өйөнә йәйәү ҡайтыр ине, хәҙер иһә, законлымы был, юҡмы - йорт алды ҡырағайҙарса баҫып алынды. Ә бит, уйлап ҡарағанда, күп фатирлы йорттар яны биләмәләренең сиктәре билдәләнеп, ул кадастр иҫәбенә ҡуйылмаған булһа, был ерҙәр йорттарҙа йәшәүселәрҙең түгел, ә дәүләт милке иҫәпләнә. Тимәк, дәүләт милкенә ҡараған күпме территория йылдар буйы бушлай туҡталҡа итеп файҙаланыла!

Ҡаланың төрлө ойошма, учреждениелары алдында ла бит йырып сыҡҡыһыҙ машина, бигерәк тә поликлиника һәм магазиндар янында. Ләкин туҡталҡа проблемаһы машина бәләһенең бер генә яғы әле. Бынан тыш, алтынға бәрәбәр күпме ваҡыт саҡрымдарға һуҙылған тығындарҙа сарыф ителә! Ә туҡтауһыҙ - көн, сәғәт, минут һайын булып торған автоһәләкәттәр? Статистика буйынса илдә көн һайын 400-ҙән ашыу авария булып, унда 40-50 кеше һәләк була. 2020 йылда, мәҫәлән, 145 мең автоһәләкәттең һәр туғыҙынсыһы унда ҡатнашыусыларҙың үлеме менән тамамланған. Һөҙөмтәлә шул йылда юлдарҙа барлығы 16 мең кеше һәләк булған. Һәр 7-се авария эсеп руль артына ултырған водитель ғәйебе менән яһала.

Машина бәләләренең тағы бер һәм берәгәйлеһе - автотранспорт бүлеп сығарған ағыулы матдәләр һәм газдарҙан атмосфераның бысраныуы. Һулаған һауабыҙ бысраныуының 62 проценты автомашиналар өлөшөнә тура килә, ә Мәскәүҙә был һан хатта ки 90 процент тәшкил итә икән. Ошо йәһәттән киләсәктә электромобилдәр һәм газ яғыулығы ҡулланыусы транспортты арттырыу бурысы күҙаллана. Ләкин был экология мәсьәләһен өлөшләтә хәл итеү генә буласаҡ, тип иҫәпләй эксперттар, сөнки машиналар хәрәкәтенән бүленеп сыҡҡан ағыулы матдәләрҙең 82 проценты асфальт-бетон юл ҡатламы һәм автомобиль частәре ышҡылыуҙан хасил була икән. Был һәм автотранспорт проблемаларына ҡағылышлы башҡа глобаль проблемалар хаҡында яңыраҡ ҡына РФ Хөкүмәтендә раҫланған 2030-2035 йылдарға тиклемге Транспорт стратегияһы тексында ентекле һүҙ алып барыла. Унда бөтә төр: автомобиль, тимер юлы, һыу һәм һауа юлдары транспорттарының үҫеш перспективаларын билдәләү менән менән бергә ҡала пассажирҙар транспорты проблемаларын хәл итеү юлдары ла күҙаллана һәм киләсәктә экологик йәһәттән зарарлы төр автомашиналар хәрәкәтен сикләү мәсьәләһе лә ҡуҙғатыла. Был бигерәк тә шәхси автотранспорт төрҙәренә ҡағылмаҡсы. Стратегияның был положениеһы тәүҙәрәк эксперттар һәм айырыуса "За рулем", "5Колесо", "Коммерсант" кеүек һәм башҡа электрон сығанаҡтар журналистары тарафынан "шәхси еңел автомобилдәргә көн бөтәсәк; шәхси автотранспорттың киләсәге юҡ; машинаң менән хушлаш" тигәнерәк йөкмәткелә ығы-зығы тыуҙырып алынғайны. Эйе, яҡшы булыр ине лә бит...

Асылда иһә, ысынлап та, Стратегияла әйтелеүенсә, халыҡты шәхси машиналарынан йәмәғәт транспортын файҙаланыуға әүҙемерәк йәлеп итеү, бының өсөн иһә ҡала пассажирҙар транспорты инфраструктураһын заманса үҙгәртеп ҡороу, яңыртыу, артабан үҫтереү мәсьәләләре ҡарала, ләкин шәхси автотранспортты тыйыу хаҡында һүҙ бармаһа ла, нигеҙҙә, экологик таҙа электромобилдәр һәм газ яғыулығы ҡулланған машиналарға өҫтөнлөк биреләсәге күҙаллана. Шуныһы үкенес: был бөгөн-иртәгә генә башланасаҡ реформа түгел, ул кәмендә 10-15 йыл эсендә бойомға ашырыласаҡ, тип ҡаралһа ла, беҙҙә быңдай үҫеш перспективаларының тарихы ҡағыҙҙа ғына тороп ҡалыу миҫалдары бик күп.

Ә әлегә тормошобоҙ автомашиналар хакимлығының яҙылмаған законы буйынса йәшәй, йыш ҡына хатта ҡала халҡы мәнфәғәттәре иҫәбенә шәхси автотранспорт өсөн уңайлы шарттар булдырыу беренсе урынға килеп сыға. Ошо араларҙа Өфө тормошонда шаушыу тыуҙырған бер ваҡиға тураһында әйтеүем. Бәй, ишетмәнегеҙме ни әле? Һәр хәлдә, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрын яңыртып төҙөү эштәре башланасағы тураһында, моғайын, беләһегеҙҙер. Театр бинаһы ғына түгел, уның тирә-яҡ биләмәләре лә төҙөкләндереләсәк, тип әйтелә был хаҡтағы документта. Ләкин яңыраҡ шул да мәғлүм булды: әлеге "төҙөкләндереү" әләме аҫтында Ҡурсаҡ театры янындағы бына тигән матур сквер менән балалар майҙансығы алып ташланып, уның урынына ... нимә төҙөлә тип уйлайһығыҙ? Юҡ шул, яңы майҙансыҡ та, ял итеү скверы ла түгел, ә әлеге лә баяғы ҡайҙа морон төртөр урын тапмаған шәхси автотранспорт өсөн подрядчик туҡталҡа төҙөргә йыйына икән! Был, әлбиттә, ҡала халҡының асыуын ҡабартты. Ә инде мәсьәлә ҡала мэрияһы ултырышына ҡуйылғас, Баш архитектура начальнигы урынбаҫары Ольга Сарапулова балалар театры янында транспорт туҡталҡаһы төҙөү идеяһына ҡырҡа ҡаршы сығыуын белдерҙе. "Сквер ҙа, ҡалалағы 12 тематик балалар майҙансығының береһе булған был театр яны балалар майҙансығы ла бик әһәмиәтле урындар иҫәпләнә, юҡ итергә түгел, киреһенсә, тәүге тарихи күренештәрен тергеҙеп, уларҙы яңыртып төҙөү кәрәк", - тине ул. Баш ҡала мэры ла уның фекерен яҡлап сыҡты һәм был мәсьәлә буйынса йәмәғәт тыңлауҙары үткәреп, халыҡ фекеренә ҡолаҡ һалыу кәрәклеге билдәләнде.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ӘРМЕЛӘ БУЛМАҒАНДАРҘЫ...

## ҡыҙҙар яратмай ине

**"Ә һин армияла булдыңмы?" тип һорағайны минән педагогия институтының өсөнсө курсында уҡып йөрөгән бер һылыу ҡыҙ уның менән таныша башлағас та. Үҙем мединститутта тәүге йыл ғына уҡый инем. Әлеге ҡыҙҙан ике йәшкә йәшерәк булғанғамылыр, һис кенә лә бирешкем килмәй бит әле. Үҙемде бер аҙ олораҡ, донъя гиҙгән итеп күрһәтергә тырышам: "А как же, - тигән булдым, - шуның өсөн дә институтҡа һуңлап ҡына индем..." Өҫкө төймәләре ысҡынған күлдәгем аша күренеп торған тельняшканы "Ағайым әрменән алып ҡайтып бүләк итте" тип әйтә алмайым бит инде... Ни булһа ла, әлеге "буйлы майка" был һылыуҡай менән танышыуыма ярҙам ғына итте. "Кем булып хеҙмәт иттең, - тип, артабан төпсөшә был етди ҡыҙ (тельняшкамды байҡап алды, күрәһең), - морякмы әллә?.." "Юҡ, - тигән булдым. - Диңгеҙ менән таныш түгелмен. Десантник мин..."**

Кәүҙәгә лә әллә ни олпатлығым булмауына ҡарамаҫтан, йәшлек менән ана шулай бер аҙ шыттырғылаған, шаштырғылаған ваҡыттар ҙа булманы түгел инде. Ә бит беҙҙең дәүерҙә, ысынлап та, ҡыҙҙарҙың әрмелә булмаған егеттәргә "икенсе сорт" әйбергә булған һымағыраҡ ҡарашы һиҙелә ине. Бәғзе бер турараҡ һүҙле ҡыҙҙар хатта: "Әй, армияла служить итмәгән егет - егетме ни.." тип тә ебәрә торғайны. Бер апай тормошҡа сыҡҡас, оҙаҡламай уларҙың ғаилә мөнәсәбәттәре боҙола башлағаны иҫемдә. Йәш кейәү эскелек менән мауығып, йыш ҡына бола сығара. Ҡыҙҙың ата-әсәһе үҙ-ара ошолайыраҡ итеп һөйләшкеләгәнен ишеттем: "Аңын-тоңон белмәйенсә, нишләп уға тормошҡа сығырға риза булды икән? Кейәү хатта әрмелә лә булмаған бит, ҡыҙыбыҙ, моғайын, шул хаҡта белгәндер. Армияға бармауы ла тигенгә түгелдер инде..." Бөгөнгө ҡыҙҙарҙың ошо мәсьәләлә егеттәргә ҡарата улай уҡ ҡәтғи, талапсан булмауы хаҡында ишеткеләйем. Әрме хеҙмәтен, әлбиттә, һәр кем хәленән килгәнсе үтәй. Унда бармағандарға ла шулай уҡ яҡшы ҡараштамын. Тик әлеге сирек быуат ғүмеремде хәрби хеҙмәткә бағышлаған кеше буларaҡ, ошо хаҡта үҙемдең фекерем менән бер аҙ бүлешергә ниәтем.

Беҙ бала саҡта һалдат булырға хыялланмаған бер малай ҙа булманы, тиһәм, хаталанмаҫмын. Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуына бары ун биш-егерме йылдар ғына уҙған булғанғамылыр, һәр кеше һуғыш мәлен йыш иҫкә ала, беҙҙең урамда уйнаған уйындарыбыҙ ҙа, башлыса, һалдат уйыны булды. Әрмегә барыуҙы, ил һаҡлап ҡайтыуҙы һәммәбеҙ ҙә үҙебеҙҙең изге бурысыбыҙ тип һананыҡ. Берәй ауылдашыбыҙ хеҙмәтен бөтөрөп ҡайтһа, малайҙар йыйылышып, уларҙың өйөнә һалдат күрергә инә торғайныҡ. Тәмле одеколон еҫе сығып торған хәрби формаһын әле сисмәгән ағайҙан күҙемде ала алмай торғаным хәтеремдә. Түшендәге теҙелешкән йылтыр значоктарын тотоп, ҡыҙыл йондоҙло фуражкаһын кейеп ҡарағы килә... Үҙенә текләп, аңҡайып, мырш-мырш танау тартып торған малайҙы танып: "Әй, был Төхфәт ағайҙың улы Хәлил бит, ҡалай ҙурайып киткән!" - тип, һинә иғтибар итте икән, инде әллә кем булып китәһең. Настоящный һалдат ағай һине таныны бит! Балалар өсөн әҙерләп ҡуйған моҡсайҙан һалдаттың әсәһе бер-ике кәнфитмонпаси алып тоттора. Ә ағай сумаҙанынан берәй значок йә хәрби эмблема алып бирһә, шатлығыңдан күккә күтәрелгән һымаҡ тояһың үҙеңде. Әрмистәрҙең кейеп ҡайтҡан формаһы донъяла иң матур кейем булып тойола.

(Дауамы 6-сы биттә).

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығы яҡынлашып килгән ял һәм байрам көндәре хаҡында иҫкә төшөрҙө. "Рәсәй Федерацияһы Хеҙмәт кодексының 112-се статьяһына ярашлы, биш көнлөк эш аҙнаһында 23 февраль һәм 6,7,8 март ял көндәре булып тора. 22 февралдә эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡартыла. Шәмбе, 5 март та, ҡыҫҡа эш көнө була", - тип белдерҙеләр министрлыҡта. Был көндәрҙә түләүле отпускыла булғандар өсөн 23 февраль дә, 8 март та календарь көндәр иҫәбенә индерелмәй.

✓Пекиндағы Олимпия уйындарында Өфө спортсыһы Эдуард Латипов биатлон буйынса 12,5 саҡрымға эҙәрлекләү ярышында бронза миҙал яуланы. "Был бик ауыр уҙыш булды!" тип билдәләнеләр Олимпия комитетында. Ярышта Максим Цветков, Эдуард Латипов, Даниил Серохвостов һәм Александр Логинов ҡатнашты. "Ғаиләмә, туғандарыма һәм яҡындарыма, илебеҙгә рәхмәт! Һеҙ иң шәп көйәрмәндәр, - тине Эдуард Латипов ярыштан һуң. - Бөгөн һауа торошо ҡатмарлы булһа ла, мин тырыштым!".

✓25 йәшлек Рәсәй саңғысыһы Александр Большунов Пекинда барған Олимпия уйындарында үҙенең икенсе миҙалын яуланы. Спортсы скиатлонда "алтын" алғандан һуң классик стилдә 15 саҡрымлыҡ дистанцияла призлы урынға сығыу өсөн махсус рәүештә спринт ярышында ҡатнашманы. Большуновта - "көмөш". Әйткәндәй, был саңғысының шәхси иҫәбендә алтынсы олимпия наградаһы һәм дүртенсе "көмөш" миҙалы. Большунов тағы ла өс дисциплинала почёт пьедесталындағы урын өсөн көрәшергә йыйына.

✓Пекиндағы Олимпиадала Рәсәй биатлонсылары йәнә драматик ярыш ойоштторҙо. Ир-егеттәр эстафетаһын (4х7,5 саҡрым) Кәрим Хәлили башлап ебәрҙе. Һуңынан уҙышты Александр Логинов һәм Максим Цветков дауам итте. Бөтәһе лә штрафһыҙ тиерлек үтте. Эстафетаны Башҡортостан биатлонсыһы Эдуард Латипов тамамланы. Ятып атҡанда барлыҡ сәптәргә тейҙерҙе, тик бына баҫып атҡанда һынатты, шуға уға ике штраф түңәрәген үтергә тура килде. Алтын миҙал алыу мөмкинлеген юғалтып, Латипов өсөнсө булып килде. Эдуард Латипов Пекиндағы Олимпиадала өсөнсө бронза миҙал яуланы.

✓ *Рәсәйгә был сир 2007 йылда килә. Былтыр илдең 49 субъектында 445 осраҡ теркәлә. Быҡаса Башҡортостанда был инфекция күҙәтелмәһә, хәҙер Стәрлетамаҡ районының айырым территорияһында карантин иғлан ителгән.*



ҠЫҪҠАСА

# ХАҠ АРТТЫ

✓ **Башстат мәғлүмәте буйынса бер аҙнала ҡыяр хаҡы 7,2 процентҡа артҡан, уның килограмы уртаса 182 һум. Шоколад конфиттәре 5,4 процентҡа күтәрелде, уртаса 327 һум тәшкил итә. Өсөнсө урында - кәбеҫтә, уның килограмы - 58 һум тирәһе.** Шулай уҡ ҡаймаҡ, пастеризацияланған, стерилләнгән һөт, шәкәр, макарон, балалар туҡланыуы өсөн йәшелсә консервалары, ҡоро һөт ҡатнашмалары, эремсек, вермишель, һыйыр, һарыҡ иттәре, дөгө, картуф, маргарин ҡыйбатланған. Ә бына ҡыҙыл сөгөлдөр, помидор, сосиска һәм сарделькалар, киреһенсә, 3 процент тирәһенә арзанайҙы. Печенье, сыр, арыш-бойҙай икмәктәре, көнбағыш майы, алма, тауыҡ, сусҡа ите, тары, он, йомортҡа, бешкән колбаса, кишер, туңдырылған балыҡ, аҡ май, балалар өсөн ит, емеш-еләк консервалары, ҡарабойҙай, һуған, банандарға хаҡ 0,02 проценттан 2,4-кә тиклем кәмене. Бойҙай ононан бешкән икмәккә, ҡаластарға, ярым ыҫланған һәм бешкән-ыҫланған колбасаларға, сәйгә хаҡтар үҙгәрмәгән.

✓ **Коронавирусҡа экспресс-тест һөҙөмтәһе ыңғай булһа, сирҙе үткәреү тураһында сертификат алырға мөмкин, тип хәбәр итә ТАСС. Тесты медицина хеҙмәткәре эшләргә тейеш.** Һаулыҡ һаҡлау министрлығы башлығы ярҙамсыһы А. Кузнецов әйтеүенсә, әгәр экспресс-тест өйҙә үҙаллы яһалһа һәм ыңғай һөҙөмтә күрһәтһә, "122" ҡыҙыу линияһына йәки поликлиниканың колл-үҙәгенә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Шунан һуң пациентҡа диагнозды раҫлау һәм экспресс йәки ПЦР-тест эшләү өсөн медицина хеҙмәткәре килергә мөмкин. "Яңы коронавирус инфекцияһы" диагнозын ҡуйыу өсөн медицина ойошмаһында йәки лабораторияла эшләнгән экспресс-тест һөҙөмтәләре иҫәпкә алынырға мөмкин", - тине Кузнецов. Был осраҡта ПЦР-тест мотлаҡ түгел, тип өҫтәне ул. "ОРВИ-ҙың төрҙәре билдәләре бөтөнләй менән дистанцион медицина консультацияһы һөҙөмтәләре буйынса ете көнгә эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы алырға була, быһын өсөн тест һөҙөмтәләре талап ителмәй", - тип билдәләне агентлыҡ әңгәмәсеһе.

✓ **Башҡортостанда урмандарҙы тергеҙеү һәм ағас үҫентеләре үҫтереү өсөн урман питомниктары булдырыла.** Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары пленар ултырышта урманды файҙаланыуҙың яңы төрөн - "урман питомниктары булдырыу һәм уларҙы файҙаланыу"ҙы индергән закон ҡабул итте. Был төп ағас тоҡомдары үҫентеләрен үҫтереүҙе күҙ уңында тота. Урман питомниктары өсөн бүленгән участкаларҙа капиталь объекттар һәм капиталь булмаған ҡоролмалар төҙөргә мөмкин. "Башҡортостан урманды яһалма тергеҙеү күләме буйынса Волга буйы федераль округында алдынғы урынды биләй. Быға төбәк проекттары һәм урманды һаҡлау буйынса төрлө акциялар булышлыҡ күрһәтә. Ағас ултыртыу техникаһы һатып алына. Ләкин урманды тергеҙеү өсөн сифатлы үҫентеләр кәрәк. Ҡабул ителгән закон республикала питомниктар һанын арттырырға мөмкинлек бирергә тейеш", - тине парламент спикеры Константин Толкачев.

✓ **Социаль страховкалау фондының республика буйынса төбәк бүлексәһе уҙған йылда республикала тыуған балалар һанын иҫәпләне. Ғәҙәттәгесә, малайҙар күберәк.** Башҡортостан буйынса Социаль страховкалау фонды бала табыу сертификаттары нигеҙендә уҙған йылда республикала тыуған балаларҙың һаны тураһында мәғлүмәт бирҙе. Фондта белдереүҙәренсә, бөтәһе 36,9 меңдән ашыу сабый донъяға килгән.Малайҙар бер меңгә тиерлек күберәк. Бер йылда республикала 5 өс игеҙ һәм 415 игеҙәк бала тыуған. Иң күп тыуыу март айында булған. Йышыраҡ 34-35 йәшлек, ә 26 сабыйҙы 46 йәштән өлкән ҡатын-ҡыҙ тапҡан, тип белдерҙеләр ведомствола. 14 ҡыҙ һәм 23 малай 5 килограмм ауырлыкта тыуған. Яңы тыуған сабыйҙарҙың уртаса буйы - 52 сантиметр, ауырлығы - 3,3 килограмм.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯУГИРҘАР ХӘТЕРҘӘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров локаль хәрби конфликттарҙа һәләк булған яҡташтарыбыҙ иҫтәлегенә "Ҡайғылы әсә" мемориалына сәскә һалды.**

15 февраль - Рәсәйҙә Ватандан ситтә хеҙмәт бурысын үтәгән яугирҙарҙы иҫкә алыу көнө. Дата теүәл 33 йыл элек, 1989 йылдың 15 февралендә, совет ғәскәрҙәрен Афғанстандан сығарыу көнө уңайынан булдырылды. 1979-1989 йылдарҙа ошо илдәге хәрби хәрәкәттәрҙә 15 мең самаһы совет һалдаты, шул иҫәптән 343 яҡташыбыҙ һәләк булды. Тантаналы сарала Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев, Хөкүмәт вице-премьеры Ирек Сәғитов, Өфө хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Ратмир Мәүлиев, хәрби хәрәкәт ветерандары, һәләк булған яугирҙарҙың ата-әсәләре, курсанттар һәм кадеттар ҡатнашты. Христиан һәм мосолман конфессиялары вәкилдәре яуҙа башын һалған яҡташтарыбыҙға бағышлап доға ҡылды. "Ҡайғылы әсә" мемориалына сәскәләр һалыр алдынан ҡатнашыусылар локаль хәрби конфликттарҙа һәләк булғандарҙы бер минутлыҡ тынлыҡ менән иҫкә алды. Шунан һуң республика етәксеһе хәрби хәрәкәттәр ветерандары менән аралашты. "Яугир-интернационалистар - иң яуаплы, көслө һәм лайыҡлы кешеләр. Малай ғына булһаҡ та, беҙ һәр ваҡыт уларға хөрмәт менән ҡараныҡ. Улар һуғышты, яраланды, һәләк булды. Мәрхүмдәргә - яҡты иҫтәлек. Улар - ысын ир-егеттәр, дәүләттең терәге, ҡыйыу, намыҫлы һәм ғәҙел кешеләр. Мин уларға хөрмәт менән ҡарайым. Улар менән осрашҡан һайын иң тәүҙә ныҡлы һаулыҡ теләйем", - тине Радий Хәбиров.

2011 йылға тиклем 15 февраль яугир-интернационалистарҙы иҫкә алыу көнө булараҡ билдәләнде, ләкин рәсми статусы юҡ ине. Яңы дата илдең сит илдәрҙәге хәрби бәрелештәрҙә ҡатнашҡанда Тыуған илгә тоғролоҡ һәм фиҙаҡәрлек күрһәткән барлыҡ граждандарын иҫкә алыу көнө булараҡ булдырылды. Мемориал 2003 йылдың 25 октябрендә ҡуйылған. Авторы - билдәле скульптор Николай Калинушкин. Һәйкәлдең эскизы 1998 йылда Еңеү паркы төҙөлөп бөткәндән һуң эшләнгән.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# СУСҠА ҮРСЕТЕҮ... ТЫЙЫЛМАЙ

**Шәхси хужалыҡтарҙа сусҡа үрсетеү бөтөнләй тыйылырға тейеш түгел. Был хаҡта БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙа сусҡа үрсетеүҙе тыйған закон ҡабул итеү буйынса республика Ит етештереүселәр һәм эшкәртеүселәр союзының тәҡдимен өйрәнгәндән һуң белдерҙе.**

Быңдай сара Африка сусҡа тағуны таралыуына юл ҡуймау сараһы булараҡ тәҡдим ителгәйне. "Республика халҡының яҡынса 40 проценты ауылда йәшәй, ә күптәр өсөн сусҡа үрсетеү - күптәнге традицион кәсеп. Ҡәтғи тыйыу саманан тыш булып күренә, сөнки Африка сусҡа тағунынан тыш, башҡа йоғошло ауырыуҙар ҙа бар. Сусҡаларҙы шәхси хужалыҡтарҙа үрсетеүҙе тыйыу кире эҙемтәләргә килтереүе мөмкин, ә был юлдан барыу ауылдың традицион йәшәү рәүешен боҙоу тигәнде аңлата", - тине Толкачев.

Парламент спикеры билдәләүенсә, ауыл хужалығының төбәк норматив-хоҡуҡи базаһы ауыл халҡына, шәхси малсылыҡ менән шөғөлләнеүселәргә ярҙам итеүгә йүнәлтелгән, ә тыйыу аграр ҡануниәт концепцияһына тап килмәй. Шуға ҡарамаҫтан, Африка тағуны реаль хәүеф тыуҙыра, ә сирҙең таралыуынан килгән зыян шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙың килеменән күп тапҡырға артығыраҡ. Толкачев шәхси хужалыҡтарҙа сусҡалар һанын кәметеү хәүефте кәметергә мөмкинлек бирәсәк тигән фекерҙә һәм альтернатив малсылыҡ төрҙәрен үҫтереүгә күскән хужалыҡтарға дәүләт ярҙамының һөҙөмтәһе ҙурыраҡ булыуын билдәләй. Уның һүҙҙәренсә, быңдай тәжрибә Ленинградта, Һамарҙа, Ярославль, Орел өлкәләрендә, Сыуашстанда һәм башҡа ҡайһы бер төбәктәрҙә ҡулланыла. "Был анализ талап иткән ҡыҙыҡлы тәжрибә. Әммә, башҡа хәүефле сирҙәр булыу осрағындағы кеүек үк, ветеринария контроле һәм халыҡҡа хәбәр итеү бер сенсе планға сығыу тейеш. Африка сусҡа тағунына шәхси сектор бигерәк биреш. Был сусҡаларҙы контролһеҙ ташыу, уларҙы тотоу шарттарын үтәмәү, емтеке тейешенсә үтилләштермәүҙән килә. Ауыл хужалығы малдарын ваҡытында профилактик вакцинациялау өсөн теркәү тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Бында ҙур аңлатыу эше кәрәк", - ти Толкачев.

Рәсәйгә был сир 2007 йылда килә. Шунан башлап йыл һайын ул үҙен һиҙҙереп тора. Былтыр илдең 49 субъектында 445 осраҡ теркәлә. Быҡаса Башҡортостанда был инфекция күҙәтелмәһә, хәҙер Стәрлетамаҡ районының айырым территорияһында карантин иғлан ителгән, башҡа өлөшө, шулай уҡ Стәрлетамаҡ ҡалаһы һәм Ауырғазы районы насар эпизоотик хәл-торош зонаһына инә.

**Розалия ВӘЛИЕВА.**

# ЭШСЕЛӘР ЕТМӘЙМЕ?

**Республикала быйыл хеҙмәт мигранттары ағымының тергеҙелеүе көтөлә, йәғни 22 мең самаһы сит ил эшсеһе хеҙмәт эшмәкәрлегенә патент алыуы мөмкин.**

Башҡортостан Хөкүмәте 2022-2025 йылдарға Миграция сәйәсәте концепцияһын раҫланы. Документҡа ярашлы, алыҫ сит илдәрҙән тағы ла күберәк эшселәр йәлеп итеү планлаштырыла (ҡағыҙҙа булараҡ, улар юғары квалификациялы белгестәр). Быйыл 300-ҙән алып 2025 йылға 360 кешегә тиклем. Квалификациялы белгестәрҙең өлөшө 90 проценттан кәм булмаҫҡа тейеш. 2024-2025 йылдарҙа 26 мең кешегә патент алыу өсөн шарттар булдырыу бурысы ҡуйылды. Алдан хәбәр ителгәнсә, сит ил эшселәренең хеҙмәт эшмәкәрлеген тормошҡа ашырыу өсөн патенттың уртаса хаҡы ағымдағы йылға 4,4 мең һум күләмендә билдәләнде. Әгәр 22 мең кеше патент алһа, дәүләт ҡаҙнаһына 96,8 миллион һум аҡса күсә.

2020 йылда - пандемия осоронда Башҡортостанға хеҙмәт мигранттары ағымы ҡырҡа кәмегән - 10,6 мең кеше, 2019 йылғы кимәлдән 60 процентҡа аҙыраҡ. 2021 йылдың ғинуар-сентябрендә республикала рәсми эшкә урынлашҡан мигранттар 15 меңгә еткән, уларҙың 14,7 меңе патент алған, тип белдерҙеләр Башҡортостан Республикаһының Хеҙмәт министрлығында. Хеҙмәт мигранттары башлыса төҙөлөш һәм ауыл хужалығы өлкәһенә эшкә йәлеп ителгән. 2021 йылдың туғыҙ айы йомғаҡтарына ҡарағанда, статистика миграцияның ыңғай сальдоһын теркәгән. Республикала халыҡ-ара миграция үҫешә 2021 йылдың ғинуар-сентябрендә 5,2 меңдән ашыу кеше тәшкил иткән. Был республиканың дөйөм миграция үҫешендә лә сағылыш тапҡан, ул 4,3 мең кешегә еткән.

Миграция ағымында республиканан ситкә уҡырға киткән һәм ситтән килгән студенттар ҙа ҙур роль уйнай. 2021 йылда Өфөнөң юғары уҡыу йорттарында 5 мең сит ил студенты иҫәпләнде. Евразия ғилми-белем биреү үҙәген ойоштороуға бәйле 2030 йылда уларҙың 15 меңгә етеүе көтөлә. Хәҙер баш ҡаланың юғары уҡыу йорттары сит ил студенттары иҫәбенә йылына яҡынса 400 миллион һум "аҡса эшләй".

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнән конькиҙа йүгереүсе Руслан Захаров Пекиндағы Олимпиадала команда менән эҙәрләкләү ярышында көмөш миҙал яуланы. Финал уҙышында рәсәйҙәр норвегтарҙан еңелде. Американдар, Нидерландтар командаһын уҙып китеп, бронза миҙал алды. Шулай итеп, Рәсәйҙең конькиҙа йүгереү спорты буйынса ир-егеттәр йыйылма командаһы Пекиндағы Олимпия уйындарында эҙәрләкләү уҙышында көмөш призер булды. 34 йәшлек Руслан Захаров Сочиҙа үткән Олимпиадала уҡ шорт-тректа Башҡортостан өсөн сығыш яһап, эстафетала алтын миҙал алғайны.

✓Рәсәй Хөкүмәте Рәсәйҙең йыйылма командаһы енеүселәре өсөн аҡсалата бүләктәр тураһында мәғлүмәт баҫтырып сығарҙы. Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте премьер-министры Михаил Мишустин һүҙҙәренсә, Пекинда Олимпиада һәм Паралимпиада атлетында алтын миҙал өсөн 4 миллион һум бирелә, көмөш миҙалға - 2,5 миллион һум, бронзаға - 1,7 миллион һум. Башҡортостандан Олимпия һәм Паралимпия уйындары енеүселәре, призерҙары 2 миллион, 1,5 миллион һәм 1 миллион һум менән бүләкләнә.

✓Өфөлә һунырай ваҡытҡа һәм махсус күрһәтмәгә тиклем фестивалдәр, смотрҙар, конкурстар һәм физкультура сараларын уҙғарыу кусерелә. Был COVID-19 таралыу хәүефенә бәйле. Тейешле ҡарарға баш ҡала хакимиәте башлығы ҡул ҡуйған. Бынан тыш, махсус бойороҡҡа тиклем "30-ҙан ашыу хеҙмәткәр эшләгән йәки саҡырылған хеҙмәткәрҙәр ҡатнашлығында хеҙмәт коллективтары йыйылыштарын һәм башҡа күмәк саралар уҙғарыу тыйыла", тип билдәләнә документта. Шулай уҡ махсус бойороҡ сыҡҡансы "граждандарҙы ҡабул итеүҙе ойоштороуҙан (уларҙың ризалығы буйынса") тыйылып торорға кәңәш ителә.

✓2021 йылғы эш йомғаҡтары буйынса Өфө аэропорты VIII "Рәсәйҙең һауа ҡапҡалары" милли премияһына лайыҡ булды һәм йылына 2-4 миллион пассажир категорияһында илдең иң яҡшы өс аэропорты иҫәбенә инде. Бүләкләү тантанаһы Мәскәүҙә NAIS-2022 Граждандар авиацияһы инфраструктураһының милли күргәҙмәһе барышында үтте. 2021 йылда "Өфө" аэропорты пассажир ташыу күләмен һиҙелерлек арттырҙы, 2020 йылдың ғына түгел, ә пандемияға тиклемге 2019 йылдың күрһәткестәрен дә уҙып китте. Өфө аэропорты үҙ тарихында тәүге тапҡыр бер йылда 4 миллиондан ашыу пассажирҙы хеҙмәтләндерҙе.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Өфө урамдары һәм ихаталарында булып, ул ҡайҙа намыҫлы эшләүҙәрен, ҡайҙа етәксе килер алдынан ғына "күҙ буяуҙарын", артабан 30-40 метр үтеүгә "ҡар әсирлеге" башланыуын тәнҡитләне.*

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# БАШ ҠАЛАҒА...

## яңы хакимиәт башлығы килде



**Быға тиклем Нефтекама ҡала хакимиәте башлығы булып эшләгән Ратмир Мәүлиев Өфө хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Бындай ҡарар Өфө ҡала Советының сираттан тыш ултырышында ҡабул ителде.**



Депутаттар Сергей Грековтың вәкәләттәрен ваҡытынан алда туҡтатыу өсөн дә тауыш бирҙе. Хәҙер ул республика Хөкүмәте вице-премьеры рангында Башҡортостандың Мәскәүҙәге Тулы хоҡуҡлы вәкиллеген етәкләй. Сергей Греков Башҡортостан Башлығына бер командала эшләү мөмкинлеге, шулай уҡ Өфө халҡына ҡала тормошонда әүҙем ҡатнашҡан һәм килеп тыуған проблемаларҙы аңлаған өсөн рәхмәт белдерҙе.

Радий Хәбиров депутаттар алдында сығыш яһағанда бөгөн Өфө өсөн мөһим көн булыуын билдәләне. "Өфөлә бер нисә ҙур инфраструктура проекты алып барыла. Тағы бер ҙур "Өфөнөң көньяҡ ҡапҡалары" инфраструктура проекты башлана. Беҙҙең бурыс - төҙөү генә түгел, халыҡ өсөн уңайһыҙлыҡтарҙы кәметеү ҙә. Яңы команда алдында Өфөнөң 450 йыллығына әҙерләнеү бурысы тора. Был иһә стратегик бурыстарҙы хәл итеү өсөн яҡшы һылтау. Быйыл ҙур юбилей объекттары төҙөлә башларға тейеш. Өфө иҡтисады һәйбәт һөҙөмтә күрһәтә, ләкин үҫеш потенциалы бар әле", - тине республика етәксеһе һәм Сергей Грековтың Өфө мэры вазифаһында эшләү осоро еңел булмаған ваҡытҡа тура килеүен билдәләп, ошондай ҡатмарлы шарттарҙа эшләгән ҡала хакимиәте командаһына рәхмәт белдерҙе. Шулай уҡ ул Ратмир Мәүлиевтың шәхси һәм эшлекле сифаттарын, күрһәткән эшен билдәләне: ул етәкселек иткән осорҙа Нефтекама үҙгәрҙе, унда динамика, инвестиция йәлеп итеүсәнлек барлыҡҡа килде, ҡала икенсе төҫ алды. Ратмир Мәүлиев 1989 йылдың 14 августында Нефтекамала тыуған. 2011 йылда Башҡорт дәүләт университетын тамамлап, юрист дипломын алып сыға. Шул уҡ йылда Мәскәүҙә халыҡ-ара юғары бизнес мәктәбендә ҡайтанан әҙерлек үтә. 2014 йылда Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университетын тамамлай. Ул шәхси эшҡыуар булып эшләй, күпмелер ваҡыт Татарстанда муниципаль район башлығы кәңәшсеһе була. 2019 йылдың мартында Нефтекама хакимиәте башлығы итеп һайлана.

* * *

Заман ахырында ваҡиғалар күҙ йомоп асҡансы үҙгәреп торор, тиҙәр ине беҙҙең өләсәйҙәр. Бөгөн дә, имеш-мимештәр алдан уҡ ишетелә башлаһа ла, хәл-торош шул тиклем тиҙ үҙгәрә - күптәрен белмәй ҙә ҡалабыҙҙыр, моғайын. Яңы йыл алдынан Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығының вазифаһынан китәсәге хаҡында һүҙҙәр ишетелде ул ишетелеүен, әммә әллә ни күп ваҡыт эшләмәгән кешене тиҙ арала вазифаһынан бушатыуҙарына бик ышанып та етмәнек. Һәм ҡапыл, бер көн эсендә тиҙ генә хәл үҙгәрҙе: Сергей Греков Башҡортостандың Мәскәүҙәге тулы хоҡуҡлы вәкиллегенә етәксе булып китте, уның урынына ваҡытлыса вазифа башҡарыусы итеп Нефтекама ҡалаһы башлығы Ратмир Мәүлиев килде. Йәш кеше йәш инде - шунда уҡ "үгеҙҙе мөгөҙөнән" эләктереп, тәү сиратта ҡаланың торлаҡ-коммуналь хужалығы тармағын үҫтереү буйынса күсмә ултырыш үткәрҙе. Киров районы хакимиәтендә уҙған сарала республиканың торлаҡ-коммуналь хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Алан Марзаев, баш ҡала райондары хакимиәттәре башлыҡтары, коммуналь предприятиелар етәкселәре ҡатнашты.

Ратмир Мәүлиев белдереүенсә, ҡала территорияһын ҡарҙан таҙартыу - тиҙ арала хәл ителергә тейешле мәсьәлә. Әлеге ваҡытта был һорау буйынса граждандарҙан бик күп мөрәжәғәттәр йыйылған. Ҡалала ҡар таҙартыу эше нисек ойошторолоуы менән ҡала хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов таныштырҙы. Ҡар таҙартыуға барлығы, юл хеҙмәткәрҙәрен һәм механизаторҙарҙы ла индереп, 1694 кеше йәлеп ителгән. Ҡаланан сығарылған ҡар күләме 30 процентҡа артҡан. Бер тәүлектә генә 36745 кубометр, йәғни 1920 рейс ҡар сығарылған. Алан Марзаев белдереүенсә, бөгөн урамдар һәм тротуарҙарға ғына түгел, ә күп фатирлы йорт ихаталарына ла иғтибар бирергә, республика етәкселеге ярҙамында алынған яңы техниканы һөҙөмтәле файҙаланырға кәрәк.

Ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Ратмир Мәүлиев ТКХ министры вазифаһын башҡарыусы тарафына тәнҡит һүҙҙәрен дә еткерҙе. Өфө урамдары һәм ихаталарында булып, ул ҡайҙа намыҫлы эшләүҙәрен, ҡайҙа етәксе килер алдынан ғына "күҙ буяуҙарын", артабан 30-40 метр үтеүгә "ҡар әсирлеге" башланыуын, шулай уҡ ихаталарҙы таҙартҡанда хужаһыҙ транспорттың алынмауын, ҙур күләмле сүп-сар сығарылмауын, сүп-сар майҙандары ваҡытында таҙартылмауын тәнҡитләне. Шулай уҡ ул урам таҙартыусыларҙың ял итеү шарттары менән дә таныште, уларҙың йәшәгән урынының тәртиптә һәм таҙа булыуын билдәләне. Кәңәшмәлә "Башҡортостан ихталары" ихаталарҙы комплекслы төҙөкләндереү программаһын тормошҡа ашырыуға әҙерлек һәм Өфө торлаҡ-коммуналь хужалығы тармағының башҡа мәсьәләләре лә ҡаралды.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЭШТӘР ГӨРЛӘЙ



**Баш ҡаланан Көнсығыш сығыу юлында Ҡариҙел йылғаһы аша күпер һалына. Республиканың транспорт һәм юл хужалығы министры Александр Булушев белдереүенсә, бындай масштабтағы объект быға тиклем төбәктә төҙөлмәгән булған, шуға күрә республика төҙөлөшкә бар яҡлап ярҙам күрһәтә.**

Күперҙең оҙонлоғо - 470 метр, металл конструкцияларының ауырлығы - 5 мең тоннанан ашыу. Эштең йылдам барыуын иҫәпкә алғанда, төҙөлөштө быйыл ноябрҙә тамамлау планлаштырыла. Әле эштәрҙең 35 проценты башҡарылған. Эстакадалы күперҙең 72 терәүҙә тороуы уны ташҡындан һаҡлар һәм йылғала суднолар йөрөүен тәьмин итер тип күҙаллана. Проект 1276 метрлыҡ тоннель төҙөлөшөнөң тамамланыуын, Ҡариҙел йылғаһында 2,65 километр оҙонлоғонда эстакадалы күпер һәм 10 километрлы автомобиль юлы төҙөлөшөн үҙ эсенә ала. Тотош объект 2024 йылда файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Көнсығыш сығыу юлы Өфөнөң үҙәк өлөшөн "Урал" М-5 федераль трассаһы менән тоташтырыр һәм баш ҡаланың транспорт инфраструктураһын, М-5 һәм М-7 трассалары араһындағы бәйләнеште һиҙелерлек яҡшыртыр тип күҙаллана.

# ЭЛЕКТРОБУС ҺЫНАУ ҮТӘ




**Өфөлә заманса "КамАЗ-6282" моделле электробусты һынау башланды. Ул ике ай буйына пассажирҙарҙы хеҙмәтләндерәсәк.**

Электробус республиканың баш ҡалаһына "КамАЗ" асыҡ акционерҙар йәмғиәте менән "Өфө ҡалаһы транспорт инфраструктураһы идаралығы" МУП-ы араһындағы килешеү буйынса килгән. "Өфө кеүек алдынғы ҡаланың йәмәғәт транспорты паркын яңыртырға тырышыуына шатбыҙ, - ти "КамАЗ" компанияһының әйҙәүсе инженер-электротехнигы Антон Сагдединов. - Электр автобусының өҫтөнлөктәре күренеп тора: уның салоны уңайлы, тауышһыҙ, тирә-яҡ мөхитте бысратмай, сымдарға бәйле түгел һәм троллейбусҡа ҡарағанда күпкә өҫтөнөрәк".

Өфө хакимиәтенең Транспорт һәм элемтә идаралығы начальнигы Олег Хмарин әйтеүенсә, батареяның мөмкинлектәрен һалҡын шарттарҙа тикшереү өсөн аңлы рәүештә ҡыш миҙгеле һайланған. "Техник характеристикалар буйынса, транспорт сараһы 85 пассажирға иҫәпләнгән, унда 35 ултырыу урыны бар. Электробус 60 километрға тиклем йөрөй ала. Максималь тиҙлеге - сәғәтенә 80 километр, аккумулятор батареяларының ҡеүәте - 80 кВт/сәғ, зарядлау ваҡыты - 10 минуттан 24 минутҡа тиклем, - тине ул. - Һынау һөҙөмтәләре буйынса беҙҙең климат шарттарында уның эшләүенә эксперт баһаһы биреләсәк. Шулай уҡ граждандарҙың юл йөрөү уңайлылығы тураһында фекере лә иҫәпкә алынасаҡ".

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Эс ҡатһа

❖ Иртәнсәк һайын ике стакан һыу: бүлмә температураһындағы һәм эҫе һыу эсергә кәрәк. Иртәнге аштан ярты сәғәт алда 1 алма ашарға һәм 2 ҡалаҡ үҫемлек майы ҡушып һыуға иҙелгән талҡан ашарға. Ҡуйы килеп сыҡһа, эҫе һыу өҫтәп, 5 минут тоторға һәм 2 балғалаҡ бал ҡушырға. Иртәнге ашҡа йәнең телгән ризыҡты ашарға була, ләкин 1,5-2 сәғәттән һуң мотлаҡ 1 стакан һыу эсергә. Ә төшкө аштан алда 1 банан ашарға. Киске аш алдынан да шулай итергә. Ашҡаҙанэсәк эшмәкәрлеге яҡшырғандан һуң көнөнә бер генә банан ашарға ла ярай.

## Һалҡын тейһә

Киҫкен респираторлы вируслы инфекцияға бәйле ҡолаҡ, тамаҡ һәм танау ауырыуҙары, бронхитты үләндәр менән дауаларға була.

❖ Татлы тамыр - 1 өлөш, һаҙанаҡ үләне (багульник болотный), андыҙ тамыры, ҡарағай бөрөһө, алтын тамыр - 2 өлөш, һары мәтрүшкә үләне һәм дөр-дөр сәскә тамыры (пион уклоняющийся) - 3 өлөш, ҡылыс үлән тамыры һәм гөлйемеш - 4 өлөш алырға.

❖ Тигеҙ өлөштә татлы тамыр, тал ҡайырыһы, шифалы ромашка һәм йүкә сәскәһе, гөлйемеште алырға.

❖ Татлы тамыр - 2 өлөш, бадан тамыры, мәтрүшкә, ҡарағай ылыҫы, кориандр емеше - 3 өлөш, ҡурай еләге япрағы һәм шифалы календула сәскәһе - 5 өлөш алырға.

Был өс төрлө йыйылманан эшләнгән төнәтмәләр ярҙамында дауаланыу ысулы бер үк. 2 балғалаҡ йыйылмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, талғын утта 10 минут ҡайнатырға, уттан алып 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Йылымыс көйөнсә көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда 1/3 стакан эсергә. Әҙер төнәтмәне һыуытҡыста 2 тәүлектән артыҡ һаҡламаҫҡа.

## Йөрәк ауыртһа

1 ҡалаҡ шыйыҡ бал, 45-әр тамсы корвалол, валокордин, арыҫлан ҡойроғо, валериана, энәлек төнәтмәләрен ҡушып, яҡшылап болғарға. Йөрәк ауыртҡанда күкрәк аҫтына һөртөргә. Йөрәк сәнсеп ауыртҡанда уның тапҡырына борослo пластырь йәбештереп ҡуйырға була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

**✓ Ә һалдаттың оҙаҡ ваҡыт "нужа һурпаһын һемереп" йөрөүе хаҡында, әлбиттә, бер ни ҙә белмәйбеҙ. Уларҙы тик ана шул матур кейемдәрен кейеп, теҙелешеп, "һайт-два" тип кенә йөрөгән һымағыраҡ итеп күрәбеҙ.**



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Тимер ауылындағы һике боронғо комодҡа оҡшаған. Ул тулыһынса ҡаплы, ике яҡҡа асмалы, өҫтә тартмалары бар. Һикенең өҫкө һәм аҫҡы өлөшөн ҡыя шаҡмаҡтар һәм урта тирәһендә нәҙегәйтеп эшләнгән вертикаль фигураларҙан торған орнамент һыҙаты бүлеп тора. Ул үлсәмдәре буйынса тап килеп торған таҡта менән ябылған, алғы яғында бысҡы биҙәкле йөҙлөк ҡағылған. Аҫҡы өлөшөндә ишелгән сәмәрле һыҙат, сите "кирбес" рәүешендә һырлап эшләнгән. Киң терәү тауҙары "арҡан" менән уратылған. Уртаһында үҫемлекте хәтерләткән сәмәр киртеп эшләнгән. Өҫтәге тар тартмалары араһында ике шаҡмаҡ эсенә ағас һәм дүрт тажлы сәскә уйылған. Шулай уҡ тартма ҡапҡасындағы шаҡмаҡ эсенә эшләнгән түңәрәктәр ҙә ниндәйҙер мәғәнәгә эйә кеүек. Шул уҡ ваҡытта аҫҡы киң ишектәренә ысынбарлыҡтан сюжеттар төшөрөлгән. Балалар рәсеме кеүек күренгән ағас ботаҡтары, япраҡтар, шыршы, балыҡ эшләнгән.

*Һике Бөрйән районы, Тимер ауылы. В. С. Сыромятников альбомынан. БХМ архивы*



Бөрйән районында бындай үҙенсәлекле мебель эшләнеүен оҫтаның фантазияһына бәйләп аңлатырға булыр ине. Әммә быға оҡшаш әйберҙәр башҡа халыҡтар көнкүрешендә булыуын иҫәпкә алғанда, халыҡ хәтерендә һаҡланған мәҙәни традицияларҙы үҙенсә аңлау тип уйларға кәрәк. Мәҫәлән, ҡаҙаҡ тирмәләрендәге һырланған һәм буялған кебеже - аҙыҡ-түлек һаҡлау өсөн һикеләрен телгә алырға мөмкин. Тимер ауылындағы һике нуғайҙарҙың аҙыҡ-түлек өсөн шкафтарына оҡшаш, улар ҙа алғы яғына шундай уҡ биҙәктәр төшөргән: өҫтөнән һыҙылған тура дүртмөйөштәр, түңәрәк йәки төртөктәр төшкән дүртмөйөштәр. Бындай биҙәктәр (өсмөйөш, ҡыя шаҡмаҡ, өҫтөнән һыҙылған тура дүртмөйөш, түңәрәк эсендәге сәскә, оҙонса һыҙаттар) төшөрөлгән ларҙар Дағстан халыҡтарында ла киң таралған булған. Бындай лар, һике һәм ҡумталар башҡа халыҡтарҙа - хакастарҙа, ҡырғыҙҙарҙа һ.б. ла осраған. Башҡорт һикеләрендәге сюжетлы һүрәттәрҙе оҫтаның шәхси ижад емеше тип иҫәпләргә була, ләкин улар ҙа осраҡлы ғына төшөрөлмәгән. Стиле йәһәтенән улар Көньяҡ Себер халыҡтарының көнкүреш һәм ғибәҙәт ҡылыу өсөн тәғәйенләнгән әйберҙәрендәге һүрәттәргә яҡын тора (шул иҫәптән хакастарҙың һикеләренә).

С.И. Руденко өҫтәлдәрҙе башҡорт йортона хас булмаған йыһаз һәм уларҙың төҙөлөшөндә, биҙәгендә "күрше милләттәрҙән үҙләштереү эҙҙәре бар" тип яңылыш иҫәпләүе көн кеүек асыҡ. Үрҙә һүрәтләнгән өҫтәл-һикеләр боронғо традицияләр йоғонтоһонда эшләнгән. Этнография хеҙмәттәренән төрҡиҙәр һәм монголдар күскен тормошта төрлө формалағы һәм төҙөлөшлө тәпәш өҫтәлдәр ҡулланыуы билдәле. С.И. Руденко китабында Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышынан булған бер тәпәш өҫтәл һүрәте бирелгән, ул матур ғына тояҡлы ҙур булмаған йәшник рәүешендә эшләнгән. Уның ал яғы ҡабарынҡы биҙәк менән сәмәрләнгән. Ғалим үҙ һүҙҙәрен кире ҡаҡҡан кеүек, өҫтәлдең сәмәрҙәре ҡайһы бер ҡаҙаҡ орнаменттарын хәтерләтте тип яҙа һәм шул рәүешле уның көнсығыш донъяһына хас булыуын иҫбатлай. Бөрйәндәрҙә ул бейек өҫтәлде һүрәткә төшөрөп алған. Биҙәлешенә ҡарағанда, алда әйтеп үтелгән тәпәш өҫтәл менән бер оҫтахананан.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас сәмәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ӘРМЕЛӘ БУЛМАҒАНДАРҘЫ...

## ҡыҙҙар яратмай ине

**(Башы 3-сө биттә).**

Нишләп уны ҡайтҡас та кейеп йөрөмәй, сисеп ташлайҙар икән, тип тә уйланыла ине. Һалдаттың әйткән һәр һүҙенә иғтибар итәбеҙ. "Конечно", "потому что", тигән һымағыраҡ бер аҙ урыҫса һүҙҙәр ҡатнаштыра биреп, әрмелә булған берәй хәлде һөйләй башлаһа, йотлоғоп тыңлайбыҙ, хатта шул һалдаттың өйөнән сыҡҡы ла килмәй. Бер аҙҙан "Ҡасан ғына ошо ағай һымаҡ һалдат булып, өйгә ҡайтырмын икән?" тип хыяллана-хыяллана урамға сығып китәһең...

Ә һалдаттың оҙаҡ ваҡыт (ул саҡта әрме хеҙмәте өс йыл ине) "нужа һурпаһын һемереп" йөрөүе хаҡында, әлбиттә, бер ни ҙә белмәйбеҙ. Уларҙы тик ана шул матур кейемдәрен кейеп, теҙелешеп, "һайт-два" тип кенә йөрөгән һымағыраҡ итеп күрәбеҙ. Хеҙмәт ауырлығы, ундағы һәр төрлө проблемалар тураһында был ағайҙарҙың үҙҙәренән дә, башҡа сығанаҡтарҙан да бер ниндәй мәғлүмәт ишетелмәй торғайны. "Йәш саҡта мине ҡарт һалдаттар ҡыйырһытты", тигәндәрен, йәғни "дедовщина" тигән нәмә хаҡында бер генә һалдаттан йә башҡа кешеләрҙән дә ишеткәнем булманы. Әлбиттә, "ирмен" тигән ир-егет был хаҡта бер кемгә һәм бер ҡасан да һөйләмәйәсәк. Бик һирәк кенә осраҡта үҙҙәренең "дембель" сағы - "старик" дәүерен, хеҙмәттәштәрен һағынып иҫкә алғандары хәтеремдә...

Башта әйтмешләй, медицина институтына инеп киткәс тә хәрби форма кейеп йөрөү теләге һүрелмәне. Драмтеатрҙа артистарыбыҙ ҡуйған спектаклдәрҙең бер премьераһын да ҡалдырмай ҡарай торғайным. Ә "Тиле йәшлек"кә әллә күпме мәртәбә барғанмындыр. Ауылға агроном булып килгән Һандуғас исемле сибәр ҡыҙҙы үҙенә бер нисек тә ҡарата алмаған Зөлҡәрнәй атлы егеттең (ул ролдә Фидан Ғафаров уйнаны) хәрби кеше булырға хыялланып, әҫәрләнеп һөйләгән һүҙҙәре һаман иҫемдә: "...Их, егеттәр, ауылыбыҙ ҡыҙҙарының күҙен ҡыҙҙырып, офицер булып, ауылға ҡайтып төшөргә ине! Шығырҙап торған хром итек, шығырҙап торған портупея, ә янында - шығырҙап торған мәрйә!.." Спектакль аҙағында Зөлҡәрнәйҙең инде ологайып, полковник дәрәжәһенә еткән етди кеше булып, тыуған ауылына ҡайтҡанын күреп кинәнә инем...

"Шығырҙап", тигәндәй, мәрйәләр хаҡында бер ҡасан да башыма уйҙар килмәне, әлбиттә. Үҙебеҙҙең "ҡараҡас" башҡорт ҡыҙҙарын, айырыуса, ауылдыҡыларҙы яҡын күрҙем. Әммә "портупея, хром итектәр", ысынлап та, үҙенә ныҡ тартты. Куйбышев хәрби медицина факультетында (ул саҡта уны барыһы ла "академия" тип атай ине) уҡып йөрөгән бәгзе бер егеттәребеҙ, әле әйтмешләй, индәренә көмөш ялатылған курсант погондары тағып, һоро шинель кейеп, билдәрен йылтырап торған пряжкалы ҡайыш менән быуып каникулға ҡайтҡан арала институтыбыҙға килеп күренгеләй торғайны. Ана шул буласаҡ хәрби врачтарға күҙем ҡыҙып, ҡасан дүртенсе курсты тамамлармын икән, тип түҙемһеҙлек менән көткәнем хәтеремдә. Ә инде 1979 йылда хәрби комиссариат медицина комиссияһында "Годен к строевой службе" тигән заключение алып, академияға күсеп киткәс, үҙемде иң бәхетле кеше итеп тойоуымды иҫләйем.

Хеҙмәт иткән дәүерҙә лә хәрби кейемдә йөрөргә яраттым. Ҡайһы бер һалдаттар, хеҙмәтен бөтөрөп, өйҙәренә "гражданка" кейеп ҡайтыр булһа, һәр саҡ уларға иҫкәрмә яһай торғайным: "Нишләп форма киймәй ҡайтырға йыйындың? Һин бит ҡайҙалыр "калымда" йөрөмәнең! Ике йыл буйы нужа күреп, ил һаҡланың!" Хатта мөмкинлектәремдән файҙаланып, бәгзе яҡташтарыма һәр төрлө һалдат значоктары табып биргеләй торғайным. "Дуҫтарың, таныш ҡыҙҙарың ҡаршыһына балҡып ҡайтып ин! Һин - ил һаҡсыһының, ана шуның менән ғорурлан!" - тип ялҡынлы һүҙҙәр әйтергә лә йәлләмәнем. Район гәзиттәренә яҡташ егеттәрҙең нисек тырыш, яҡшы һалдат булыуҙары хаҡында мәҡәләләр ҙә йыш ҡына яҙып ебәргеләгәнем булды.

Һаулығы самалы булыу йә башҡа сәбәптәр менән әрме хеҙмәтенән ҡалғыһы килмәгән әллә күпме яҡташты ла беләм. Сираттағы бер ялым яҙғы саҡырылыш осорона тап килгәйне. Шунда бер ҡоҙа тейеш егетте Баймаҡта осраттым. Кәйефһеҙ күренә. "Нишләп балтаң һыуға төшкән һымаҡ йөрөп ятаһың, Булат ҡоҙа?" - тип һорайым. "Военкоматҡа китеп барам. Үткән көҙ ҡолаҡ буйынса "отсрочка" биргәндәр ине. Тағы кире бороп, өйгә ҡайтарып ебәрерҙәр тип ҡурҡам..." Бер нисә көндән уны тағы күреп, хәлдәрен һораштым. "Бында үткәрҙеләр ҙә ул, тик Өфөнән кире бороп ҡайтарып ебәрмәһәләр генә ярар ине..." - ти Булат. Ҡасан "отправка" булыуын һораштым. Минең отпуск бөтөп барған мәлгә тап килә икән. Шул ваҡытта үҙем баш ҡалала буласағымды, шунда йыйылыу пунктына инеп сығырға ниәтләүемде әйттем. Һөйләшелгән ваҡытта, Өфөләге йыйылыу пунктына барҙым. Иңбашына рюкзагын аҫып алған Булаттың кәйефе бөтөнләй төшкән. "Әпәт ярты йылға кире ҡайтарып ебәрәләр, - тине ул мине күргәс, - хәҙер ни күҙем менән өйгә ҡайтып инергә?.." Ул саҡта мин өлкән лейтенант дәрәжәһендә инем. Егетте эйәртеп, әлеге пункттың начальнигына индем. "Ниндәй генә ғәскәргә булһа ла барырға риза ул. Тик кире ҡайтҡыһы ғына килмәй", - тип әйттем. Халҡыбыҙҙа "Энә артынан еп үтә" тип тә әйтәләр бит әле. "Товарищ старший лейтенант, ә һеҙ үҙегеҙ ҡайҙа хеҙмәт итәһегеҙ?" "Фәлән гарнизонда". "Как раз шунда бер команда йыйып ятабыҙ, иртәгә китергә тейештәр. Табип комиссияһы менән килешербеҙ, туғаныңды үҙенә ебәрербеҙ, улай булғас..." Ошо турала ишетеп торған Булат ҡоҙамдың түбәһе күккә тейҙе, әйтерһең дә уға "һине институтҡа уҡырға алдылар" тип һөйөнсөләнеләр... Һис проблемаһыҙ, ике йылын намыҫ менән үтәп (ҡолағына ла бер мәртәбә лә зарланманы), имен-аман өйөнә ҡайтып та китте.

Ә хеҙмәт итеп йөрөгән бәгзе яҡташтарыбыҙҙың, ваҡытынан алда һаулыҡ буйынса "комиссовать" ителеп ҡайтыу мәсьәләһе торһа, уныһы ла бер бәлә була торғайны (табип булараҡ, шундай осраҡтарҙы ла күрергә тура килә ине). Медицина статьяһы буйынса демобилизацияланып, шатлана-шатлана тыуған яғына ҡайтып китәһе урынға, егеттәребеҙ, киреһенсә, ана шундай хәлдә бик ауыр кисерә. Хеҙмәт срогы тулмай тороп, мөмкин тиклем ҡайтмаҫҡа тырышҡан яҡташтарыбыҙҙы "Нисек итеп иптәштәрем күҙенә күренергә, хатлашып торған ҡыҙыма нимә тип әйтергә?.." тигән һорау ныҡ борсой торғайны.

Тағы ла шуны әйтер инем: ир-егеттәребеҙ ил һаҡлауға яуаплы эш тип ҡараған һымаҡ уҡ, ҡыҙҙарыбыҙҙың да күпселеге өс йыл буйы әрменән һалдат көтөп алыуҙы үҙҙәренең почетлы бурысы тип һананы. "...Вы - солдаты, мы - ваши солдатки. Вы служите, мы вас подождем..." тип йырларға ла ярата торғайны улар. Өфөләге вуздарҙың береһендә уҡып йөрөгән ике туған һеңлемә күҙе төшөп, уның менән дуҫлашырға теләгән бер шәп егетте хәтерләйем. Буласаҡ табип, әрмелә лә булған. Һылыуым хатта үҙе лә уға битараф түгел ине. Әммә: "Фәлән синыфташымды армиянан көтөргә биргән вәғәҙәмде боҙа алмайым", - тип, был егеткә ризалыҡ биреүҙән баш тартты.

Бына шундай дәүер булды беҙҙең ваҡытта. Ир-егеттәребеҙгә булған ышаныс, уларҙы потенциаль тышҡы дошмандан һаҡлаусы тип һанау тойғоһо халҡыбыҙҙың ҡанына ла һеңгәндер, тигән уйҙар ҙа килә бирә ҡуя ҡай саҡ. Туҡһанынсы йылдары төрлө мәғлүмәт сараларында бәгзе берәүҙәр әрмебеҙҙең ек-йоғон күрергә тырышып, уны хатта "нәжескә буярға" маташҡан осорҙарҙа яҡташтарымдың бына шундай аҙымға бармауын күреп шатлана торғайным. Үҙебеҙҙең яҙыусы, журналистарыбыҙҙың һәр саҡ ил һаҡсылары яғында булыуы күңелде тынысландыра ине. Үҙҙәре әрме һурпаһын эскән күп кенә әҙиптәребеҙҙең дә хәрби хеҙмәт хаҡында насар хәтирәләрен, кире фекерҙәрен бер ҡасан да ишеткәнем юҡ. Бөгөнгө йәштәребеҙ араһында ла әрмебеҙгә йылы ҡараш һаҡлаусылар күптер тип ышанғы килә. Тыныс шарттарҙа рухи һәм физик яҡтан сыныҡыуға сәбәп булырҙай әрме хеҙмәтенә барыуҙан егеттәребеҙ һис кенә лә ҡурҡмаһын, тимәксемен. Ә ҡыҙҙарыбыҙ ир-егеттәргә тормошта һәр саҡ терәк булырға әҙер булһын.

Һуңғы осорҙар илебеҙҙең көнбайыш сиктәрендә НАТО дәүләттәренең әүҙемлеге, ҡасандыр хатта беҙҙең менән союздаш булған бәгзеләрҙең алып барған сәйәсәте, беҙгә ҡорал төҙәп тороуҙары борсолдора. Халыҡ-ара хәлдәр уҙған быуаттың утыҙынсы йылдарының аҙағын бер аҙ хәтерләтеп, күңелдәргә шом һала. Шундай уйҙарға төшөп китә башлаһаң, Әкрәм Дауытовтың ошо шиғыр юлдары һәр саҡ иҫкә төшә:

*Шинелем, шинелем,*
*тынғыһыҙ күңелем,*
*Берүк саң бөртөгө теймәһен!*
*Эленеп шул кейгә*
*һаҡланһын һәр өйҙә,*
*Тик бөтә ил шинель киймәһен!*

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы медицина подполковнигы.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

11

# Туған телем!

19-25 февраль (шаҡай)
2022 йыл
№7 (997)

ИҢ МАТУР ҺҮҘ

## САЛАУАТ

**Салауат... Был һүҙҙе ишетеү менән, иң беренсе, йырҙарҙа йырланған, легенда-риүәйәттәрҙә данланған милли батырыбыҙ Салауат Юлаев һәм Башҡортостандың визит карточкаһы булған уның Европалағы иң ҙур һыбайлы һәйкәле күҙ алдына баҫа.**

Салауат... Эйе, был һүҙ беҙҙең республикала йыш яңғырай. Ошондай атамалы ҡалабыҙ бар, Өфөбеҙҙәге иң ҙуры проспекты, урамдар, парктар, хоккей командаһы уның исемен йөрөтә. Батша хөкүмәте уның исемен яңы тыуған малайҙарға ҡушыуҙы йөҙ йылға тыйһа ла, бөгөн беҙҙә Салауат атлы уҙамандарыбыҙ бик күп. Мин белгән салауаттарҙың барыһы ла үҙенең исеменә тап төшөрмәй. Шуныһы ҡыуаныслы. Исемдәре есеменә тура килә, ғорур йөрөтәләр.

Салауат - башҡорт телендәге иң матур һүҙҙәрҙең береһе ул. Телмәребеҙгә, йәшәйешебеҙгә доға булараҡ та, исем булараҡ та, фразеологизм булараҡ та ныҡлы ингән һәм әүҙем ҡулланылышта йөрөй.

Дини мәғәнәһе маҡтау, данлау тигәнде аңлата. Дин ғилеме эйәләре, намаҙ уҡыған мөьмин-мөьминәләр яҡшы белә: Салауат - намаҙҙа һуңғы рәҡәғәттә Әттәхиәтте уҡығандан һуң Аллаһы Тәғәләгә бағышланған доға.

Ныгынған һүҙбәйләнеш булараҡ ғәфү итеүҙе аңлатырға теләгәндә, хәйерле булһын тигән мәғәнәлә "үткән эшкә салауат" тигән фразеологизмды ла йыш ҡулланабыҙ.

Ә исем булараҡ, үрҙә әйтеп китеүебеҙсә, был мөбәрәк һүҙҙе көн дә тиерлек ишетәбеҙ, уҡыйбыҙ, әйтәбеҙ, яҙабыҙ. Киләсәктә был исемде ишетергә, ҡабатларға һәм яңы тыуған сабыйҙарға ҡушырға, салауат әйтергә насип булһын!

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ФӘҺЕМ

## ҠЫЛАНМА ӘЛЕ...

Арып ҡына эштән ҡайтырға сыҡтым. Автобусҡа ултырып, бер туҡталыш үткәс, бәләкәй класта уҡыған бер ҡыҙыҡайҙың телефондан һөйләшеүе ҡолаҡҡа салынды. Иғтибар ҙа итмәҫ инем, "Әсәй, иртәгә беҙҙең асыҡ дәрес", тигән башҡортса һүҙҙәрен ишеткәс, терт итеп киттем. Бар иғтибарымды теге матур ҡыҙсыҡҡа йүнәлттем. Шул тиклем матур итеп әсәһе менән үҙ туған телендә һөйләште ҡыҙыҡай. Һаубуллашҡанын ишетеп, һүҙ ҡуштым. Исеме Фатима икән. Мин Фатиманы маҡтап, ата-әсәһенә рәхмәт әйткәс, автобустың алғы яғынан: "Мин үткән юлы ла был балаһың башҡортса һөйләшеүенә һоҡландым", - тигән тауыш ишетелде. Автобус йөрөтөүсе икән, ул да башҡорт булып сыҡты. Шулай артабан өсәүләп һөйләшеп киттек. Бер-беребеҙгә матур теләктәр теләп, һаубуллаштыҡ.

Шул тиклем шатландырҙы мине бәләкәй генә ҡыҙсыҡ Фатима, хатта арыуҙарым да онотолдо. Ошо матур тәьҫораттар менән өйгә ҡарай атлағанымда өлкән улымдың бала сағы иҫкә төштө. Ҡалаға яңы күсеп килеп йәшәй башлаған саҡ. Улым мәктәптә уҡый. Икәүләп ҡала буйлап йөрөгәндә мин ҡайһы саҡ телмәремә русса һүҙ ҡушып ебәрәм икән. Шундай саҡта улым Арыҫланым: "Ҡыланма әле, әсәй, башҡортса ғына һөйләш!" - тип, мине төҙәтә һалып ҡуя торғайны. Ошо хәл бер нисә тапҡыр ҡабатланғандан һуң, мин "төҙәлдем": ҡала урамдарында йөрөгәндә лә улым менән тик башҡортса һөйләшәбеҙ...

**Фәнгизә НАФИҠОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Ошо айҙа Халыҡ-ара туған тел көнө (21) билдәләнә. "Яҙмышымда - туған телем" тигән темаға әйтер һүҙегеҙ нindәй булыр?***

(Башы 1-2-се биттәрҙә.)

***Фәзилә БУЛӘКОВА, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре:*** Туған телем минең дә яҙмышыма, фәнни эшмәкәрлегемә, күңел донъяма әүерелде. Башҡорт телебеҙ дарьялай киң, бороңғо, бай һәм гүзәллектә тиңе булмаған телдәрҙең береһе. Тел менән әҙәбиәтте айырып ҡарау мөмкин булмаған кеүек, мәктәп уҡыусыларының да киләсәген, кеше булып өлгөрөп етеүен, аң һәм белем кимәле үҫешен балалар әҙәбиәтенән башҡа күҙ алдына килтереүе бик ауыр. Фән кандидатлығы дәрәжәһенә яҙылған ғилми хеҙмәтем шуға ла юҡҡа ғына милли балалар әҙәбиәте темаһына арналмағайны. Башҡорт балаһының теле башҡортса асылып, ул иң беренсе сиратта туған телендә әкиәттәр тыңлап, китаптар уҡып үҫергә тейеш, тип уйлайым мин.

Югиһә, бөгөн телеканалдар һәм интернеттан япон анимелары, Дисней мультфильмдарын ҡарап үҫә бала. Әсә телендә китаптар уҡыу, гәҙәттә, башҡорт халыҡ әкиәттәренән башлана торғайны. Һәр хәлдә беҙ үҙебеҙ шулай үҫтек һәм, шөкөр, донъянан бер ҙә артта тороп ҡалманыҡ. Йәш быуынды халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады өлгөләре, заманса рухтағы әҙәби әҫәрҙәр нигеҙендә тәрбиәләү темаһы артабанғы эштәремдә лә әйҙәүсе маҡсат булып торҙо. БДУ-ның филология факультетында уҡыған йылдарҙа уҡ телебеҙ һәм әҙәбиәтебеҙ ғилеме менән шөғөлләнә башланым. Артабан СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында аспирантура тамамлап, "Башҡорт балалар прозаһының үҫеш юлдары" тигән темаға диссертация яҡланым. Ләкин фәнни ҡараштарҙы ғәмәлдә ҡулланып ҡарау теләге мине БДПУ-ның шул мәлдәрҙә яңы асылған башланғыс кластар уҡытыусыһы һәм балаларға белем һәм тәрбиә биреү буйынса башҡорт бүлегенә алып килде. Бында мин башҡорт теле һәм балалар әҙәбиәтенән буласаҡ уҡытыусыларға дәрестәр бирҙем. БДУ-ның Сибай институтына күскәс, тормош юлдашым, шулай уҡ филология фәндәре кандидаты Илдус Ҡасим улы һәм минең башланғыс менән бында башҡорт теле һәм әҙәбиәте факультеты асылып, уға - декан, ә миңә башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире вазифаһында эшләргә насип булды. Ғөмүмән, Сибай институты менән бәйле осоробоҙҙо мин эшләү тип кенә атамаҫ инем, ул беҙҙең бөтә көсөбеҙҙе, дәртебеҙҙе Урал арьяғында туған телебеҙҙе артабан үҫтереүгә , уҡытыусылар әҙерләүгә биреп, халҡыбыҙға хеҙмәт итеү йылдары булды. Башҡаса мөмкин дә түгел ине, сөнки тап шул осорҙарҙа Сибай, Баймаҡ, Аҡъяр, Йылайыр башҡорттары ла хатта туған телебеҙҙә һөйләшеүҙе онотоп бара ине. Бөгөнгө көндә мин Башҡортостандың төүге халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың БР Милли әҙәбиәт музейы филиалы булған йорт-музейында эшләйем. Бында ла балалар һәм әҙәбиәт мәсьәләләре эшемдәге төп хәстәрлектәрҙең береһе, сөнки М.Ғафури музейына республикабыҙ мәктәптәренән уҡыусылар бик күп килә. Улар менән туған тел, әҙәбиәт темаһына әңгәмәләшеү, фекер алышыу, билдәле яҙыусыларыбыҙ менән осрашыуҙар үткәреү балалар зауҡын иҫтә ҡалырлыҡ тәьҫораттар менән байыта. Ҡыҫҡаһы, мин үҙемдең бөтә хеҙмәт юлымды һәм тормошомдо туған телебеҙҙе һаҡлау, артабан үҫтереү, байытыу, таратыу эшенә бағышланым, тип ғорурлыҡ менән әйтә алам.



***Наилә СӘФӘРҒОЛОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, "Йөрәк һүҙе" проекты авторы:*** Стәрлебаш районының Шәкәр ауылында саф башҡорт ғаиләһендә, туған телемдә - башҡортса һөйләшеп, апай-ағайҙарым араһында иркәләнеп кенә үҫкәнмен. Ләкин һуңғараҡ, үҫә төшөп, Өфө вуздарына уҡырға ингәс, әхирәттәр менән баш ҡала урамдарына йөрөргә сыҡҡанда үҙ телебеҙҙә һөйләшергә ҡыйынһынып, руссаға күсеп китә инек. Осрашҡанда, аралашҡанда, трамвай йә троллейбуста руссаға күсә һөйләшеү. Биш башҡорт осрашып, арабыҙҙа бер урыҫ булһа, тағы русса китә әңгәмәләшеү. Заманы ла шулайыраҡ ине шул. Һуңынан йәшлек дыуамаллығы менән атай-әсәй һүҙен һанламай, студент йылдарымда уҡ урыҫ егетенә кейәүгә лә сығып ҡуйҙым. Ул саҡта Өфө сәнғәт институты ректоры булған мәшһүр Заһир ағайыбыҙ Исмәғилев кабинетына саҡыртып: "Эх, ҡыҙым, ҡыҙым, шунда берәй башҡорт егетен тапманыңмы ни, нинә урыҫҡа сыҡтың? Башҡорт нәҫелен кем үрсетер ҙә, кем үҫтерер?"- тип әрләп сығарғаны мәңге хәтеремдә...

Утыҙ йәште уҙғас, Салауат башҡорт драма театрына эшкә килгәс кенә мин үҙемдең асылыма ҡайта, туған телемдең ҡәҙерен, бөйөклөгән аңлай башланым. Кемдер аптырар быға, кемдер ғәйепләр, әммә дөрөҫө шулай булды. Уның ҡарауы, шул ваҡыттарҙан алып, барлыҡ ҡалған ғүмеремде әсәм телен ҙурлауға, данлауға, уның байлығын, матурлығын ишәйтеүгә, һаҡлауға бағышланым һәм бағышлайым, сөнки мин үҙемдең башҡортлоғома хыянат итмәнем, төрлө хәлдәремдә лә башҡорт булып ҡалдым һәм башҡорт булып йәшәйем. Ошо юлымда тәүге уҡытыусыларым булып, башҡорт телебеҙҙе яҡлау, һаҡлау, ҡурсалауҙың мөһимлегенә төшөнөргә ярҙам итеүселәрҙән типтәр Марс Яппаров, керәшен татары Нәжип ағай Асанбаев, татар шағиры Туфан Миңнуллин, башҡорттарымдан Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Әнисә апай Дилмөхәмәтова булды.

Һуңғы йылдарҙағы билдәлелек яулап, уңышҡа өлгәшкән "Йөрәк һүҙе" проектым ваҡытында ҡулдан ысҡындырыла яҙған мөмкинлектәрем - туған телемә хеҙмәт итеү бурысымды ғәмәлгә атҡарыу юлында, халҡым телен халҡым араһында таратыу һәм популярлаштырыу эшендә халҡыма бер йәдкәрем булды тип әйтергә йөрьәт итәм. Шәкәр, халыҡ алҡышлап ҡаршыланы, хупланы. Ул ғына ла түгел, бөгөнгө быуындар туған телебеҙҙә яңғыраған илатырлыҡ та, терелтерлек тә һүҙ ҡөҙрәтен тойҙо, шағирҙарыбыҙ ижадына мөкиббәнлек итте, шиғриәткә һөйөү артты. Юҡҡа ғынамы ни борон сәсәндәр һүҙе алдынғы урында торған, намыҫ, көрәш, ғәҙеллек ораны булып яңғыраған. Һуңынан миңә һөйләүҙәренсә, "Йөрәк һүҙе" тамашаларына 10-12 йәшлек балалары, ейәндәре менән килеүселәр ҙә байтаҡ булған, ләкин уларҙың береһе лә тамаша залын ташлап сығып китмәгән, аҙаҡҡаса тыңлап ултырған, мине бигерәк тә бына шуныһы ҡыуандырҙы. Был күп нәмә хаҡында һөйләй булыр. Улар араһында ла киләсәктә, Алла бирһә: "Башҡорт телем - яҙмышым минең", - тип әйтеүселәрҙең тағы ла күберәк булырына өмөтөм ҙур.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

✓ *Ейәнем менән өйҙә ултырғаным яҡшыраҡ булыр, тип, эштән киттем. Өс йыл буйы улыма әкиәт, арҙаҡлы шәхестәребеҙ, тарихи йырҙарыбыҙ тураһында легендалар, риүәйәттәр һөйләп кенә үҫтерҙем.*



СӘХИФӘНӘН

# ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!

**Әйтер һүҙем бар, уларҙы уҡыусыларым бар. Сәхифәмдәге яҙмаларымда туған телемдең матурлығын күрһәтергә тырышам. Уҡығандар мин яҙғандарҙан ниндәйҙер фәһем ала икән, сауабы миңә. Интернет киңлегенә сығарған яҙмаларымды күсереп баҫыусылар ҙа күп. Мәҫәлән, Гүзәл апай Ситдиҡова, Светлана Насырова һәм башҡаларға рәхмәт кенә әйтәм. Һәр саҡ авторҙы күрһәтеп күсереп баҫалар. Фотоларҙы ла рөхсәт менән генә ала күптәр. Бөтөнөһө лә улар һымаҡ булһа ине.**
**Юҡ шул, текстарҙы үҙҙәренеке итеп ҡуйыусылар күбәйҙе ошо арала. Авторын күрһәтегеҙ, тип яҙһаң, яуап булмай. Бында иң дөрөҫ юл: авторын күрһәтеп уртаҡлашыу. Мин яҙмаларымды ҡыҙғанмайым, мәгәр тәртип кәрәк. Әҙәмде әҙәм иткән шул тәртип булырға тейеш.**

### Һүҙ тылсымы

Их! Ҡалыпҡа (калька) күсеп бөтөп барабыҙ бит! Бөгөн бөтөнөһө лә тиерлек "һайлауҙар" тип яҙа, һайлау бит инде! Тиҙҙән каникулдар тип яҙырҙар, ә каникул ғына бит. Яҙҙар, көҙҙәр, туйҙар... Кистәр, иртәләр... Кәрәкмәгән урында ла күплек ялғауы ҡушыла. Ике балаларым, өс ҡыҙҙарым... Ике бала, өс ҡыҙ бит инде! Һине түҙәм, тип яҙалар - был да баяғы урыҫсанан калька. Нимәне, кемде түгел, нимәгә түҙәм. Нимәгә һоҡланам була, ә беҙҙә "нимә менән һоҡланам", тип яҙыу ғәҙәткә инде. Әлеге урыҫ телендәгесә.

Һөйләм төҙөлөшө лә хәҙер беҙҙеңсә булмай ҙа ҡуя. Башҡорт телендә ул икенсерәк бит. Миҫалдар етерлек. Бигерәк тә яҙмалары менән кешеләрҙең зауығын тәрбиәләй торған һөнәр эйәләре өсөн был килешкән эш түгел. Күберәк китап уҡырға, бигерәк тә Ноғман Мусинды, Яныбай Хамматовты, Зәйнәб Биишеваны, өләсәйҙәрегеҙҙең, эргәгеҙҙәге ҡарттарҙың һөйләшкәнен тыңларға кәңәш итер инем. Ишетмәҫһегеҙ шул...

### Һәр һүҙебеҙ хикмәтле

Исемдәрҙе генә алайыҡ. Борон һәр бер кешелә ике исем булған, береһе ысын исем, икенсеһе- ялған исем. Ямандар ысын исемде белеп ҡалһа, зыян итер, тип уны йәшергәндәр. Шул ялған исемдән ҡушаматтар килеп сыҡҡан - бына ҡайҙа ҡушаматтарҙың асылы. Шуғалыр ҙа, бәлки, беҙҙә халыҡ ҡушаматҡа артыҡ үсегеп бармай.

Исемдәр ҙә ныҡ мәғәнәле булған. Һаҡлау исемдәре ысынлап та һаҡлаған, теләк исемдәрҙең дә үҙ сере бар. Мәҫәлән, ғаиләлә гел ҡыҙ тыуып торғанда артабан ул тыуһын өсөн яңы тыуған ҡыҙ балаға Яңылбикә тип исем ҡушҡандар (яңылышып, ул булһын мәғәнәһендә). Минең күҙәтеүҙәрем күрһәтеүенсә, мин белгән барлыҡ Яңылбикәләрҙең мотлаҡ ҡустыһы бар. Минең Яңылбикә инәйемдән һуң атайым тыуған, уға Һөйөндөк тип исем биргәндәр. Һөйөнгәндәр инде. Телдең серҙәре иҫ китмәле, был байлыҡты өйрәнергә лә өйрәнергә инде.

### Тапшырғым килә

Ҡайтҡым килә, барғым килә, тип һөйләшеп йөрөгән ерҙән ҡайтаһым килә, бараһым килә, тип яҙырға кереште күптәр, хатта беҙҙең Баймаҡ яҡтары ла. Беҙ улай һөйләшмәйбеҙ ҙә инде! Күрәһем килмәй түгел, күргем килмәй, тибеҙ бит. Үҙебеҙсә яҙайыҡ, һөйләшәйек әле.

Кемдер, илайһым килә, ти икән, әйтһен, улар электән шулай һөйләшкәндер. Ә беҙҙең илағыбыҙ килмәһен әле.

Ваҡ мәсьәлә кеүектер, бәлки. Тик тел өлкәһендә беҙ һаҡ булырға, үҙебеҙҙекен һаҡларға тейешбеҙ.

Шул тиклем үҙебеҙсә генә һөйләштергем килә, үҙебеҙсә бейеткем килә, киләсәккә телебеҙҙе матур көйө, төп нөсхәһендә тапшырғым килә. Ризаһығыҙҙыр ул?

**Ләлә РАФИҠОВА.**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ӘЛЕГЕ ЛӘ БАЯҒЫ...

## һүҙҙәребеҙ тамыры хаҡында

**Гәзитебеҙҙең былтырғы 45-се һанындағы "Дөрөҫ һөйләш!" рубрикаһында "Йәтимме, әллә етемме?" тип аталған бәләкәс кенә бер мәҡәләне уҡығас та, сираттағы тапҡыр ҡәләмемә тотондом. Һүҙлегебеҙгә "етем" булып инеп киткән ошо һәм башҡа һүҙҙәрҙең тамыры хаҡында фекерләп алмаҡсымын.**




Әлеге мәҡәләлә күп кенә яҡташтарыбыҙ лөғәтендә был һүҙҙең "йәтим" тип йөрөтөлгән вариантының дөрөҫлөгө һәм уны яҙма телгә индереү зарурлығы хаҡында һүҙ ҡуҙғатылған. Ғәрәпсә лә уның тап шулай әйтелеүен танаған авторыбыҙ, шул уҡ ваҡытта этимологик яҡтан анализлап, ни өсөндөр, "йәтим"дең "ят" һәм "им" тигән һүҙҙәрҙән яһалыуы тураһында ла фаразлай. "Имсәкте ят бала имә - ятимә" тип дәлилләп тә ҡуя. Илһөйәр һәм телһөйәр булған авторыбыҙҙың, был һүҙ үҙебеҙҙән (башҡорттан) килеп сыҡҡан, тигән һымағыраҡ юҫыҡта фекерләргә тырышыуын аңлап торам. Әммә, "йәтим"дең ғәрәп һүҙе булыуын барыбыҙ ҙа белергә тейешбеҙ. "Ят", "им" тигән һүҙҙәрҙең бында бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡ. Ғәрәпсә-урыҫса һүҙлектә "йәтим" - сирота, тип яҙылған. Динебеҙ менән бер ваҡытта килеп ингән башҡа бихисап (меҫкен, фәҡир, китап, дәфтәр, мәктәп, тәртип, әҙәп, хата, исем, сифат, шарт, хәтер, хәтәр, холоҡ, зиһен, аҡыл, фиғел, ваҡыт, сәғәт, дәүер, ваҡиға, фажиғә, фекер, ҡарар, хәжәт, мәшәҡәт, хәҡиҡәт, фил, хәрби, ғәскәр, мөхәббәт, вафат, ҡәбер һ.б.) һүҙҙәребеҙ һымаҡ уҡ, был һүҙ ҙә ғәрәптән күскән. Уның тамырын "ят, имә" тигән башҡорт һүҙҙәренә оҡшатып, һис кенә лә буталыу ярамай, тимәксемен. Икенсенән, мәҡәлә авторынан айырмалы, күптәребеҙ инде күнеккән "етем"де "йәтим"гә ҡабаттан әйләндереп, яҙма телебеҙгә индереү яғында ла түгелмен. Ни өсөн тигәндә, башҡорт теленә ҡасандыр үҙгәртелеп ингән бындай һүҙҙәр ифрат күп. Уларҙың барыһын да ғәрәптән нисек сыҡҡан, шулайға төҙәтә башлаһаҡ, "меҫкен" - "мескен", "китап" - "китаб", "мәктәп" - "мәктәб", "әҙәп" - "әдәб", "холоҡ" - "хулуҡ", "вафат" - уафат" һәм башҡа шундай һүҙҙәр ҡабаттан яҙылырға тейеш була. Йәғни, бындай һүҙҙәрҙә "революция" яһарға кәрәкмәйҙер, тип уйлайым. Утыҙынсы йылдарҙа Ғөбәй Дәүләтшин һәм башҡа әҙиптәребеҙ нисек төҙөгән, һүҙлегебеҙ шулай ҡалһын ине, тимәксемен. Башҡаларҙың фекере, әлбиттә, икенсе булыуы ла мөмкин...

Бынан тыш, бер нисә йыл элек тә бер авторыбыҙ гәзиттәребеҙҙең береһендә "тәүфиҡ" тигән һүҙҙең ғәрәптән сыҡҡанын белмәйенсә, башҡорттоң "тәү" һүҙенә оҡшатып, тап ана шундайыраҡ итеп фаразлаған фекерен яҙған ине. "Үәфәҡа" (соответствовать, подходить, гармонировать) тигән һүҙҙең алдына "тә" ижеге ҡушылып төҙөлгән ул. Ғәрәп телендә ана шундай ысул менән күп кенә ҡылымдар исемгә әйләнеп китә. Мәҫәлән, "тәсбих" - "сабаха" (прославлять) һүҙенән, "тәкбир" - "әкбәрә"нән (величать), "тәслим" (сәләм биреү) - "сәләмә"нән, "тәғфир" (ғәфү үтенеү) - "ғәфәрә"нән, "тәшкүр" (шөкөр итеү) - "шәкәрә"нән, "тәрбиә" - "раббәйә"нән (воспитывать), "тәртип" - "раттәбә"нән (расставлять в определенном порядке), "тәьҫир" - "әҫәрә" һүҙенән (действовать) килеп сыҡҡан. Бындай һүҙҙәр лөғәтебеҙҙә бихисап.

Гәзитебеҙҙә Зәкирйән Әминевтың һәм башҡа авторҙарҙың һәр төрлө һүҙҙәребеҙҙең сығышы

ҺАБАҠТАР

# ӨМӨТ ЙОНДОҘО ҺҮНМӘҺЕН!



**Танышымдың ейәне көҙгә 1-се класҡа бара. Ҡайһы мәктәпкә бирергә белмәйенсә, былтырҙан алып баш ваталар.**

Өләсәһе баланы башҡорт гимназияһына бирергә теләй. Ә әсәһе менән атаһы йорттарына терәлеп ултырған мәктәптә уҡытырға ниәтләй. "Юл аша сығып йөрөргә түгел, яҡын, мәктәпкә инеп киткәнсе балкондан ҡарап торорға ла мөмкин. Төрлө яҡтан хәүеф-хәтәр янаған, юл транспорты хәрәкәте көслө бөгөнгө заманда иң ҡулайы - белем усағының яҡын булыуы", - тип әйтәләр икән.

- Ә минең ейәнемде туған мөхитенән айырғым килмәй. Әсә телен онотмаһын тип, балалар баҡсаһына ла ебәрмәй, эшемдән китеп, ошоға тиклем үҙем ҡараным бит. Башҡорт батырҙары тураһында әкиәттәр генә тыңлап үҫкән берҙән-бер ейәнемде башҡа мәктәптәрҙең береһенә лә биргем килмәй, - ти ул.

Малайҙың теле бик иртә асылды. Йәш ярымда матур итеп башҡортса һөйләшеп йөрөй ине инде. Өндәрҙең барыһын да дөрөҫ әйтеп, тамамланған фекерле һөйләмдәр менән һөйләшкәнен үҙем дә йыш ишеткәнем булды. "Урыҫса белмәгәс, балалар баҡсаһына йөрөй башлаһа, береһен дә аңлай алмай аптырар инде", - тип борсолғайны хатта атай-әсәһе. Әммә хәл башҡасараҡ булды. Урыҫ милләтендәге тәрбиәселәрен башта "инәй" тип кенә йөрөгән бала ике ай эсендә тулыһынса урыҫсаға күсте лә ҡуйҙы.

- Балалар баҡсаларының барыһында ла башҡорт төркөмдәре юҡ шул. Булһа, һис шикһеҙ, шунда бирер инек. Шунан уйланым-уйланым да, ейәнем менән өйҙә ултырғаным яҡшыраҡ булыр, тип, эштән киттем. Өс йыл буйы улыма әкиәт, арҙаҡлы шәхестәребеҙ, тарихи йырҙарыбыҙ тураһында легендалар, риүәйәттәр һөйләп кенә үҫтерҙем. Бер йылдан ашыу урыҫ мөхитендәге балалар баҡсаһында тәрбиәләнгәндән һуң башҡортса һөйләшеп китеүе еңел булманы уға. Йәнһүрәттәрҙең дә, телефондағы уйындарҙың йоғонтоһо ҙур булды, әлбиттә, - ти танышым.

Уның борсолоуҙарын яҡшы аңлайым. Туған телдә аралашыу өсөн, ысынлап та, тәү сиратта мөхит кәрәк. Бала әсә телен ғаилә теле генә итеп ҡабул итеп, урамда, түңәрәккә, секцияға йөрөгәндә, мәктәптә, балалар баҡсаһында һөйләшмәһә, аралашмаһа, киләсәктә үҙ телен онотмаҫына өмөт юҡ, сөнки башҡортса һөйләшкән өләсәй-олатайҙар ҙа, әсәй-атайҙар ҙа һәр ваҡыт эргәлә була алмай.

Декабрь аҙағында Өфөләге "Торатау" конгресс-холында үткән "Туған тел - халыҡ йәне" тип аталған республика ата-әсәләр форумында ла балалар, үҫ-

хаҡындағы мәҡәләләрен яратып уҡыйым. Элегерәк "һөлөк" һүҙенең төрөктән "сулуг" (һылыу) һүҙе менән тамырҙаш булыуы, унан, урыҫтарҙа йыш ҡына ҡулланылған "хухры-мухры"ның да беҙҙең "көкере-бөкөрө" тигән һүҙебеҙҙән килеп сыҡҡанлығы хаҡында фаразлап, уҡыусыны уйланырға көйләүсе автор инде ул Зәкирйән уҙаман. Үткән һандарҙың береһендә халҡыбыҙҙа (айырыуса ауылдарыбыҙҙа) йыш ҡына ҡулланған "һеркәһе һыу күтәрмәй" тигән төшөнсәнең дә тамырын боронғо "һиркә" тип аталған кейем исеме менән бәйләгән ине ул. Мин дә ошо ҡәләмдәшемдән күрмәксе, һуңғы осорҙар шундай-шундай нәмәләргә иғтибар итеп, "һүҙ тикшерергә" әүәҫләнеп барғанымды һиҙәм.

"Шундай-шындай", тигәндәй, урыҫтар йыш ҡына ҡулланған "шаляй-валяй", "шалтай-болтай" тигән һүҙҙәр ҙә беҙҙең "шулай-былай", "теләһә-ҡалай", тигәнерәк һүҙбәйләнештәребеҙҙе хәтерләтә. Быуаттар буйы аралашып йәшәгәс, беҙҙең дә күп кенә һүҙҙәребеҙҙең бер аҙ ғына үҙгәреп, урыҫтарға күсеүе ғәжәп түгел, шулай бит. Бынан тыш, урыҫтар бәләкәс балаларына тиҙәктең атамаһын "кака" тип өйрәтәләр. Ә башҡорттар уны борон "кәкәй" тип тә әйткәндәр. Оҡшаш бит! Һәр төрлө ырым-юрауҙарға, исем көсөнә ышанған мәжүсилек осоронда, ен алыштырмаһын, тигән маҡсат менән, шайтанды "ерәндерер" өсөн балаларына "Кәкәй", "Буҡай" тигән исем дә ҡушҡан осраҡтар булған. Урыҫтарҙың "башка болит" йә "башка не соображает", "секир башка" тигәнен йыш ҡына ишетәбеҙ. Был һүҙ ҙә беҙҙең "баш"ыбыҙҙан алынып, уларҙың лөғәтенә инеп киткәнлеген һис кем инҡар итмәҫ, моғайын.

Теле асылған мәлдә күп кенә башҡорт балалары "мәм-мәм" тип ашарға һорай. Күптәрҙең ғүмерендә иң тәүге әйткән һүҙе лә ана шул була. Әсә кеше балаһына ашатҡан саҡта "мә, мә, аша, балам" тип йыш ҡына ҡабатлағанды сабый тарафынан отоп алынған һүҙҙәр был, моғайын.

Элегерәк бер мәҡәләмдә яҙған "пуд", "деньги" тигән урыҫ һүҙҙәре төрөктәге "бот", "тәңкә"ләрҙән килеп сыҡҡан һымаҡ, әрмебеҙҙә хәрбиҙәребеҙ ҡысҡырған "Ура!" ла төрөк һүҙе икән. Беҙ ҙә "иген урабыҙ" тибеҙ. "Ураҡ" һүҙе лә шунан барлыҡҡа килгән. Урыу - киҫкеләүҙе аңлата. Боронғо төрөк һуғышсыларының "Ура!", йәғни, "киҫ", "тураҡла" тип дошмандарына ташланғанда бер-береһен дәртләндереп ҡысҡырышыуҙары хаҡында бала саҡта ҡайҙалыр уҡығаным хәтеремдә.

Телебеҙҙәге "ләйәҡыл", тигән һүҙҙең мәғәнәһен һәр кемебеҙ белә. Ғәҙәттә хәмерҙе күп эсеп, ныҡ иҫергән кеше хаҡында "ул эсеп, ләйәҡыл булған" тиҙәр. Бына ошо һүҙҙең дә тәҙәләшөн, тамырын асыҡлап китеү, бәлки, кемгәлер ҡыҙыҡ булыуы мөмкин. "Юҡ" (урыҫтағы "нет", "не") һүҙе ғәрәпсә "лә" тип әйтелә. Урыҫ телендәге "разум" ғәрәпсәгә "аҡыл" тип тәржемәләнә. Ә урыҫса әйтелгән "соображает" тигән һүҙбәйләнеш ғәрәпсә "йәҡыл" тип яңғырай. "Не соображает" тиеү ғәрәпсә, "лә йәҡыл" була. Үҙебеҙгә был һүҙҙең асылын "ул аҡылын юйған", тип аңлатыу дөрөҫөрәк булалыр.

"Кәтғи" һүҙен йыш ҡына ҡулланабыҙ. "Катаға" (отрезать) тигәндән яһалған был ғәрәп һүҙе, урыҫсаға "наотрез, категорически" тип тәржемәләнә. "Мәжбүр" ҙә "жәббәра" (принуждать) һүҙенән. "Татлы" тигән һүҙҙең ғәрәпсә "хәлүә" икәнен белмәүселәр ҙә булыуы мөмкин...

Күптәребеҙ яратмаған "араҡы" һүҙенең дә тамырына осраҡлы ғына барып юлыҡтым. В.М.Белкиндың ғәрәпсә-урыҫса һүҙлегендә "араҡа" һүҙе "проливать" тип тәржемәләнә. Уны үҙемсә ошолайыраҡ итеп фаразланым. Аллаһ Тәғәлә тарафынан изге Ҡөрьәндең Бәйғәмбәребеҙгә аят-аят булып, 23 йыл дауамында төшөрөлгәнлеге хаҡында беләбеҙ. Һәр төшкән аятты Аллаһ илсеһе сәхәбәләренә еткереп бара торған булған. Бәйғәмбәребеҙҙең арҡаҙаштары, башҡа күп халыҡ, уларға шунда уҡ иман килтерә, йәғни, ныҡлап ышана һәм буйһона барған. Шулай, хәмер эсеүҙе кәтғи тыйыусы аят төшкәс тә, ҡасандыр ана шул иҫерткес эсемлек менән булышҡан ғәрәп халҡы өйҙәрендә булған барлыҡ шараптарын ("шарап" ғәр. - эсемлек) урам буйына сығарып түгә башлаған. Хатта урамдағы арыҡтарҙа вино йылғалары барлыҡҡа килгән... Араҡының хәҙерге атамаһы ла ана шул осорҙан - "түгелергә тейеш булған нәмә" тип атауҙан килеп сығыуы ихтимал. Әйткәндәй, хәҙер үҙебеҙ бик һирәк ҡулланған, тарихыбыҙҙа ғына ҡала башлаған "арыҡ" һүҙе лә шуның менән тамырҙаш булһа кәрәк (халҡыбыҙҙың "Гөлнәзирә" тигән йырында: "Һыуҙар аға арыҡтан, ҡыҙҙар ҡарай ярыҡтан..." тип тә йырлай торғайнылар).

Әйткәндәй, ғәрәби алфавитты үҙләштереп уҡый башлаған башҡорт кешеһе өсөн үҙенең туған теленең бәғзе үҙенсәлектәрен, нескәлектәрен өйрәнеүгә лә айырым бер киң юл асыла. Бер урыҫ телле (дөрөҫөрәге, башҡортса насарыраҡ белгән) танышым ғәрәп теле аша боронғо ата-бабаларыбыҙ ҡулланған, әммә һуңғы йылдары лөғәтебеҙҙән төшөп ҡала барған бик күп башҡорт һүҙҙәрен белә башлауы хаҡында һөйләгәйне.

**Хөрмәтулла ҠЫУАНДЫҠОВ.**

---

мерҙәр һәм йәштәр өсөн башҡорт мөхитен булдырыу мәсьәләһенә ҙур иғтибар бирелде. Унда баланың теле асылып, телмәре үҫешкән ваҡыттан уҡ тейешле шарттар тыуҙырыу мөһимлеге билдәләнде. Иң беренсе кескәйҙәрҙе мауыҡтырырлыҡ ҡыҙыҡлы йәнһүрәттәр, анимация фильмдары булдырыу һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Әлбиттә, беҙҙә улар бар, әммә әлегә бик аҙ. Бәләкәстәр иһә бер үк картинаны ҡабат-ҡабат ҡарарға яратмай, уларға көн һайын яңы тамаша кәрәк. Өҫтәүенә, мультфильмдарҙың күбеһе тыныс тауышлы, телмәр, хис-тойғо аҙыраҡ, миңенсә. Шуға күрә балалар уларға бик илтифат итмәй, ә "Фиксики", "Три кота", "Щенячий патруль" кеүек дауамлы, эмоциональ яҡтан көслө, сағыу, күләмле картиналарға өҫтөнлөк бирә.

Бәләкәстәрҙең фекерләү, сағыштырыу һәләттәрен үҫтереүсе китаптар ҙа юҡ. Магазин кәштәләрендә бик күп тә инде, тиерһегеҙ. Дөрөҫ, тик улар башҡорт телендә түгел. Ә бит балаларҙың тап ошо мәктәпкәсә осоро - илһөйәрлек, ватансылыҡ хисен тәрбиәләү, милләттең милләт булараҡ йәшәйешен тәьмин иткән, башҡа халыҡтар араһында юҡҡа сығыуҙан һаҡлаған ҡеүәтле тойғоно - милли үҙаңды - формалаштырыу өсөн иң яҡшыһы.

Ә был тойғо бөгөн бик кәрәк! Ошо хис булмағанға ла йәш быуын урам, интернет йоғонтоһона тиҙ бирелә, халҡыбыҙҙың быуаттар буйына формалашҡан әхлаҡи ҡағиҙәләре һәм рухи ҡиммәттәре юғала бара. Бына шуның өсөн дә балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә халҡыбыҙҙың асыл хазиналары нигеҙендә балаларҙа милли үҙаң тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирелергә тейеш. Быный өсөн, һис шикһеҙ, белем биреүҙең бөтә этабында ла аныҡ маҡсаттар ҡуйып, эште дөрөҫ ойошторocc мөһим. Әммә ниндәй генә дәлилдәр, сәбәптәр килтерһәләр ҙә, әгәр бала үҙен фәҡәт ошо милләттең вәкиле итеп танымаһа, тәрбиәсе, уҡытыусы, йәмәғәт ойошмалары, дәүләт нисек кенә тырышмаһын, йәш быуын телен, мәҙәниәтен, тарихын өйрәнһен өсөн ниндәй генә унайлы шарттар тыуҙырмаһын, мөмкинлектәр булдырмаһын, уларҙың ҡыҙыҡһыныуы булмаясаҡ. Тыуған ере, халҡы, үткәне менән ғорурланмаясаҡ.

Шуға күрә үрҙә атап үтелгән өләсәйҙән өлгө алып, иң тәүҙә балабыҙҙы, ейәнебеҙҙе башҡорт булыуы менән ғорурланырға өйрәтәйек, унда милли үҙаң формалаштырырға ярҙам итәйек. Ә быны өсөн беҙҙән күп кәрәкмәй: бәләкәстәребеҙгә халҡыбыҙ тарихында оялырлыҡ, хурланырлыҡ бер нәмә лә юҡлығын аңлатырға, атай-олатайҙарыбыҙҙың данлы үткәне менән ғорурланырға өйрәтергә генә кәрәк. Яҙмамды ғалим һәм тел белгесе Әкрәм Бейештең һүҙҙәре менән тамамлағым килә: "Беҙҙең халыҡ бер ваҡытта ла башҡаларҙың ер-һыуын баҫып инеп, ҡан ҡоймаған, бала-сағаһын, ҡатын-ҡыҙын илатмаған. Киреһенсә, үҙе ете быуат ярым буйы ҡанһыҙ баҫҡынсыларҙың йыртҡыслығынан ҡаты ғазап сиккән, ғәҙеллек өсөн, азатлыҡ өсөн көрәшкән. Һәләкәткә төшмәҫ, тамам бөтмәҫ өсөн ҙур көс һалырға кәрәк. Өмөт йондоҙо әле һүнмәгән. Шул йондоҙҙо ысын ирек ҡояшы итеп ҡабыҙып ебәреү - хәҙерге замандың мөҡәддәс бурысы".

**Лена БАРЫЕВА.**

---

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# УФФ, СӘРМӘЙГӘН!

**"Киске Өфө" гәзитен күптән алдырып уҡыйым. Уҡытыусы булараҡ, гәзиттә балалар тәрбиәһенә ҡағылышлы фәһемле, файҙалы мәғлүмәттәр күп булыуы оҡшай. "Әсәйем лөғәте" рубрикаһындағы онотолған, хәтерҙән юйылған, телдән төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе гел уҡып барам, отоп алам. Үҙем дә беҙҙең яҡ һөйләшендә ҡулланылған, ҡәйнәмдән, ололарҙан ишетеп, яҙып алынған һүҙҙәрҙе тәҡдим итергә булдым.**

**Тапшауыр** - берәй кәрәкмәгән әйберҙе ҡат-ҡат һорашыу.
**Салдыраяҡ** - көлдер-көлдөр итеп, үҙ аяғына тышалып йөрөгән кеше.
**Сагараҡкүҙ** - һәр нәмәгә үтә ҡарап, күҙе менән йота яҙып йөрөүсе.
**Әүхәт** - ологайып, донъя көтөүгә кәр ҡайтыу.
**Иштаһа** - яратып, теләп ашауға ҡарата әйтелә.
**Иждиһат** - берәй эшкә бик ҡыҙығып, ниәт итеп тотоноу.
**Алтмышаяҡ** - ауыл ҡыҙырып, ен шикелле йөрөү.
**Аранауыҙ** - эсенә һыймай, булған хәбәрҙе һөйләп йөрөүсе.
**Йылпы-йылмаяҡ** - кешенең күңеленә кереп, эс серен алыусы.
**Шипан** - дуҫ булып йөрөп, кеше араһын бутаусы.
**Сәрмәйгән** - ҙур ҡорһаҡлы ирҙәргә ҡарата әйтелә.
**Ҡылйыуғыс** - юхалыҡтың сигенә сыҡҡан кеше.
**Һаҡарат** - һүгенеп һөйләшеү.
**Бөхөл** - "Бер нәмәм дә юҡ!" тип бөлөнөп ултырыу.
**Шағараҡ** - уйын-көлкө яратыусы.
**Улья** - ҡулға мал төшөү.
**Кәмһәнә** - таныш түгел кеше.
**Утапшы** - ни етте, шуны кейеп йөрөү.
**Мәреү** - ҡулдан көс ҡайтыу.
**Ғуж** - ризыҡ айырмай, туймаҫтай булып ашау.
**Һәптән** - урам ҡыҙырыусы ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә.
**Денеш** - телен ҡырҡып алһаң да, һүҙе сыҡмаҫ кеше.
**Яндырай** - янып-көйөп, өтәләнеп йөрөгән кеше.
**Шардыуан** - эсе-тышы бер, кенә тотмаусы кеше.
**Мәрҙәс** - ир кешеләргә ҡарата әйтелгән маҡтау һүҙе.
**Ирәүән** - хыялға бирелеп донъяның онотоусы.
**Бошман** - бер нәмәгә лә бошона белмәүсе әҙәм.
**Ирҙәүкә** - ҡылыҡ-фиғеле менән ир-атҡа оҡшаған ҡатын-ҡыҙ.
**Сокорош** - булып та, кешегә йомош бирмәгән кеше.
**Тулы тубал** - ғаиләһе менән аҡылға еңел кешеләр.
**Олкот** - ҡәнәғәт була белмәгән әҙәмгә ҡарата әйтелә.
**Ҡаҫта** - күңелендә кер йөрөтөүсе (тиҙәр).
**Ҡушкендек** - ата-әсәһенән бер аҙым ҡалмаған бала.
**Бөрәләү** - яҡындан яҡшылап күрмәгән кеше.
**Ерektәртә** - үсеге барған кеше.

**Ишбикә МАННАПОВА.**
**Баймаҡ районы.**

# ЛӘҪТЕКТӘР,

## сәс тарай ҙа белмәйҙәр

**Беҙ "Киске Өфө"нө 5-6 йыл самаһы алдырабыҙ, кем иң элек өлгөрә, шул башлап, йә биттәрен таратып алып, йәһәт кенә уҡып сығабыҙ. Һыуһап килеп, рәхәтләнеп йотлоғоп һыу эскән кеүек була. Һуңынан йәйлап, ҡабат-ҡабат ҡарап, оҡшаған ерен балаларға ҡысҡырып уҡып ҡуябыҙ. Бар мәҡәләләр ҙә оҡшай. Бигерәк тә һуңғы биттәге "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһы, ундағы риүәйәттәр фәһемле. "Әсәйем лөғәте"нә беҙҙең яҡта ғына ҡулланылған бер-ике һүҙ яҙмаҡсы булдым әле.**

**Дәрүшкә** - бәләкәй саҡта бик шашып уйнап китһәк, әсәйемдәр беҙгә шулай тип өндәшә торғайны.
**Биртүшкә** - тик тормаған, аяҡ аҫтында уралып йөрөгән балаға әйтәләр, "вертушка" һүҙенәндер, моғайын.
**Ләҫтектәр** - сәстәре таралмай, туҙырап йөрөүсе ҡыҙҙарға ҡарата әйтелә.
**Титарай** - еңел холоҡло ҡыҙ-ҡырҡын тураһында: "Ул титайтук шулай булыр инде,"- тиҙәр ине.
**Тихәмәттә** - бүтән ваҡытта, тигән мәғәнәлә. "Тихәмәттә йөрөй торғайны, кәрәктә - юҡ".

**Эльза МӘҠСҮТОВА.**
**Ишембай районы.**

✓ *Бөгөн өләсәй-олатай тәрбиәһе булмауы ла балаларҙың башҡорт телен белмәүенә йоғонто яһай. Сөнки ейән-ейәнсәрҙәренә әкиәттәр һөйләп, уларға бала саҡтан әсә теленең матурлығын, мөһимлеген һеңдереүсе олатай-өләсәйҙәр юҡ.*



ӨФӨ БАШҠОРТО

**Биш йыл элек гәзитебеҙҙә "Өфө башҡорто" рубрикаһын асып ебәргәйнек. Халыҡ-ара туған тел көнө уңайынан ул рубрикала сығыш яһаған геройҙарҙың башҡорт теле тураһындағы фекерҙәренә тағы ла бер байҡау яһарға булдыҡ. Ғөмүмән, Өфө башҡорттары башҡортса һөйләшәме?**

# БАҺАЛАП БӨТКӨҺӨҘ ХАЗИНА -

## ул туған телебеҙ!



***Азамат РӘХИМҠОЛОВ, Башҡорт дәүләт медицина университеты доценты:*** Ҡалала тыуһам да, өйҙә атай-әсәйем тик башҡортса ғына һөйләште. Атайым Шуға бала саҡта мин хатта башҡа милләттәр бар икәнен башыма ла индермәнем. Бәхеткә күрәме икән, мин бер көн дә балалар баҡсаһына йөрөмәнем. Ул ваҡытта ҡалала башҡорт балалар баҡсалары ла юҡ ине. Башҡортса белеүем, үҙемдә башҡорт итеп тойоуым менән, тәү сиратта, өләсәйемә рәхмәтлемен, сөнки атай-әсәй һәр саҡ эштә, күберәген өйҙә өләсәй менән икәүләп кенә донъя көтәбеҙ. Бөгөн өләсәй-олатай тәрбиәһе булмауы ла балаларҙың башҡорт телен белмәүенә йоғонто яһай, тип уйлайым. Сөнки ейән-ейәнсәрҙәренә әкиәттәр һөйләп, уларға бала саҡтан әсә теленең матурлығын, мөһимлеген һеңдереүсе олатай-өләсәйҙәр юҡ, уларҙы телевизор, смартфон-планшеттар һәм интернет селтәре алмаштыра.

***Рауил ӨМӨТБАЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Рәйесенең экс-ярҙамсы-кәңәшсеһе, хаҡлы ялда:*** Мин уҡыған йылдарҙа Өфөлә бөтөнләй башҡорт мәктәптәре булмаһа ла, атайым Рамазан Өмөтбаевҡа ғүмер буйы рәхмәтлемен, сөнки өйҙә аралашыу тик башҡорт телендә генә барҙы, телем дә башҡортса асылды һәм ул ғүмергә минең туған телем булып ҡалды. Һуңынан рус телле балалар баҡсаһына йөрөргә тура килде, әммә ул минең өйрәнгән икенсе телем ине. Алты йәшемдән атайым "Башҡортостан пионеры" гәзитен алдырҙы, шул баҫманы уҡып үҫтем. Туған телгә булған ихтирам, һөйөү миңә ата-әсәм ҡаны аша һеңгәндер. Һуңынан инде, үҙ аллы тормош көтә башлағас, үҙемде һынап ҡарау өсөн башҡорт телендә сыҡҡан барлыҡ гәзит-журналдарҙы алдырҙым, "Ағиҙел" журналын энәһенән-ебенә тиклем уҡып сыға торғайным. Хатта ундағы ҡайһы бер мәҡәләләр оҡшамаһа ла, күңелем ятмаһа ла, уҡып бөтөргә үҙемдә көс таба инем. Бөгөн ҡала мәктәптәрендә генә түгел, ауылдарҙа ла башҡортса уҡытыу бөтөп бара. Ҡалаларҙа башҡа милләттәр башҡорт теле икенсе телдәрҙе уҡытыу ваҡытын ала, тигән төрлө сығыштар йыш ишетелә. Кешенең телдәрҙе өйрәнеү мөмкинлеге лә сикһеҙ һәм һәр кеше үҙ телен яҡшы белһен өсөн ул даими рәүештә шул телдә китапмы, гәзит-журналмы уҡырға һәм аралашырға тейеш.

***Гөлнәзирә ЙӘНТҮРИНА, психолог, педагогия фәндәре кандидаты:*** Минең бала сағым бай һәм сағыу хәтирәләргә тулы, сөнки атай-әсәйем театрҙарға, башҡа мәҙәни, шулай уҡ төрлө сараларға йөрөргә яратты. Шуға күрә, беҙ бала саҡта уҡ тулы мәҙәни программа күреп, шул мөхиттә ҡайнап үҫтек. "Мираҫ" коллективында бейеү менән етди шөғөлләндем. Иң сағыу хәтирәләрем ғаилә менән бәйле. Һәр ял көндәре өйөбөҙҙә ғаилә концерттары үтте. Атайым, республикала билдәле шәхес, биология фәндәре докторы Сәфәрғәли Йәнтүрин һәм ағайым Урал - ҡурайҙа, әсәйем Вилүрә Зиннәт ҡыҙы мандолинала уйнай, ә мин бейейем, төрлө күренештәрҙе сәхнәләштерәм, пародиялар яһайым. Атайым халыҡ йырҙарын өйрәтә. Беҙ йыш ҡына ғаилә ансамбле менән төрлө сәхнәләрҙә, телевидениела сығыш яһай инек. Өйҙә тик башҡортса ғына һөйләштек һәм был традиция әлегәсә дауам итә. Атай-әсәйем телгә, милли мәҙәниәткә һөйөү тәрбиәләй алған һәм шуға ла ағайым да, мин дә, һеңлем дә, ҡайҙа ғына йәшәһәк тә, барыбер ҙә илһөйәр, телһөйәр булып ҡалабыҙ.

***Миләүшә ИҘРИСОВА, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре:*** Атайым Абрар Ғабдрахманов менән әсәйем Нажиә Аллаярова студенттар булып, береһе Өфөлә, икенсеһе Мәскәүҙә юғары белем алған саҡта, мин ете йәшемә тиклем олатай-өләсәй һәм атайәсәй араһында йөрөнөм. Күберәген ауылда булдым. Шуға ла асылым тас ауылса минең - олатай-өләсәй тәрбиәһе. Ә бит ул заманда ҙур ҡалала башҡортлоҡто һаҡлап алып ҡалыу бик ауыр булған. Рухлы, моңло, аҡыллы, изге күңелле олатайым менән өләсәйем ҡарамағында тәрбиәләнеүем, әлбиттә, минең өсөн бәхет булған инде ул...

Атайым оҙаҡ йылдар Башҡортостан радиоһында эшләне һәм радио тыңлау беҙҙең тормоштоң айырылғыһыҙ бер өлөшө булды. Иртәнсәк тә, төшкө ашҡа ҡайтҡанда ла, ял көндәрендә лә ул радионы ҡолағынан ысҡындырмай, тыңлап, фекерләп, анализлап йөрөй. Үҙем башта телевидениела, унан радиола эшләй башлағас, быны ошо мөхиттен, оло һабаҡтарҙың күңелемә һеңдерелеүенә һөйөнөп бөтә алманым. Сөнки минең өсөн бында барыһы ла таныш, яҡын ине. Бөтөн музыкаль тәьҫораттар, сәнғәт әҫәрҙәре, әҙәби мираҫ мейегә һеңә барған. Теҙә китһәң, атайымдан, әсәйемдән өйрәнгән, отҡан, мираҫ итеп алған әңгелем, тәжрибә-кәңәш етерлек ул. Йомғаҡлап әйткәндә, миңә улар иң мөһиме - милли рух тойғоһон һеңдерә килгән. Бөгөн ҡала ерлегендә ошо милли аманатты һаҡлауҙың юлы бер генә - ғаиләлә башҡортса һөйләшеү, башҡортса йәшәү. Балаларым менән русса һөйләшеп китһәм, атайым: "Һин дә башҡортса һөйләшмәһәң, уларға бер кем дә туған телен өйрәтмәйәсәк", - тип һәр ваҡыт иҫкәртеп торҙо. Беҙҙә башҡорт мөхите йәшәй: туған телдә һөйләшеү-аралашыу, ҡунаҡ килһә - башҡортса һыйлау, балаларҙың башҡортса концерттарын ойоштороу ғәҙәткә ингән. Хәҙер ейәндәрҙе лә шул матур тәртиптә тәрбиәләргә килә. Балаға бит милли уҙан, рух туған тел һәм моң менән инә. Был рухи байлыҡты башҡа бер ниндәй белем дә йәки өйрәтеү ҙә алмаштыра алмай. Үҙ теленә, туған мәҙәниәтенә битараф ата-әсә үҙ балаларын ошо хазинанан үҙ теләге менән мәхрүм итә, уларҙы рухи фәҡирлеккә дусар итә, маңҡорт яһай...

***Марат ҒӘЗИЗОВ, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлыҡ етәксеһе урынбаҫары:*** Ҡалала йәшәһәк тә, йәй һайын мөмкинлек сығыу менән әсәйҙең тыуған яҡтарына, уның өлкән ағаһы йәшәгән Йәнтеш ауылына ҡайтып йөрөнөм. Ул яҡтарҙы яҡшы беләм, йәй һайын бала сағым һаҡмар буйы тәбиғәтенә һоҡланып, бесән сабышып үтте, тип әйтә алам. Өйҙә лә, ауылда ла тик башҡортса аралашҡас, мәктәпкә барғанға тиклем рус теленә ҡарағанда башҡортса яҡшыраҡ һөйләшә инем. Белем биреү рус телендә алып барылған 100-сө мәктәптә уҡыным. Замана шундай ине бит: беҙҙең башҡорт мөхите ғаилә һәм ауыл менән сикләнде. Хатта уҡыу йылдарында, ҡыҙыҡһынып, класс журналын ҡарағанда 42 бала араһынан 4 кенә башҡорт булыуын белдем.

Милләт-ара аралашыу теле, тип, ул ваҡытта балаларына күберәк рус телен өйрәтергә тырыштылар. Әммә мин тел проблемаһын тойманым, сөнки өйҙә тик туған телдә һөйләштек. Өләсәй боронғоларҙы, үҙе күргән-кисергәндәрҙе, Ҡөрьән тәфсирҙәрен һөйләй, таҡмаҡ та әйтеп ебәрә торғайны. Ә бына әсәйемдең Аҡъяр эргәһендәге Ҡараһыу ауылында йәшәгән өлкән апаһы Фирҙәүес Тапаҡова башҡорт фольклорын бик яҡшы белде, хәтерендәге меңләгән таҡмаҡ араһынан, кәрәклеһен мәлен, урынын тура килтереп, әйтеп ҡуя ине. Уның таҡмаҡтары төпһөҙ инеш кеүек, урғылып сығып торҙо. Ошондай мөхиттен дә йоғонтоһо булғандыр инде миңә.

***Вячеслав ГОЛОВ, "Вечерняя Уфа" гәзитенең баш мөхәррире:*** Ҡала балаһы булһам да, өйҙә гел башҡортса һөйләшеп үҫтем, атайым да телде беҙҙең менән бергә өйрәнде. Өләсәйем килһә, ул русса белмәгәс, гел башҡорт телендә аралаша торғайныҡ. Шуға ла башҡорт телен өйрәтеп, башҡорт мәҙәниәте донъяһына ылыҡтырып, уға һөйөү тәрбиәләп үҫтергән атайым Николай Головҡа һәм әсәйем Мәғфирә Ғәлиеваға бик рәхмәтлемен.

Башҡорт кешеһе, һис шикһеҙ, балаһын бишектән башҡортса һөйләштереп үҫтерергә һәм мәктәптә лә уҡытырға тейеш. Башҡа милләт вәкилдәренә лә, Башҡортостанда йәшәгәс, республикаға нигеҙ һалыусы милләткә хөрмәт йөҙөнән, аралашыу һәм араларҙы яҡынайтыу маҡсатында икмәк-тоҙлоҡ булһа ла икенсе дәүләт телен шулай уҡ өйрәнеү фарыз. Халыҡтың байлығы алтын-көмөш түгел, уның иң ҙур байлығы - теле, рухи ҡомартҡылары. Үҙ иркегеҙ менән ошо баһалап бөткөһөҙ хазинанан баш тартмағыҙ!

***Неля ҒӘЙНЕТДИНОВА, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлыҡтың баш белгес-эксперты:*** Уҙған быуаттың 70-80-се йылдарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте, нигеҙҙә, ғаиләлә өйрәнелде. Каникулдар ауылда үтте. Олатай-өләсәйемә телде өйрәткәндәре өсөн әле лә рәхмәтлемен. Өләсәйем мине башҡортса, гәрәпсә яҙырға өйрәтте, хаттарҙы башҡортса яҙыша инек, ул шулай итеп башҡорт теле менән ҡыҙыҡһыныуымды тәрләсә хупларға тырышты. Уларҙан миңә башҡорттарға ҡағылышлы бөтөн нәмәгә - ғөрөф-ғәҙәттәргә, тәрбиәгә, әсәйем Тамара Ғәниеванан башҡорт әҙәбиәтенә, мәғлүмәтте насар-яҡшыға айыра белеүгә, аралашыуға һөйөү күскән. Өйөбөҙҙә авторҙарҙың автографтары ҡуйылған китаптар һаҡланды, шуға ла рус классиктары менән бер рәттән, Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Ҡәҙим Аралбаев, Рауил Бикбаев, Ғәлим Хисамов, Рәшит Солтангәрәев, Факиһа Туғыҙбаева, Таңһылыу Ҡарамышева һәм әсәйемдең башҡа бик күп дуҫтары, арҡаҙаш яҙыусыларының китаптарын ҡабат-ҡабат уҡыным. Улар беҙгә бик йыш ҡунаҡҡа килә, бергәләп сәй эсәләр, аш бүлмәһендә яңы, әле бер ҡайҙа ла баҫылмаған шиғырҙарын, проза әҫәрҙәре өҙөктәрен бер-береһенә уҡыйҙар ине. Йәш яҙыусылар, минең тиңдәштәрем дә әсәйемә тартылды, ул йәштәр менән дә белемен һәм тәжрибәһен кинәнеп бүлешәте. Мин ҡәләмдәш дуҫтарымдың ижады баһаланғанда тыңлаусы булып ҡына ултырманым, ә фекер алышыуҙарҙа, бәхәстәрҙә лә ҡатнашып, үҙ һүҙемде әйтә инем. Шуға күрә, башҡорт шиғриәтенә, әҙәбиәтенә һөйөү миңә әсә һөтө менән күскән, тип әйтә алам. Минә туған тел һулар һауа кеүек кәрәк, уның аша мин халҡымдың күңелен аңлайым, ул - минең милләтемде билдәләүсе, миңә йәшәү һуты биреп торған тамыр. Шуға күрә һәр ғаиләлә телде өйрәнеү өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырылырға, ә белем биреү системаһы быға ярҙам итергә тейеш, тип уйлайым.

***Искәндәр СӘЙЕТБАТТАЛОВ, филология фәндәре кандидаты:*** Атай-әсәйем икеһе лә Өфөлә үҫкәнлектән, туған телде тик көнкүрештә ҡулланырлыҡ кимәлдә үҙләштергән. Мин 2-се синыфҡа тиклем башҡортса бөтөнләй аралашмай инем. Һигеҙ йәшемдә әсәйем мине өйөбөҙҙөң эргәһендә генә асылған яңы 144-се Башҡорт гимназияһына уҡырға бирергә ҡарар итте, башҡорт телен шунда ғына өйрәндем. Башҡортса уҡыу ҡыйын булды, тик ваҡыт үтеү менән - 13-14 йәшемә, кеше аңларлыҡ итеп һөйләшә башланым. Өлкән синыфтарҙа тағы ла мәктәпте алмаштырырға тура килде һәм унда башҡорт теле бары тик дәүләт теле булараҡ ҡына уҡытылды. Башҡорт мәктәбенән килгәс, башҡорт теленән олимпиадаларҙа ҡатнашып, беренсе урындар алып йөрөнөм. Әммә бөгөн дә башҡортса иркен һөйләшәм.

***Диана ЗАКИРОВА, Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы:*** Ғаиләләге балаларҙың барыһы ла Өфөнөң 20-се башҡорт мәктәбендә белем алдыҡ. Өйҙә бәләкәйҙән башҡортса һөйләштек, йәй ваҡытына Ғафури районының Яугилде ауылына ҡайта торғайныҡ. Бала саҡта инәйем һөйләгән "Саҡ-Суҡ" бәйетен илап, Туҡайҙың "Һыу инәһе"н иҫебеҙ китеп тыңлай инек. Инәйем шиғырҙарҙы ла матур итеп, үҙәккә үткәрерлек итеп һөйләне, йырға ла оҫта булды. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙгә, тегене уҡығыҙ, быны уҡығыҙ, тип тылҡып тороусы булманы. Өйҙәге ҙур китапханалағы китаптарҙы һәр беребеҙ үҙ ваҡыты, үҙ теләге менән уҡый башланы. Китаптарҙан тыш, һәр саҡ бер ҡосаҡ гәзит-журнал алдырҙыҡ.

***✓ Тора-бара Хөбөтдинов үҙ биографияһының ғәрлекле был осорон да, яман төш күргәндәй, онотто. Уны стукач тип бер кем дә белмәй, тимәк, бындай хәл булмаған! Йоҡо аралаш яман һаташҡан ғына.***



Рәсүл БАЙГИЛДИН

# ДАН ЮЛЫНЫҢ ТУҘАНЫ

Повесть

Идеал Исчуринға айырым кешеләр, үҙе аралашҡан даирәлә дөйөм кәйеф тураһында тиҫтәгә яҡын отчет яҙҙы. Таныш-белештәренең яҙмышы менән уйнауы күңеленә таш булып ултырһа ла бер ни ҡыла алманы. Исчурин өрәйен алып, үҙенә тулыһынса буйһондорғайны уны. Ғәрләнде, үҙен күрә алманы һәр яҙған доносынан һуң. Тик ҡайһылатһын, түҙҙе. Уға ла йәшәргә кәрәк бит. Бәлки, кемдер уның тураһында ла органдарға яҙалыр, тип үҙен йыуатты.

Сәғитовтың тормошон емереп ташлауын бигерәк ауыр кисерҙе. Идеал уның иҫерек баш менән һөйләгән һүҙҙәрен Исчуринға еткерҙе лә, күңел ғазаптарын саҡ онота башлағайны, Сәғитовты эштән ҡыуҙылар. Идеал шаҡ ҡатты уның сәбәптәрен уҡытыусыларҙың дөйөм йыйылышында ишеткәс. Имештер, Сәғитов өлкән синыф уҡыусыһына әшәке ниәттәр менән ҡағылған. Был турала ҡыҙ бала әсәһенә әйткән, ә уныһы милицияға ғариза яҙған. Ултыртыуын ултыртманылар ғәйепләнеүсене, сөнки ул ҡыҙға бер ниндәй ҙә зыян килтермәгән. Әммә ләкин амораль холҡо өсөн мәктәптән ҡыуҙылыр.

Күпмелер ваҡыт үткәс, Идеал Сәғитовты урамда осратты. Күрештеләр, хәл-әхүәл һораштылар.

- Ғаиләне аҫрарға кәрәк бит, төҙөлөшкә ташсы булып эшкә төштөм, - тине элекке коллегаһы. - Әлдә ҡатын миңә ышанды, ташлап китмәне. Бинахаҡҡа ғәйеп ташланылар ҙа баһа. Үҙем дә аптырайым, Үлмәҫбаева мине нишләп бысраҡҡа батырырға булғандыр, аңламайым. Яҡшы уҡыны инглиз теленән, филолог булырға ла хыяллана ине. Минән үс алырға бер ниндәй ҙә сәбәпте күрмәйем. Аңлай алмайым...

Идеал күҙҙәрен йәшереп:

- Әллә инде, мин дә хайран ҡалдым. Үлмәҫбаева хәҙер беҙҙә уҡымай, икенсе мәктәпкә күсте, - тип тиҙерәк китеү яғын ҡараны.

Сәғитовтың башына бәләне үҙе төшөрөүен аңлағайны ул. Исчуриндан да яуап алырға маташты.

- Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Колхозсы иккән аҡ икмәкте ашап, ул етештергән һөттө эсеп, эшсе төҙөп биргән йылы йортта йәшәп, газын яғып, һыуын крандан ғына ағыҙып тотоноп, баҙрап йәшәп ят та эшсе-крәҫтиән ҡоролошона - социализмға - яла яҡ. Интеллигенцияның саңын ҡағып тормаһаң, ул еҫләнә, бурһый башлай. Әйҙә, хәҙер икмәкте үҙ тирен түгеп тапһын. Совет власының ҡәҙерен белер шунда. Ә һеҙ, Идеал Салютович, юҡҡа ҡайғырмағыҙ. Халыҡ дошманын фашлаған өсөн ғорурланырға кәрәк. Артабан да шулай ғәҙел, ныҡ булығыҙ. Оҙаҡламай республика наградаһы тейер үҙегеҙгә эштәге уңыштарығыҙ өсөн. Алға ҡарағыҙ! Алға! - тине яуап итеп хәүефһеҙлек органы капитаны.

"Ғәҙел, ныҡ булығыҙ... Күрәбаға кешене ҡараға буя ла, шуны ғәҙеллек тигенсәле... Тфү", - тип төкөрҙө Идеал был һөйләшеүҙе иҫләгән һайын. БАССР-ҙың Юғары Советы Президиумы рәйесе ҡул ҡуйған маҡтау ҡағыҙын оло байрамда бөтөн ғәм алдында тантаналы рәүештә үҙенә тапшырғастары, барлыҡ кисерештәренән, ауыр уйҙарынан арынды ла ҡуйҙы. Гүйә, ҡул менән һыпырып ташланылар. Ҡыуаныс, ғорурланыу ялмап алды йөрәген. Үҙен үтә лә шәп, һәр яҡтан бөткән кеше итеп тойҙо. Сәғитов уйына инеп тә сыҡманы.

## 3

Алдан һиҙемләүе юш килдеме, әллә Исчурин хеҙмәт иткән ҡеүәтле орган булышлығы булдымы, йәшерен агент сифатында дәүләткә үҙ ярҙамын күрһәтә башлауға ике йыл үтеүгә Идеал мәктәп директоры итеп тәғәйенләнде. Етәксе вазифаһында ла ул Исчуриндың байтаҡ йомошон үтәп өлгөрҙө. Һуңғыһын бигерәк илһамланып яҙҙы - биш табаҡ биткә мәктәп директорҙары араһында йөрөгән хәбәрҙәрҙе, ишеткән-күргәндәрен тасуирлап теҙҙе.

Өс йыл бауҙа тотто Идеалды капитан. Тәүҙә бигерәк йыш бимазалаһа, Горбачевтың үҙгәртеп ҡороу сәйәсәте башланғас, һирәгерәк борсоно. Бер мең дә туғыҙ йөҙ ҙә һикһән етенсе йылда гласность - асыҡлыҡ - тигән нәмә тураһында һәр мөйөштә ләүкелдәй башланылар. Әллә органдар ҙа үҙ эшен үҙгәртеп ҡорҙомо, фашланыуҙан, яманат исем күтәреүҙән ҡурҡып, бысраҡ эш алымдарынан баш тарттымы, нисек кенә булған хәлдә лә, Исчурин, һыуға батҡандай, юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы.

Тора-бара Хөбөтдинов үҙ биографияһының ғәрлекле был осорон да, яман төш күргәндәй, онотто. Уны стукач тип бер кем дә белмәй, тимәк, бындай хәл булмаған! Йоҡо аралаш яман һаташҡан ғына. Һыҙлап йөҙәткән сиҡаны һытылып, үҙәк өҙгөс ғазаптарҙан арынған әҙәм балаһылай, тормоштоң бәләкәй һәм ҙур ҡыуаныстарына солғанып, һәүетемсә артабан йәшәп китте Идеал Салют улы. Яралары уңалды.

Уның ҡарауы, дан-ҡөҙрәттәре йыйылмаһын арттырыу, уны яңы трофейҙар менән байытыу ҡомары яңынан уянды. Сөскөргән һайын "Әлхәм" тип торғандағы кеүек, һәр һүҙенә, ваҡ һәм эре эштәренә баһаһын шунда уҡ алып барғыһы килде йәш директорҙың. Нишләптер, бынан ары гел шулай тейеш һымаҡ ине уға. Гоголдең Плюшкины күҙенә ташланған барлыҡ әйберҙе өйөнә ташығандай, Идеал маҡтау һүҙе яҙылған бәләкәй генә ҡағыҙ киҫәген дә ҡәҙерләп ҡабул итте, оҙаҡлап ундай хәл булмай китһә, теләнселәп, һоранып йөрөп алды.

- Тәскирә Вәлеевна, уҡытыусылар көнөндә бүләкләү өсөн беҙҙән ике кеше һорайҙар. Өҫтән квота төшөрҙөләр. Тәҡдимегеҙҙе көтәм, - Идеал Салют улы уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫарына ҡушҡан көндәлек йомоштарына быныһын да өҫтәне.

Тәскирә Вәли ҡыҙы ике сәғәттән дәғүәселәрҙең исемлеген индерҙе. Унда биш исем-шәриф теркәлгәйне.

- Юҡ, риза түгелмен, - тип директор барыһын да һыҙып ташланы.

- Иң лайыҡлылар... - урынбаҫары аптырап, яурындарын йыйырҙы.

- Нығыраҡ уйлағыҙ, - Хөбөтдинов башын күтәрмәй, ҡағыҙҙы кире ҡайтарҙы.

Күпмелер ваҡыт үткәс, Тәскирә Вәли ҡыҙы яңы исемлек менән тағы инде. Был юлы ла фекерҙәре директорҙыҡы менән берекмәне.

- Бер ни ҙә аңламайым, кандидатураларҙы һыҙып тик ултыра, - тип урынбаҫар өлкән коллегаһына үҙенең хәлен һөйләне.

- Һеҙгә, йәштәргә, аҡыл, тәжрибә етеңкерәмәй шул. Һин бағы уҡытыусыларҙы вис киренән күсереп яҙ ҙа, директорҙың үҙен дә өҫтә, - тине тормош күргән оло уҡытыусы.

Ысынлап та, был юлы Тәскирә Вәли ҡыҙы директор кабинетынан уңып сыҡты. Идеал исемлектә үҙен һәм тағы бер кешене ҡалдырҙы ла башҡаларын һыҙып ташланы. Бынан ары, маҡталыуға тәҡдимдәр индергәндә, директорҙың исем-шәрифе исемлеккә гел беренсе ҡуйылды.

* * *

Идеал Салют улы директор вазифаһында маҡталып эшләне. Хужалар ҙа, коллектив та ҡәнәғәт булды унан. Тәүгеләргә күндәмлеге, йомошҡа сослоғо оҡшаһа, уҡытыусыларға кәңәш ҡороп эш итеүе, ипле тыныс холҡо менән яҡын булды. Ҡайһы саҡ көнөнә ике-өс тапҡыр кәңәшмә йыйып алыр ине. Мәктәптә бер генә сара ла үҙ ыңғайына, "тейһә тейенгә, теймәһә - ботаҡҡа" тип үткәрелмәне. Директор тәүҙә саранын планын тикшерергә йыйып ала. Икенсе кәңәшмәлә һәр кемгә бурыстар бүлеп бирә. Әйтәйек, башланғыс синыфтар спартакиадаһы икән, һәр класс етәксеһе, балаларҙы әҙерләүҙән тыш, плакаттар эшләй, ата-әсәләрҙән ярҙамсылар төркөмө туплай. Физкультура уҡытыусыһы ярыш урындарын, судьяларҙы хәстәрләй, ҡайҙа, ниндәй флаг ҡаҙарға аныҡ күрһәтмә ала. Төп ойоштороусы, кем ҡайҙа тора, ҡулына нимә тота, сараны асҡанда ниндәй һүҙҙәр әйтә - баштан алып аҙаҡҡа тиклем һәр кемдең һәр аҙымын контролдә тоторға тейеш була.

Өсөнсө кәңәшмәлә һәр кем директорға әҙерлек тураһында доклад яһай. Идеал Салют улы иғтибарлы тыңлай. Бер нисә аныҡлыҡ, төҙәтмә индерә:

- Флагты уҡыусылар уң ҡулдарында түгел, ә һул ҡулдарында тотоп торһон, - ти, мәҫәлән.

Бының менән бөтәһе лә ризалаша.

- Башҡа һорауҙар булмаһа - эшкә! - Кәңәшмәне Идеал Салют улы фәҡәт ошо фраза менән тамамлай. Гел дә, бөтә кәңәшмәләргә лә, шулай нөктә ҡуя.

Идеал Салют улының кеше менән юғары тонда мөғәмәлә иткәне юҡ. Бер ҡасан да! Бәлки, ҡысҡырырға тауышы булмағандыр. Ҡысҡыра белмәүе лә ихтимал. Була бит ҡайһы кешегә йәбешмәгән шундай сифаттар. Кемдер алдай белмәй, тормошта һүгенмәгәндәр, ҡатын-ҡыҙға һәр саҡ ихтирамлы булғандар осрай...Тауыш күтәрмәгән Идеал юғары мәҙәниәтле кеше һәм етәксе һаналды. Ул ҡысҡырмағас, бүтәндәр уның менән үҙен ипле тотто, директорҙы мөмкин тиклем борсолдормаҫҡа тырыштылар.

Шулай тағы биш йыл үтте.

* * *

Был биш йылдың һөҙөмтәләре директор кабинетының тотошлай бер стенаһын биләгәйне. Маҡтау ҡағыҙҙары, рәхмәт хаттары, дипломдар... - фәҡәт мәктәп директоры Идеал Салют улы Хөбөтдиновтың шәхсән ҡаҙаныштары өсөн бирелгән баһаламанамәләр. Мәктәптең уңыштар таҡтаһы иһә оҙон коридор буйлап һуҙылған һәм уның бай коллекцияһы ла ҙур һоҡланыу тойғоһо уята. Балыҡсы, балыҡтың ҙурырағын тота була, йылға ятыуының сөмбәй урынын мул итеп емләй, ғәҙәттә. Бер мәл, уйламағанда, Хөбөтдиновтың кабинетындағы ҡаҙаныштар күргәҙмәһе шул ролде үтәй башланы.Төрлө комиссиялар, тикшереүҙәр йыш булып тора мәктәптә. Ҡаланыҡылар ҙа, республиканыҡылар ҙа килгеләй. Төрлө кимәлдәге саралар ҙа ойошторола. Ғәҙәттә, директор кабинетынан башлана тикшереү ҙә, юғары ҡунаҡтарҙы ҡабул итеү ҙә. Әлбиттә, килгән кешеләрҙең күҙе иң элек стенаһағы бай шөһрәтнамә йыйылмаһына төшә. Тикшереүселәр үҙ алдарына мәғәнәле йылмайып ҡына ҡуя. Ә ҡунаҡтар һоҡланыуҙарын, таң ҡалыуҙарын шунда уҡ белдерә:

- Ха-а-ай! Дан, бик дан! Ҡулығыҙҙы ҡыҫып китергә рөхсәт итегеҙ, Идеал Салютович. Хуплайбыҙ. Афарин! - тип бер килке һуштарын йыя алмай торалар.

Ҡайһылар, ҡултамға ҡуйыу хоҡуғына эйә булғандар, мотлаҡ рәүештә:

- Беҙҙең министрлыҡтыҡын күрмәйем. Етешһеҙлек! Һораунамә көтәм, мотлаҡ ҡул ҡуясаҡмын! - тип өҫтәп ҡуя

Урындағы хужа - Хөбөтдиновҡа, Хөбөтдинов уға баға, ҡараштары осраша, белер-беленмәҫ баштарын ҡағалар. Мәсьәлә ошо рәүешле хәл ителә.

Тикшереүселәргә башҡасараҡ тәьҫир итә баһаламанамәләр. Әгәр артыҡ етешһеҙлектәр асыҡланмаһа, тейешле ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйғандан һуң, төп тикшереүсе ҡабаттан ҡаҙаныштар күргәҙмәһе ҡаршыһына килеп баҫа. Һоҡланыуын йәшермәй, экспонаттарға ҡарап тора ла:

- Ысынлап та, лайыҡлыһығыҙ, Идеал Салютович, беҙҙең маҡтау ҡағыҙына ла урын әҙерләй башлағыҙ. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса билдәләйәсәкбеҙ, - ти.

Тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә ниндәйҙер кәмселектәр асыҡланһа, һүҙ былайыраҡ алып барыла:

- Ҡаҙаныштарығыҙҙы иҫәпкә алып, етешһеҙлектең осраҡлы булыуына һәм ул тиҙ арала бөтөрөлөүенә ышанып, актты бысратып тормайбыҙ. Етешһеҙлеккә күҙ йомабыҙ, - тип игелек ҡылалар. Ошо рәүешле Хөбөтдиновтың коллекцияһы байып ҡына ҡалмай, ә уны бәлә-ҡазаларҙан, ел-ямғырҙан ҡотҡара бара.

Юғарыраҡ вазифаға күсеп ултырыуына ла булышлыҡ итте мөғжизәле стена. Ҡалала хакимиәт башлығы алмашынғайны. Өҫкә үрләттеләр элеккеһен. Яңы хужа эш башлауының тәүге айында үҙ биләмәһе менән танышып йөрөнө. Хөбөтдинов эшләгән мәктәпкә лә инеп сыҡты. Дөйөм алғанда, күргәндәре менән бик ҡәнәғәт ҡалды. Ә инде директор кабинетында маҡтау ҡағыҙҙары теҙмәһенә күҙҙәре төшкәс, оҙатып йөрөгән мәғариф бүлеге начальнигына өндәште:

- Уйлайһы, аптырайһы түгел, мына урынына кандидатуры, - тип Идеал Салют улының ҡулын ҡыҫты. Элекке хужа үҙе менән төрлө вазифаларҙағы байтаҡ кешене алып киткәйне Өфөгә, бушаған вакансияларҙы тулыландырыу зарураты тора ине шуға.

**(Дауамы. Башы 3-6-сы һандарҙа).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺӨТТӨ ЯРАТМАҺАҢ...

■ Кальций организм өсөн бик файҙалы, әммә был микроэлементҡа бай булған һөт аҙыҡтарын яратмайһығыҙ икән, уның урынына башҡа аҙыҡтар ҡулланырға ғәҙәтләнегеҙ. Мәҫәлән, борсаҡ йәки чечевица ашы, балыҡ консервалары, һөйәкле иттән бешерелгән аш кальцийға бай. Кальций шулай уҡ аҡ фасолдә, сельдерейҙә күп. Хатта ҡайһы бер тәм-томда ла кальций булыуын иҫәпкә алығыҙ. Тундырмаға миндаль сөтләүегә йәки инжир һалып тәҡдим итһәгеҙ, был аҙыҡтан балалар ҙа баш тартмаясаҡ.

■ Лекция йәки дәрес ваҡытында уҡытыусыны тыңлай алмай йоҡлап китһәгеҙ, бының өсөн борсолорға кәрәкмәй, ти Нотр-Дам университеты ғалимдары. Ниндәйҙер мәғлүмәт алғандан һуң йоҡлап алыу кешегә был мәғлүмәтте хәтерендә нығыраҡ һаҡларға ярҙам итә. Шуға ла имтиханға йоҡлар алдынан әҙерләнергә кәрәк. Ғалимдар был теорияны 208 студентта тикшереп ҡарағандан һуң, яңы мәғлүмәт алғандан һуң йоҡларға ятыусылар күпкә яҡшыраҡ уҡыуын иҫбатлаған. Бына шуның өсөн йоҡлар алдынан дәрестәрҙе ҡабатлап алыу кәнәш ителә лә инде.

■ Стэнфорд университетының медицина мәктәбе үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, математиканан насар өлгәшкән уҡыусыларҙың баш мейеһе ҡурҡыуҙан башҡасараҡ эшләй икән. Ғалимдар әйтеүенсә, математика фәне алдындағы ҡурҡыу феномены 50 йыл элек билдәле булған, әммә быға тиклем белгестәр ни өсөн ҡайһы бер кешеләрҙең математиканы яратмауын асыҡларға тырышмаған. Нейробиология күҙлегенән ҡарағанда, математиканан ҡурҡыу тәбиғәте менән башҡа ҡурҡыуҙарға оҡшаған. Икенсе төрлө әйткәндә, ҡурҡыу тойғоһо мейенең мәғлүмәтте эшкәртеү һәләтен түбәнәйтә.

■ Швецияның Лунда университеты ғалимдары йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмаҫҡа һәм дауаларға ярҙам итеүсе вакцина уйлап тапҡан. CVX-210 вакцинаһы иммун системаһы эшмәкәрлеген әүҙемләштерә, артерияларҙа холестерин төйөрсәләре йыйылыуына юл ҡуймай, һеҙәмтәлә, артериялар ҡыҫылыуы (инфаркт сәбәбе) барлыҡҡа килмәй. Швеция тикшеренеүселәре билдәләүенсә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә физик күнекмәләр етешмәүе, насар туҡланыу, тәмәке тартыу һәм күп күләмдә алкоголь ҡулланыу сәбәпсе булып тора, шулай уҡ нәҫелдән килгән факторҙарҙы ла оноторға ярамай. Тикшеренеү авторы профессор Дэн Нильсон әйтеүенсә, был вакцина әле ҡулланылған башҡа дауалау сараларына өҫтәмә рәүештә файҙаланасаҡ.

■ Америка ғалимдары кешенең киләсәк портретын төҙөп ҡараған. Вашингтон университеты хеҙмәткәрҙәре - тикшеренеүсе һәм рәссам Николай Ламм менән генетик Алан Кван 100 мең йылдан һуң йәшәйәсәк кешеләрҙе һүрәтләргә тырышҡан. Уларҙың күҙаллауы буйынса, эволюция, ген инженерияһы һәм космосты үҙләштереү кешенең тышҡы ҡиәфәтен нигеҙҙән үҙгәртәсәк. Тикшеренеүселәр фекеренсә, эволюция һөҙөмтәһендә баш мейеһе ҙураясаҡ, һөҙөмтәлә, маңлай ҙа киңәйәсәк. Бөгөнгө көн өсөн нормаға әүерелгән ген инженерияһы киләсәктә кешенең ҡиәфәтен үҙгәртеүҙә үҙ ролен уйнаясаҡ. Мәҫәлән, ата-әсәләр үҙҙәренең балаларының "генетик составы"н, шул иҫәптән, күҙҙәр, сәс төҫөн һайлай аласаҡ. Дөйөм алғанда, кешенең тышҡы йөҙө уның ниндәй ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүе менән бәйле буласаҡ. Тикшеренеүселәр фаразлауынса, йөҙҙәр артыҡ симметрик һәм бер-береһенә оҡшаш була барасаҡ.

АТАЙҘАР МӘКТӘБЕ

**Атаһының, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Сәләхетдин Хөснөтдин улының, еңеү хәтирәләрен тыңлап, тыныс тормошта тиҫтерҙәре менән ағас мылтыҡтан атыш уйнап, ағайҙары менән ысын ир-егет тәрбиәһе үткән Вәлит Теләүбаев әрме хеҙмәтенә әҙер үҫә. Тыныс тормошта изге бурысты үтәп ҡайтыуҙың бер ҡыйынлығын да күрмәй ул. Ләкин 18 йәшлек егетте яҙмыш үҙ һынауҙары менән көтә. Быны ул өҫтән эсе ҡояшы ҡыҙҙырған, аҫта саңдары борҡоп ятҡан, туҡтауһыҙ ямғыр кеүек пулялар яуып торған бейек тауҙар араһында урынлашҡан Афған еренә барып төшкәс кенә аңлай... Ана шул ваҡыттан нисек бормалы-бормалы тар тау юлынан тимер атын ауыҙлыҡлап юл алһа, бөгөнгәсә дүрт тәгәрмәстәрҙә елә шофер. Тормош юлында ниндәй тауҙарҙы артылған да, ниндәй ҡаршылыҡтар яулаған, үҙ-үҙен таба алғанмы икән яугир-интернационалист? Нисек кенә ауыр булмаһын, үтә һаҡлыҡ менән генә уның хәтер йомғағын тағатыуын һораныҡ. Һүҙ - Бөрйән районы Нәби ауылы ир-уҙаманы Вәлит Сәләхетдин улы ТЕЛӘҮБАЕВҡа.**

# УЛ АФҒАН ЯУЫН ҮТКӘН



### Атайым оҙатып ҡала ине

Мин Нәби ауылында 1965 йылдың 25 августында Ғәрифә һәм Сәләхетдин Теләүбаевтар ғаиләһендә алтынсы бала булып тыуғанмын. Күмәк ғаиләлә биш малай һәм ике ҡыҙ үҫтек. Атайым Сәләхетдин Хөснөтдин улы Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. Ул 1942 йыл һуғышҡа алынып, 1947 йылда ғына тыуған яғына ҡайта. Шунан алып ғүмер буйы ферма мөдире булып эшләп, Башҡортостандың атҡаҙанған малсыһы исеменә лайыҡ була. Әсәйем дә колхозда эшләй. Бишебеҙ ҙә армияла хеҙмәт иттек. Беребеҙ китеүгә икенсебеҙ ҡайтып өлгөрмәй, күрешмәй ҙә ҡала инек. Кемебеҙҙе генә оҙатмаһын, атайым һәр ваҡыт йәшереп кенә илап тороп ҡалыр ине лә, әрменән ҡыуана-ҡыуана ҡаршы алыр ине. Беҙҙең алда армияға барыу-бармау һорауы тыуманы, беҙ мотлаҡ һалдат мәктәбен үтергә тейешлегебеҙҙе аңлап үҫтек. Йәш тулыу менән әрме саҡырыуына бөтә яҡлап та әҙер инек.

### Батырмын тип кем әйтмәс

Мин армия сафына ҡапыл ғына алындым. 1983 йылдың 28 сентябрендә военкоматҡа саҡырып, повестка тотторҙолар ҙа, иртәгәһенә райондан биш егет Өфөгә юлландыҡ. Беҙҙе, Башҡортостандан 150 егетте, вагондарға ултыртып, Куйбышевҡа оҙаттылар. Унан Ростов өлкәһе Яңы Черкасск ҡалаһына хәрби әҙерлек курсына ебәрҙеләр. Полигонда беҙгә атырға, йөк машиналарында ҡатмарлы юлдарҙан руль менән оҫта идара итергә өйрәттеләр. Беҙ, баштa әйтеүҙәренсә, Германияға китергә тейеш инек, әммә 2 ай үтеүгә, Афғанға әҙерләнеүебеҙ тураһында хәбәр тарала башланы. Шулай булды ла, машиналарҙа йөрөргә өйрәнеп, имтиханды тапшырыу менән, декабрь башында һуғышҡа ебәрә башланылар. Йәшермәйем: ныҡ ҡурҡытты. Әммә һайлау юҡ, теләһәнтеләмәһәң дә, ҡушылғанды үтәргә кәрәк. Сираттағы политдәрестә Машков фамилиялы майор: "Һеҙҙең берегеҙ ҙә бынан ҡасып ҡала алмай, һеҙ алдан уҡ һуғышҡа инеү өсөн әҙерләндегеҙ. Үҙегеҙ теләгән иптәштәрегеҙ менән хеҙмәт итергә рапорт яҙып сығығыҙ - иң яҡшыһы шул булыр", - тине. Беҙ шулай эшләнек тә. Бөрйәндән: мин, Булат Сәғитов, Ришат Алтынбаев (мәрхүм инде), ДОСАФФ-та бергә уҡыған Әбйәлил егеттәре, бөтәһе нисәү булғанбыҙҙыр, тик башҡорттар ғына бергә йыйылып, Афғанға юлландыҡ. Төнгө сәғәт 1-ҙә тревога менән шым ғына торғоҙҙолар ҙа, рюкзактарға әйберҙәребеҙҙе тултырып, бер УАЗикка тыңҡыслап тултырып, Дондағы Ростовҡа алып барҙылар. Унан самолет менән Сәмәрҡәндкә, артабан Афғанстанға осоҡ. Беҙ барып төшөүгә, ҡаршыға дембелдәр тап булды. Уларҙы күреп, эй, ҡайтҡы килә, ҡасан ғына 2 йылым үтә инде, тиген уйҙар баштан сыҡмай. Кабулда беҙҙе палаткаларға урынлаштырҙылар. Артыҡ тауыш-тын юҡ, ҡурҡыныс тойолмай. Күңел бер аҙ тынысланa төштө. Әммә беҙҙе вертолеттар менән Бағрам аэропортына алып килеп төшөрҙөләр ҙә, унан машиналарға тейәп, полевой часҡа алып барып, йүнәлеш буйынса тәғәйенләнеләр. Райондаштарым Сәғитов Булат сапер төркөмөнә эләкһә, беҙ Алтынбаев Ришат һәм Хәйбулланан Байғужин Әхмәҙи - өсәүебеҙ авторотаға билдәләндек. Әхмәҙи - 1-се, мин - 2-се, Ришат 3-сө взводта "Урал" машинаһында яғыулыҡ ташыныҡ.

### Саланг перевалы - "ғүмер юлы"

Афғанстандың 400 километрға һуҙылған төп магистрален шулай атайҙар. Был тау юлы СССР сигендәге Хайратон базаһынан Кабулға илтә ине. Саланг перевалы диңгеҙ ярынан 3878 метр бейеклектә урынлашҡан. Саланг туннеле, ниндәй мыҙгел булыуға ҡарамаҫтан, Гиндукуш тауы аша юл хәрәкәтен хеҙмәтләндерә. Был артылыш аша 40-сы армия, шулай уҡ бөтә Афғанстан аҙыҡ-түлек, һуғыш кәрәк-яраҡтары менән тәьмин ителә ине. Был туктауһыҙ яу барған урын. Бына шул бормалы-бормалы тау юлынан колонна составында Әбйәлил егете Хәкимов Нәсим менән тәүге рейсҡа сығып киттек. Машинала йөрөү беҙгә ҡыҙыҡ, аҙым һайын хәүеф-хәтәр һағалап тороуын да, үләбеҙ тиген уй ҙа башыбыҙға инеп тә сыҡмай. Кире ҡайтҡанда 177-се полк туҡталышына туҡтарға тейеш булғанбыҙ, әммә төн булғанлыҡтан, күрмәй, колоннанан айырылғанбыҙ. Беҙҙе дошмандар күҙәтеп ултырғандыр инде, теттеләр генә, нисек тере ҡалғанбыҙҙыр, әле булһа Нәсим менән ғәжәпләнәбеҙ. Ул саҡта беҙгә барыһы ла баш сайҡап аптыраны. Күрәһең, ризығыбыҙ бөтмәгән. Тәүге сирҡаныу шул булды. Был "ғүмер юлы" аша әллә күпме үтергә тура килде. Ҡайтҡанда аҙыҡ-түлек, снаряд, яғыулыҡ тейәп ҡайтабыҙ. Бындай рейстар аҙналарға һуҙыла торғайны. Шулай һынауҙар аша ярты йыл үтеп тә китте.

### Панджшер операциялары

Әле булһа хәтеремдә, 1984 йылдың апрель айында беҙҙе һайлап алып, махсус хәрби задание менән Панджер (беҙҙенсә "Биш арыҫлан") ҡурсаулығына ебәрҙеләр. Был мөхәһиттәр төркөмө башлығы Әхмәт Шах Масуд биләгән Руха ҡышлағы ине. Беҙ төп транспорт магистрале үткән Саланг артылышына яҡын ятҡан ҡурсаулыҡты дошман ҡулынан азат итеү маҡсатында баҫып индек. Колоннала бөтәһе 60-лап машина, шулар араһында иң йәш водитель мин. Беҙҙе танкылар, БТР-ҙар, өҫтән вертолеттар менән оҙатып баралар. Шунһыҙ мөжәһиттәрҙең утына ҡаршы тороп булмай. Шулай булһа ла көслө атыш аҫтынан үтә инек. Гел төндә йөрөйбеҙ, шәп китеп булмай. Беренсенән, дошмандар бер туктауһыҙ ут аса, икен-

***✓ Бер мәл машинам менән ҡуша шартланым. Ут ялҡыны менән өсҡә күтәрелдем дә, кире төшөп етер саҡта нимәләр мине еңеллек менән күтәреп, һаҡ ҡына итеп һалып ҡуйҙы. Бер ерем дә имгәнмәне лә, һынманы ла.***

сенән, тәндә өтөп барған 60 градус эҫелек. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, өҫтөбөҙҙә 12 килограмлыҡ бронялы жилеттар һәм каска. Бындай махсус операцияларға 5 тапҡыр барырға тура килде. Был мәхшәрҙә беҙҙең һалдаттар күпләп үлде, әммә улар араһында бергә килгән башҡорттар булманы. Һәләк булған яуҙаштарҙың әсәйҙәренән хат алыуы иң ауыры ине. Нимә тип кенә лә яуап хаты яҙып ебәрергә ҡул бармай.

### Аллаһҡа ышанысымды юғалтманым

Ҡайһы саҡта яҙмышыма үпкәләп тә ҡуя инем. Башҡа егеттәр рәхәтләнеп Германияла хеҙмәт иткәндә, беҙгә ҡанҡойош майҙанында ғүмеребеҙҙең һәр минуты өсөн көрәшеп, хәүеф аҫтында йөрөргә тура килде. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ошо аяуһыҙ һуғышта тере ҡалғаныма Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтлемен. Мин ышанысымды бер ваҡытта ла юғалтманым, гел үҙемде Аллаһҡа тапшырҙым. Бер мәл машинам менән ҡуша шартланым. Ут ялҡыны менән өсҡә күтәрелдем дә, кире төшөп етер саҡта нимәләр мине еңеллек менән күтәреп, һаҡ ҡына итеп һалып ҡуйҙы. Бер ерем дә имгәнмәне лә, һынманы ла. Аңыма килгәндә кабина менән кузов араһында тимер-томор өҫтөндә ята инем. Һикереп торҙом да киттем, бары тик уң яҡ битем нығ янғайны. Әрменән ҡайтҡанда бер аҙ урыны беленә ине, хәҙер уның эҙе лә ҡалмаған. Хикмәт. Сираттағы рейстан ҡайтып килгәндә дошмандар көслө ут асты. Атыш мәшхәре тынған арала, бер кешенең сүгәләп ултырғанын шәйләнем. Колонна менән шәп тиҙлектә елеп китеп барабыҙ, ни күҙем менән күрәйем: ҡанға батҡан яҡташым Булат Сәғитов беҙҙе күреп тороп баҫҡан. Туҡтарға тигән бойороҡ булмаһа ла, уны-быны уйлап тороу юҡ, йәһәт кенә кабинамдың ишеген асыуым булды, дуҫым һикереп менә һалды. "Кәйнә теле" тигән ҡурҡыныс боролошло урында машинаһы тәрән ярлауға тәгәрәгән булған. Ярыулыҡ тейәгән машиналарыбыҙ менән туҡтауһыҙ ут аҫтынан имен сыға алыуыбыҙға һаман иҫебеҙ китә. Хеҙмәттәшем әле булһа үлемдән алып ҡалыуыма ҡыуанып бөтә алмай, рәхмәттәрен еткерә.

### Берҙәмлегебеҙ көс-ҡеүәт ине

Башта әйтеп үткәнемсә, беҙ һуғышҡа Башҡортостандан 150 һалдат индек. Төрлө милләт һалдаттары булһа ла, беҙ күмәк хеҙмәт иткәс, полкта башҡортса һөйләшеп йөрөнөк. Берҙәмлегебеҙ, ярҙамсыллығыбыҙ өсөн беҙҙе рота техниғы гел: "Башҡорттарҙан өлгө алығыҙ", - тип маҡтай торғайны. Ысынында ла беҙ нығ татыу булдыҡ, машинабыҙ боҙолһа ла, бүтән хәл тыуһа ла, йүгерешеп йөрөп бер-беребеҙгә ярҙам иттек. Ял иткәндә лә башҡортса йырлашып ултырабыҙ. Ришат гармунда һыҙҙыра торғайны. Машинабыҙҙың тәҙрәһендә торған ҡояштан ҡаплап торған япмаһына "Башкирия. Бурзян" тип, һәр кем үҙ районын яҙып алдыҡ. Колонна тап булһа, бер-беребеҙҙе шул яҙыу аша танып, сәләмләшәбеҙ. Учалылар күпләп осрай торғайны. Аҙаҡҡы йылды өйрәнеп китеп, ҡайтҡы ла килмәй башланы. Тәүҙә һуғыштың ысынбарлығын күреп, йөрәкте ҡурҡыу тойғоһо ялмаһа, аҙаҡтан үҙ-үҙеңде яҡлау, ғүмереңде һаҡлап ҡалыу тойғоһо өҫтөнлөк ала. Әгәр һин атмайһың икән, тимәк, үҙеңә сәпәйәсәктәр. Хәрби әҙерлек ваҡытында сәпкә атҡан саҡта ҡурҡыштан ҡуҙҙе йома торғайным, ә бында тора-бара бер ҡул менән дә тапҡыр ғына атырға өйрәнеп киттем. Беҙ бит ул һуғыштың мәғәнәһеҙлеген дә анлап етмәгәнбеҙ, ә бары тик үҙебеҙҙе бойороҡ үтәгән яугир-интернационалист итеп танығанбыҙ.

### Йәүгәземдең һыуын һағындым

Йәшәү шарттарына килгәндә, беҙ ҡышлаҡтарҙа йәшәнек. Кеше бит барыһына ла өйрәнә. Ашау яғынан ҡытлыҡ булманы, емеш-еләк тә күп үҫә. Үҙебеҙ йөк ташығас, гел мул ҡайтабыҙ. Ә бына Панджшер ҡурсаулығында поста торған егеттәргә ризыҡ яғы наҡыҫ ине. Беҙ юл буйындағыларына аҙыҡ-түлек ҡалдырып китә торғайныҡ. Һары ауырыуы ныҡ көслө булды. Ҡоро һауанан һалдаттарҙың тиреләре боҙола ине. Мин үҙем ауырыманым. Афғанда иң ҡыйыны - таҙа һыуға ҡытлыҡ кисерҙек. Арыҡтан аҡҡан һыуҙы эсергә ярамай, ағыулы булыуы ихтимал. Һыуға бәйле бер хәл иҫкә төштө. Әрменән һуң, колхозда эшләп йөрөгән саҡта, ауылдаштар менән Өфөгә сыҡтыҡ. Шунда ашханала ултырғанда бер омон кейемендәге ир минең эргәмә килеп: "Һеҙ Афғанда булдығыҙмы?" - тип һорай ҡуйғас, "Эйе", тим. "5174 номерлы бензовоз һинеке инеме?" - тип һорағас, бөтөнләй аптырауға ҡалдым. Шулай ҙа, бер аҙ ултыра биргәс, шикләнеп кенә: "Эйе" - тигәйнем, "Рәхмәт, брат. Иҫләйһеңме, Пули-Хумрила тәндә һин миңә бер котелок һыу биргәйнең", - тип ҡулымды ҡыҫып китте. Һыу ҡәҙерен беҙгә Афған нык төшөндөргәйне шул... Мин үҙем дә тыуған яҡтарға ҡайтҡас, Йәүгәземдән ятып тороп бер туйғансы һыу эсергә хыяллана торғайным. Шөкөр, һыуын татырға яҙҙы.

### Тыныс тормошҡа ҡайтыу юлы

Мин Афғанға китеремдә белгәс, атай-әсәйемә йәшермәй хәбәр иттем. Армиянан ҡайтыр ваҡыт етһә лә, урыныма алмашсы водитель булмағанлыҡтан, тағы 3 ай йөрөргә тура килде. Ҡайтмай оҙаҡлағас, әсәйемдәр ныҡ борсолғандар. Әсәйем менән Йәүгәзе йылғаһынан һыу алып ҡайтып килгәнендә осраштыҡ. Мине күргәс, инбашынан көйәнтәләре ыскынып, биҙрәләре ергә тәгәрәне. Йүгереп килеп: "Һине күрер көн бар икән", - тип ҡосаҡлап алды. Атайым малдарға бесән һалып йөрөй ине. Ул килеп ҡосаҡлап илап ебәрҙе. Әсәйемә кустәнәскә беҙҙең яҡта дефицит булған цейлон сәйе менән бүләккә яулыҡ алып ҡайттым. Әсәйем күрше-күләнде саҡырып, тәмле сәй менән һыйланы. Ә яулыҡын ғүмеренең аҙағынаса һаҡлап ябынды, аҙаҡ ҡатыныма аманат итеп тапшырҙы.

Хәрби хеҙмәт донъяға ҡарашты ҡырҡа үҙгәртте. Ябай ғына ауыл малайынан ҡыҙыу егет булып ҡайттым. Һуғыштан һуң тыныс тормошҡа ҡулайлашып китеүе нык ауыр булды. Төндәрен һатаушып килеп уяна инем. Әсәйем һәр ваҡыт эргәмә килә һалып, өйҙә икәнемә төшөндөрөп, тынысландыра торғайны. Әрменән ҡайтыуыма 5-6 йыл үткәс, Афған һуғышы тураһында тәүге фильмды ҡарарға тура килде. Ныҡ ауыр кисереп, ауырыуға һабышып ҡайттым шунан. Шулай ҙа мин үтә тотанаҡһыҙ булманым, үҙемде тыныс тормошҡа тырыштым...

### Мине юлдар, юлдар саҡыра

Ҡайтып, бер-ике ай йөрөнөм дә, "Ҡыҙыл таң" колхозына эшкә индем. Бәләкәйҙән ат яратып үҫкәс, бөтәһе лә мине атайым урынына фермаға эшкә килер тип көткән. Ә мин армиянан руль артында йөрөргә мауығып ҡайтҡайным инде. Башта кеше урынына төрлө машиналарҙа йөрөһәм, көҙгә үҙемә айырым ҙур "ЗИЛ" машинаһын беркетеп ҡуйҙылар. Шунан алып йөк машинаһында колхоз эше менән төрлө сәфәрҙәргә сығылды. Ә инде 1993 йылдан 2000 йылға тиклем УАЗ машинаһында колхоз рәйесен алып йөрөй башланым. Колхоздар айырылғас, үҙебеҙҙең ауылда йөк машинаһында төрлө эштәр башҡарҙым. 2006 йылда Иҫке Монасип ауыл хакимиәтенә эшкә саҡырҙылар. Шунан алып бөгөнгә тиклем водитель булып эшләйем. Дөйөм алғанда, водитель һөнәремә быйыл 40 йыл тула. Әле булһа үҙ эшемдән кинәнес табам. Бер-ике көн район үҙәгенә сыҡмай торһам да, күңел толҡа тапмай башлай. Юлдар мине һаман үҙенә әйҙәй. Элек колхоз ваҡытында эшләүе лә, йәшәүе лә күңелле ине бит. Беҙ тиҫтерҙәр менән ярыша-ярыша дәртләнеп йөрөп эшләнек. Эшебеҙҙең һөҙөмтәһен дә күрә инек. Машинам һәр ваҡыт төҙөк булды, был яҡтан мин маҡтанып әйтә алам.

### Хәрби династия дауамы

Буласаҡ кәләшемде оло юлға сыҡҡанда машинама ултыртып алғайным, шунда танышып киттек. Тимер ауылы һылыуы Тәслимә Мортаза ҡыҙы менән 1987 йылда ғаилә ҡороп ебәрҙек. Бер-бер артлы балалар тыуҙы. Ҡыҙҙарым Альбина, Альмира, улым Вадимдың хәҙер үҙ ғаиләләре бар. Өсөһө лә юғары белем алды. Ә беҙ 4 ейән менән 2 ейәнсәргә бәхетле олатай-өләсәйбеҙ. Берҙән-бер улым Вадим уҡып бөтөү менән үҙе ныҡышып йөрөп армияға китте. Повестка алғас, нисек итеп үрле-ҡырлы һикереп ҡыуаныуын күрһәгеҙ икән! Тәүҙә Махачкалала, аҙаҡ Әрмәнстанда хеҙмәт итте. Әрменән ҡайтҡас, һөнәре буйынса нефть өлкәһендә бер аҙ эшләп йөрөп килде лә, хәрби хеҙмәтте һайланы. Күрәһең, Ватанды һаҡлау - төп һөнәребеҙҙер. Әлеге ваҡытта улым да, ике кейәүем дә Өфө ҡалаһының Затон биҫтәһендә урынлашҡан генерал-майор Миңлегәли Шайморатов исемендәге 29-сы отрядта контракт буйынса хеҙмәт итәләр. Өсөһө лә хәрби хәрәкәт ветерандары. Балаларымдың хәрби хеҙмәттә йөрөүенә, бер яҡтан, хәүефләнһәм, икенсе яҡтан, ҡыуанам. Кемдер илде һаҡларға тейеш бит. Илдең ни тиклем армияһы көслө, шул тиклем халыҡҡа йәшәүе лә тыныс.

Әлеге әрме хеҙмәтен элекке менән бер нисек сағыштырып булмаһа ла, егеттәр үҙ бурысын үтәргә тейеш тип һанайым. Хәҙерге үҫмер малайҙарға ҡарап, иҫем китә. Уларҙа үҙаллылыҡ, яуаплылыҡ тойғоһо бөтөнләй юҡ. Буласаҡ һалдаттарҙы етәкләп тигәндәй йөрөтөп, медкомиссия үткәрәләр, ҡарап, ҡурсалап ҡына йөрөтөп алып ҡайталар. Ил һаҡлай торған егеттәр бит улар. Хәҙер атай-әсәй үҙе үк балаларын алдына алып, әпәүләп боҙоп бөттө. Өйҙә булмаған тәрбиәне мәктәптә уҡытыусы нисек бирә алһын? Беҙҙең заманда военкомат саҡыра икән, йәйәүләп булһа ла барып еттек, бер кем ҡарауыллап оҙатып йөрөмәне. Армиянан тороп ҡалыу ғәрлек ине...

**Динара ҠОТЛОБАЕВА**
**яҙып алды.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Стрестың ыңғай яғы

Борон кеше һунарсылыҡ менән ғүмер иткәндә уға йыртҡыс хайуандар менән даими осрашырға тура килгән. Уның тәне шунда уҡ реакция күрһәткән - йөрәге йышыраҡ тибә башлаған, һулышы йышайған, ашҡаҙан һутының әселеге артҡан, был үҙ сиратында һуғышырға йәки ҡасырға кәрәкле биҙҙәрҙең эшмәкәрлеген көсәйткән. Был стресс реакцияны уның ғүмерен һаҡлап ҡалған.

Бөгөн дә стресс ҡайһы бер осраҡта, мәсәлән, үҙебеҙҙең һәләтебеҙҙе һәм оҫталығыбыҙҙы бөтә тулылығында күрһәтергә, тиҙ уйларға һәм эшләргә, аудитория алдында сығыш яһарға, спортсыларға еңеү өсөн бөтә көсөн һаларға ярҙам итә. Әммә ашҡаҙанда әселек артҡанда, уны кәрәкле йүнәлешкә ебәрмәһәң, ул ашҡаҙан сей яраһына һәм башҡа ауырыуҙарға килтереүе мөмкин.

**Нисек итеп стресҡа бирешмәҫкә?**

Һеҙ стресҡа ҡаршы тәүге "сирҡаныу" алдығыҙ. Ыңғай фекер йөрөткәндә һәм стресс хәлендә башҡа кешеләргә йыуаныс булып хеҙмәт итәһегеҙ икән, һеҙ стрестың йоғонтоһон кәметәһегеҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоп, өс тапҡыр тәрән итеп тын алып, тыныс картиналарҙы күҙ алдығыҙға килтереп, стрестың ҡаяуын йолҡоп алаһығыҙ. Ике бармағығыҙҙы бергә тоташтырып, стресҡа ҡаршы иң бөйөк дарыу - Ижадсы менән бәйләнеште нығытаһығыҙ. Үҙегеҙгә ыңғай маҡсат ҡуйып, һеҙ стресты ҡоралһыҙландыраһығыҙ. Хатта уңайлы итеп ултырыу, күҙҙәрегеҙҙе йомоп өс тапҡыр тәрән итеп тын алыу мөмкинлеге булмағанда ла үҙегеҙҙе һаҡлаусы уйҙағы ҡуйылышҡа мөрәжәғәт итергә була. Бына шундай бер нисә күнекмә:

Был да үтер.
Булһа ни булған?
Аллаһ мине ҡалдырмаҫ.
Нимә генә эшләнмәһен - барыһы ла яҡшыға.
Эштәр яҡшырғандан яҡшыра бара.
Был һоҡланғыс көн буласаҡ.

Ә бына түбәндәге симптомдар аша тәнебеҙ стрестың уларға етди һөжүм яһай башлауын белгертә: ашҡаҙанда насар тойғолар; йышайған пульс; йоҡоһоҙлоҡ; даими арыу; тырнаҡтарыңды сәйнәү теләге; ҡыҙыусанлыҡ; хәтер насарайыуы; бер нәмәгә иғтибар туплай алмау; шәрбәтле аҙыҡҡа тартылыу; алкоголде саманан артыҡ ҡулланыу. Әгәр һеҙ бизнес менән шөғөлләнһәгеҙ, тағы бер пункт өҫтәгеҙ - үҙ бурыстарыңдан ситкә тартылыу. Быны бер һүҙ менән атағанда - йонсоу.

Ә көндәлек тормошта стрестың эҙемтәләрен йомшартыу өсөн нимә эшләргә? Юмор тойғоһон һаҡлап ҡалығыҙ; яңғыҙ ҡалып көсөргәнештән арынығыҙ; физик күнегеүҙәргә өҫтөнлөк бирегеҙ; йәйәү йөрөгеҙ; массаж эшләтегеҙ; яны әйбер һатып алығыҙ; күңелле спектаклгә йәки киноға барығыҙ; алкоголь һәм кофеин ҡулланыуҙы кәметегеҙ; үҙ бурыстарығыҙҙы кемгәләр тапшырығыҙ; етәксегеҙ алдында ҡаушап ҡалмағыҙ; ахыр сиктә, эшегеҙҙән китегеҙ.

Тәүге "тиҙ ярҙам" саралары шундай. Иң мөһим һаҡланыу сараһы булып көсөргәнештән арыныу тора. Бындай торошҡа инеп, ниндәйҙер тәбиғәт ҡосағында булған сағығыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ - диңгеҙ яры, ялан, тау башы, күл буйы, йылға. Был картинала ике йәки өс тапҡыр туҡталығыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



### 21 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Х/ф "Второе дыхание". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Когда закончится февраль". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.00 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Родина". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Уроки мужества. [12+]**
**15.15, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.30, 17.30 Это мы! [6+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00, 4.30 Күстәнәс. [12+]**
**23.30, 5.00 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Рябиновый вальс". [12+]**
**3.00 Спектакль "Между небом и землей". [12+]**

### 22 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК
#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.00 Х/ф "Второе дыхание". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Когда закончится февраль". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Д/ф "Идущие в огонь". [12+]
4.39 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Родина". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Уроки мужества. [12+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Папа". [12+]**
**3.00 Спектакль "Три аршина земли". [12+]**
**4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 23 ФЕВРАЛЯ СРЕДА
#### РОССИЯ 1

6.20 Х/ф "Выйти замуж за генерала". [16+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.15 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.05 Х/ф "Экипаж". [6+]
14.40 Х/ф "Маршруты любви". [12+]
18.10 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию". [6+]
21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.20 Х/ф "Огонь". [6+]
23.50 Большой праздничный концерт, посвященный Дню защитника Отечества. Прямая трансляция.
1.50 Х/ф "Охота на пиранью". [16+]
4.10 Перерыв в вещании.
4.40 Х/ф "Любовь не по правилам". [12+]

#### БСТ

**7.00 "С Днем защитников Отечества!" Концерт. [12+]**
**8.00 Автограф. [12+]**
**8.30 Хазина. [0+]**
**9.00, 22.00 Историческая среда. [12+]**
**9.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**10.00 Д/ф "Дорога домой". [12+]**
**10.30 "Станем мы солдатами". Детский концерт. [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Д/ф "Школа героев. Соловецкие юнги". [6+]**
**12.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Дню Защитника Отечества.**
**13.30 "Дарю песню". [12+]**
**14.15 Учим башкирский язык. [6+]**
**14.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**15.00 Спектакль "Ҡаһым түрә". [12+]**
**17.15 История в граффити. [6+]**
**17.30 Д/ф "Вертолеты". [6+]**
**17.45 Д/ф "Герои среди нас". [6+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Д/ф "Меня зовут Салават".**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**23.00, 4.30 Поет народный артист РБ и РТ Айдар Галимов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Май". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Москва-Васютки". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 24 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ
#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию". [6+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Когда закончится февраль". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Х/ф "Экипаж". [6+]
4.50 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Родина". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә.Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Война. Остаться человеком". [16+]**
**3.00 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 25 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА
#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Х/ф "Посторонняя". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Юморина. [16+]
23.50 Х/ф "Огонь". [6+]
2.05 Х/ф "Любка". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Д/с "Подводный флот России". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Д/ф "Песнь Земли". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 3.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 23.00 Автограф. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00, 5.00 Х/ф "Валерий Харламов. Дополнительное время". [12+]**
**2.00 Спектакль "Наследство". [12+]**
**4.30 Әлләсе... [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 26 ФЕВРАЛЯ СУББОТА
#### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.50 Доктор Мясников. [12+]
13.50 Т/с "Точка кипения". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "ЗАГС". [12+]
1.10 Х/ф "Сжигая мосты". [12+]
4.24 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 Х/ф "Две далекие близкие зимы". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "КультУра". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Х/ф "Седьмое лето Сюмбель". [12+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет… [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**0.00, 4.15 Х/ф "Оперативная разработка". [16+]**
**2.15 Спектакль "Белый пароход". [12+]**
**5.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 27 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
#### РОССИЯ 1

5.20, 3.15 Х/ф "Жизнь после жизни". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Неделя в городе.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Парад юмора. [16+]
13.50 Т/с "Точка кипения". [16+]
17.50 Танцы со звездами. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
1.30 Х/ф "Маша и Медведь". [12+]
4.59 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Д/ф "Выбор есть всегда". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Сулпылар". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Ай текә". [6+]**
**11.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан". [0+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Х/ф "Оперативная разработка-2: Комбинат". [16+]**
**1.00 Спектакль "Шестая жена Ивана Грозного". [12+]**
**3.30 Х/ф "Оперативная разработка". [16+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 февраль "Урал батыр"** (Башҡорт халыҡ эпосы буйынса). 12+
**22 февраль "Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева), театрлаштырылған тамаша. 12+
**23 февраль "Баллы, тирәкле Балтирәк"** (А. Ишбулдина), лирик комедия. 12+
**24 февраль "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың повесы буйынса), драма. 12+
**25 февраль "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 12+
**26 февраль "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 18.00 16+
**27 февраль Премьера! "Эңер төшкәс"** (А. Дударев), мелодрама. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 февраль "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 18.00 12+
**25 февраль "Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), романтик драма. 12+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23 февраль "Любезники, любизар..."** ҡурайға мәҙхиә. 18.00 6+
**24 февраль "Бах. Музыкальная библия".** 6+
**27 февраль "Weekend с органом".** 15.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**22 февраль "Эх, Өфө ҡыҙҙары!"** (И. Абдуллин), музыкаль комедия. 12+
**26 февраль "Считаю до пяти..."** (М. Бартенев), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**23 февраль "Һатам! Иремде һатам"** (Н. Ғәйетбай), комедия. 18.00 12+
**24 февраль "Килдең, киттең - хуш, байғош..."** (М. Задорнов), комедия. 12+
**25 февраль Премьера! "Нәҙер"** (Т. Миңнуллин), драма. Л. Кәримованың юбилей кисәһе. 12+
**26 февраль "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 16+
**27 февраль "Три богатыря и Соловей-разбойник"** (А. Зарипов), әкиәт. 12.00 0+
**"Ләсәй"** (Ю. Тупикина), комедия. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**25 февраль Премьера! "Аленький цветочек"** (С. Аксаков), әкиәт. 10.00, 12.00 0+
**26 февраль Премьера! "Аленький цветочек"** (С. Аксаков), әкиәт. 12.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Февраль (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (20) дүшәмбе | 6:56 | 8:26 | 13:30 | 16:41 | 18:33 | 20:03 |
| 22 (21) шишәмбе | 6:54 | 8:24 | 13:30 | 16:43 | 18:35 | 20:05 |
| 23 (22) шаршамбы | 6:52 | 8:22 | 13:30 | 16:45 | 18:37 | 20:07 |
| 24 (23) кесе йома | 6:49 | 8:19 | 13:30 | 16:47 | 18:39 | 20:09 |
| 25 (24) йома | 6:47 | 8:17 | 13:30 | 16:48 | 18:41 | 20:11 |
| 26 (25) шәмбе | 6:45 | 8:15 | 13:30 | 16:50 | 18:43 | 20:13 |
| 27 (26) йәкшәмбе | 6:42 | 8:12 | 13:30 | 16:52 | 18:45 | 20:15 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры коллективы Рәсәйҙең, Башҡортостандың халыҡ артисы Заһир Вәлитов һәм оҙаҡ йылдар театрҙа музей мөдире булып эшләгән Миңсәриә Әсфән ҡыҙы Вәлитованың һөйөклө ҡыҙҙары **Айгөлдөң** был донъяны ваҡытһыҙ ташлап китеүе сәбәпле уның яҡындарының, дуҫтарының, коллегаларының оло ҡайғыһын уртаҡлаша.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 23 ФЕВРАЛЬ - ВАТАНДЫ ҺАҠЛАУСЫЛАР КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**6-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тәхет. Киләсәк. Бәхет. Уҡ. Һине. Ҡәләм. Үс. Дошман. Ай. Алырымҡош. Хис. Алла. Солтан. Йәм. Ут. Аҡ. Эйәр. Атам. Нур. Ер. Тел.

**Вертикаль буйынса:** Ҡарағай. Бала. Ырым. Мамыҡ. Кеше. Йәшлек. Тәү. Әүлиә. Буран. Аша. Уян. Ҡурай. Йыр. Әсә. Иле. Һандуғаҫҡай. Юлда. Етем. Ышаныс. Нам.

**Ҡотлайбыҙ!** Гәзитебеҙҙең 6-сы һанындағы йәшерелгән һөйләмде (**Эй, фекерем, булма фәхишә!**) дөрөҫ табып шылтыратҡан Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан **Мәғәзирә Исәндәүләтова** еңеүсе булды.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЙЫРСЫЛАР, БӘЙГЕГӘ!

**"Ашҡаҙар" радиоһы башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусы иң яҡшы үҙешмәкәр йырсыны билдәләү маҡсатында "Ашҡаҙар моңдары" беренсе республика конкурсын иғлан итте. Башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарған талантлы һәүәҫкәрҙәрҙе табыу һәм уларға ярҙам итеү, һирәк яңғыраған халыҡ йырҙарын киң йәмәғәтселеккә сығарыу, һаҡлауға булышлыҡ итеү маҡсатында ойошторола был ярыш.**

"Конкурс 14 февраль старт алды һәм 4 этаптан торасаҡ. Ҡатнашыусылар 3-тән 30 йәшкә тиклем һәм 30-зан өлкәнерәктәр төркөмөнә бүленә. Халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙы йәшенә, ҡайһы ил кешеһе булыуына ҡарап сикләүҙәр юҡ, вокал буйынса махсус һөнәри белемле булыуҙары ла талап ителмәй. Бер һүҙ менән әйткәндә, халыҡ йырҙарын халыҡ йырсылары башҡарасаҡ", - ти "Ашҡаҙар"ҙың баш мөхәррире Гәүһәр Батталова.

Баһалама ағзалары финалға 20 ҡатнашыусыны һайлап аласаҡ. Улар араһынан 6 еңеүсегә аҡсалата бүләк тапшырыласаҡ. Шулай уҡ "Тамаша һөйөүе призы"н тапшырыу ҡаралған. Еңеүселәрҙе 29 октябрҙә Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында үтәсәк "Ашҡаҙар моңдары" I Башҡорт халыҡ йыры фестивале сиктәрендә тантанала тәбрикләйәсәктәр. Был сарала финалға сыҡҡан иң шәп башҡарыусылар тере тауышҡа йырларға тейеш. Конкурс тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте 8 (347) 246-14-82 телефон һандары буйынса, bash.news сайтында йәки "Ашҡаҙар" радиоһының социаль селтәрҙәргә сәхифәләре аша белергә мөмкин.

МӘҘӘНИӘТ. СӘНҒӘТ.

# САҒЫУ САРАЛАР КӨТӨЛӘ

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы быйылғы йылды Башҡорт мәҙәниәте һәм рухи мираҫ йылы тип нарыҡланы. Ошо көндәрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залының Бәләкәй залында исемле йылдың төп йүнәлештәре һәм ваҡиғалары билдәләнде.**

Сараны Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова алып барҙы. Ҡатнашыусыларҙы Башҡортостан Башлығы исеменән Хөкүмәт Премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов сәләмләне. "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы эшендә ыңғай һәм конструктив тәжрибә күҙәтелә. Бына өсөнсө йыл мәҙәни саралар яңы форматта, айырым темаға, телгә, тарихҡа, мәҙәниәткә арнап үткәрелә", - тип билдәләне Азат Шамил улы.

Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты рәйесе Юлдаш Йосопов Башҡорт мәҙәниәте һәм рухи мираҫ йылының төп саралары хаҡында бәйән итте. Йылдың төп үҙенсәлеге - яңы башланғыстарға, башҡорт халҡының бай рухи мираҫына ижади ҡараштар асыҡлау, тип билдәләне ул. Мәҫәлән, башҡорт мәҙәниәтенең традицион элементы булған һабантуй яңы һулыш кисерәсәк. Былтыр республиканың төрлө райондарында ғалимдар, тыуған яҡты өйрәнеүселәр ҡатнашлығында халыҡ байрамының яңы форматы хупланды. Башҡорт мәҙәниәте һәм рухи мираҫ йылында ошо тәжрибәне киң ҡулланыу күҙаллана. Шулай уҡ "Бәйге" башҡорт алышы ярыштары форматы республиканың бар районларына индерелеп, һабантуй ваҡытында үткәреләсәк. Юлдаш Мөхәмәт улы билдәләүенсә, быйыл "Кесе ҡоролтай" балалар башҡорт ҡоролтайы булдырыу планлаштырыла. Ул башҡорт гимназиялары уҡыусыларын туплаған берҙәм майҙансыҡ буласаҡ, тип күҙаллана. Был проект мәғариф учреждениеларында тематик дәрестәр, викториналар үткәреүҙе, "Урал батыр" мәктәбе ойоштороуҙы, йәйгеһен "Рухиәт байрамы"н уҙғарыуҙы һәм башҡа сараларҙы күҙҙә тота.

# ТОРМОШ - ҠУЛАСА

**Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе сәхнәһендә Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы Ләйсән Кәримованың юбилей кисәһе уҙғарыла һәм ошо уңайҙан Туфан Миңнуллиндың "Тормош - ҡуласа" спектакленең премьераһы буласаҡ. Был күркәм сараны тамашасылар 25 февралдә ҡарай ала.**

Яңы спектаклдең ҡуйыусы режиссеры Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Гөлдәр Ильясова. Ләйсән Кәримова унда Зәһира ролен уйнай. Әҫәрҙә барған ваҡиғалар һуғышҡа киткән ике дуҫтан башланып китә. Дошман менән сираттағы ҡаты бәрелеш ваҡытында улар береһе вафат булған осраҡта икенсеһенең ғаиләһен тулыһынса үҙ хәстәренә алырға, йәки икеһе лә имен ҡайта ҡалһа, бер аҙнаға ҡатындары менән алмашып торорға вәғәҙәләшә. Яҙмыш быларға мәрхәмәтлек күрһәтә - икеһе лә һүғыштан тере ҡайта. Әммә үлем алдында бирелгән ант хәтерҙәренә төшә. Тамашасыларға спектакль геройҙары был һынауҙы нисек тотоуы күрһәтеләсәк.

# СИБАЙҘАР КИЛӘ!

**"Сулпан" Сибай балалар театры 24 мартта Өфөнөң "Нур" дәүләт татар театры сәхнәһендә сығыш яһаясаҡ. Баш ҡала тамашасылары иғтибарына Динара Ҡаюмованың "Самрау батша бүләге" әкиәте тәҡдим ителә. Режиссеры - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фирғәт Ғарипов.**

Спектакль геройҙары Урал һәм Булат исемле малайҙар супергеройҙар тураһында йәнһүрәттәр һәм уйындар ярата. Шуға һылтанып хатта ашарға ла, йоҡларға ла онота һәм әсәләрен дә тыңлашмайҙар. "Беҙҙең заманда бындай текә супергеройҙар булмаған", - тип кенә ҡуялар. Шунан әсәһе уларға үҙенең бала саҡ супергеройҙары хаҡында мауыҡтырыҡ итеп һөйләй башлай, боронғо башҡорт эпостарындағы батырҙар, һылыуҙар һәм Самрау батша хаҡында бәйән итә. Малайҙар был хикмәтле һүҙҙәргә ышанып, үҙҙәрен дә батыр итеп тойоп, ваҡиғаларҙа ҡатнаша башлай. Кескәйҙәр өсөн тамаша көндөҙгө сәғәт 12-лә башланасаҡ.

*Рәми ағайҙы үҙ заманында баһаланмағаны, ижад емештәрен китап итеп сығара алмағаны, ҡыйырһытылыуы, эҙәрлекләнеүе өсөн түгел, ә оло таланты, Хәҡиҡәткә, туған телгә, халыҡ рухына тоғро булғаны өсөн күтәрәбеҙ.*



ХӘТЕРЛӘП...

# ХӘҠИҠӘТКӘ ТОҒРОЛОҠ ӨЛГӨҺӨ

**Был көндәрҙә республика халҡы Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 90 йыллыкты киң билдәләй. Был байрам тураһында республика Башлығы Радий Хәбировтың махсус указы сыкты, Республика Хөкүмәте лә халык шағирының якты иҫтәлеген, талантлы ижадын күтәрмәләү буйынса бихисап саралар планлаштырҙы. Шуға ярашлы быйыл "Китап" нәшриәтендә шағирҙың тормошона һәм ижадына арналған 5 китап сығасаҡ, Рәми Ғариповтың балалары менән бергә әҙиптең һанлы архивы булдырыласаҡ. Архив фондында - көндәлектәр, хаттар, тәржемәләр һәм, әлбиттә, шиғырҙар, улар араһында быға тиклем баҫылмағандары ла буласаҡ.**


Рәми Ғариповтың ейән-ейәнсәрҙәре былар.

Шағирҙың юбилейына арналған байрам, әлбиттә, йыл аҙағында, 14 декабрҙәге Башҡорт теле көнөндә үк дәррәү башланғайны. Һәр ауылда, мәктәптә генә түгел, һәр ғаиләлә унын данлыклы "Туған тел" шиғыры яңғыраны, флешмоб кеүек күмәк саралар ҙа Рәми һүҙенә арналды. Февраль тыуыу менән шиғыр һөйләүселәрҙең "Минең Рәми" конкурсы, башҡа бәйгеләр старт алды. Теге аҙнала Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары үҙ тамашасыларына "Февраль. Буран..." спектаклен тәҡдим итте. Зөһрә Буракаева, Хөрмәт Үтәшевтар тарафынан шағирҙың көндәлектәренә нигеҙләнеп ижад ителгән был тамаша ун йыл рәттән театр афишаһынан төшкәне юк. Һәм унда ысынлап та Шағир шәхесен хөрмәтләгән, уның талантын йөрәгенә яҡын иткән, уның һүҙен рухына һеңдергән тамашасы йыйылды. Сәхнәлә Рәми образын кәүҙәләндереүсе йәш артистар Артур Кәбиров, Фирғәт Ғариповтар инде тормошта ла Шағир рухын йөрөтөүселәрҙән тип ҡабул ителә. Был юлы Фирғәт Ғарипов урынына уйнаған Артур Ҡунаҡбаевты ла йылы ҡаршыланы тамашасы. Уны Булат Йосопов төшөргән "Рәми" киноһында ла ошо ролдә күрәсәкбеҙ әле. Кинонын премьераһын май айында тамашасылар хөкөмөнә сығарырға вәғәҙәләй авторҙар.

Үткән шәмбелә Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана ғаилә архивы күргәҙмәһе эшләй башлау уңайы менән шулай уҡ матур осрашыу булды. Әҙиптең хеҙмәтен нисек баһаларға була? Баҫылып сыҡкан китаптары аша, тиерһегеҙ. Әммә Рәми ағайҙың, билдәле сәбәптәр арҡаһында, баҫылып сыҡкан китаптары әллә ни күп түгел. Ә әлеге күргәҙмәләге баҫылып сыҡмаған ҡулъяҙмаларының бер бөләкәй өлөшө аша ғына ла Рәми Ғариповтың иҫ киткес эшһөйәрлек, фиҙакәрлек өлгөһөнә шаһит булына. Тәржемәләре, шиғырҙары, фольклор экспедициялары материалдары - барыһы ла матур почерк менән яҙылып, үҙ ҡулдары менән төпләнгән бихисап китаптар рәүешендә тәҡдим ителә бында. Осрашыуҙағы сығышында: "Шағирҙың көндәлектәре, биографияһы Томас Эдисондың "Гений - ул бер процент талант һәм туҡһан туғыҙ процент ауыр хеҙмәт" тигән цитатаһын раҫлай", - тине Хөкүмәт вице-премьеры Азат Бадранов Рәми Ғариповтың хеҙмәт фиҙаҡәрлеген билдәләп. Әммә Шағирҙың талантын да, һис шикһеҙ, шул уҡ процентҭар менән үлсәп булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды вице-премьер: "Рәми Ғарипов шиғырҙары көсө буйынса Көмөш быуат авторҙарыныҡынан кәм түгел, - тип дауам итте ул һүҙен. - Юҡҡа ғына уның ижадын Сергей Есениндыҡы менән сағыштырмайҙар. Рәми Гарипов - башҡорт поэзияһының генийы. Шуға күрә уның ижадын популярлаштырыу беҙҙе илһамландыра һәм ҡыуандыра. Шул уҡ ваҡытта һәр билдәле шәхес кеүек, Рәми Ғариповтың тормошо ла төрлө мифтар менән тулы (тап шуның өсөн дә Рауил Бикбаев яҙған биография китабы яңынан баҫыласаҡ). Рәми Ғариповтың ихласлығы, дөрөҫлөктө тура бәреп әйтеүе, идеялылығы ҡайһы бер замандаштарына оҡшамағандыр, шуның өсөн дә уларҙың ҡайһы берҙәре Рәми Ғариповҡа төрлө ярлыҡтар тағырға һәм нисек тә булһа уның абруйын төшөрөргә маташҡандыр инде. Әлбиттә, ниндәй шағир-яҙыусыға гүзәл тәнҡит оҡшаһын инде! Әммә йәш шағирҙар һәм яҙыусылар уға тартылған бит!

Тағы шуны ла әйтеү кәрәк: Рәми Ғариповты "милләтсе" булғаны өсөн Яҙыусылар союзынан ҡыуыуҙары хаҡында ла имеш-мимеш хәбәр тамыр йәйгән. Ә ысынында иһә бындай факт бер ҡасан да булмаған. Шағир ғүмеренең аҙағына тиклем Яҙыусылар союзы ағзаһы булып ҡалған. Хатта ул йәш яҙыусы Михаил Чвановты Яҙыусылар берләшмәһенә индереү тураһында юллап йөрөгән. Был хаҡта Михаил Андреевич айырым бер йылылыҡ менән һөйләй.

Рәми Ғариповтың тормош юлын өйрәнеү һәм уның ижадын популярлаштырыу йылдарында мин шуны аңланым: "милләтсе Ғарипов" милләтселәргә үҙҙәренең кәмселеген аҡлау өсөн генә кәрәк булған. Башҡорт халҡы Рәми Ғариповты үҙе тере саҡта уҡ һәр һүҙендә сағылған гәзеллеге, ихласлығы өсөн яратты. Һәм беҙ бөгөн йәмғиәткә үсеп килеүсе быуынды үҙ өҫтөндә көндәлек эшләргә дәртләндергән һәм еңеүсе фәлсәфәһе тип аталған тормошҡа ыңғай мөнәсәбәт тәрбиәләгән Рәми Ғариповты - генийҙы - өлгө итеп күрһәтергә тейешбеҙ..."

Эйе, Шағир шәхесен, уның хеҙмәтен дөрөҫ ҡабул итергә өйрәтәһе бар әле йәмғиәтте. Ҡарағыҙ, бөгөн халҡыбыҙ Рәми һүҙен күтәрмәләй, уның юбилейын үҙенең ысын байрамына әйләндерә, бер-береһен ҡотлай. Йә, тағы кем ошондай күтәрмәләүҙәргә лайыҡ булғаны бар! Беҙ бөгөн Рәми ағайҙы үҙ заманында баһаланмағаны, ижад емештәрен китап итеп сығара алмағаны, ҡыйырһытылыуы, эҙәрлекләнеүе өсөн түгел, ә оло таланты, Хәҡиҡәткә, туған телгә, халыҡ рухына тоғро булғаны, батыр йөрәге өсөн күтәрәбеҙ, өлгө итеп ҡуйабыҙ. Ошо өлгөлә тәрбиәләйек йәш быуынды. Хәҙерге заман йәштәре көмһенеүҙәрҙе, меҫкенлекте ҡабул итмәй икәнен дә иҫкәртеп ҡуйығы килә...

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠСАҒА ҺАТ...

## аҡсаға һатылма

Айырылмаҫтай дуҫыңа ҡайырылмаҫтай һүҙ әйтмә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Уңышҡа табан юл... ирен этәреп алып китеп барған ҡатын-ҡыҙҙар менән тулған.

**(Томас Дьюар).**

Мөхәббәттән барлыҡҡа килгән яралар, үлтермәгәндә лә, бер ваҡытта ла уңалмай.

**(Джордж Байрон).**

Кешенең тәртибе уның кейеме һымаҡ булырға тейеш: бик уҡ һығып та тормаһын, бик уҡ киңәйеп тә китмәһен - хәрәкәт һәм эш иреклеге һаҡланырға тейеш.

**(Фрэнсис Бэкон).**

Кеше намыҫлы булһа, башҡаларҙы намыҫһыҙлыҡта гәйепләргә батырсылыҡ итмәҫ. Түбән йәнлеләр хатта иң изге ҡылыҡтарҙы ла юҡҡа сығарырға әҙер тора.

**(Марк Цицерон).**

Көн дә ҡабатланған хәл-ваҡиғалар алдында кеше ҡурҡыуын юғалта. Ә бит тап ошо хәл-ваҡиғалар уның өсөн иң ҡурҡынысы булыуы мөмкин.

**(Николло Макиавелли).**

Хаталар һәм тупаҫлыҡ кешегә тормошта икмәк менән һыу кеүек уҡ кәрәкле.

**(Анатоль Франс).**

Бер нисә йыл никахта йәшәгәндән һуң ире ҡатынына ҡарап торғанда ла уны күрмәҫкә, ә ҡатыны иренә ҡарамайынса ла уны үтәнән-үтә күрергә мөмкин.

**(Хелен Роуленд).**

Барлыҡ бәхетле ғаиләләр ҙә бер-береһенә оҡшаш, ә һәр бәхетһеҙ ғаилә үҙенсә бәхетһеҙ.

**(Лев Толстой).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡһаҡалдан һорағандар:**

**- Әйтегеҙ әле, һеҙҙе хаҡ юлға кем сығарҙы?**

**- Минең этем, - тип яуап бирә аҡһаҡал.**

**- Нисек инде улай? - тигән аптырауға ҡаршы аҡһаҡал былай тип яуаплай:**

**- Бер саҡ урман-ҡырҙар буйлап сәйәхәт итеп арып, этем менән бергә бер йылға буйына килеп туҡтаныҡ. Арыған, сарсаған этемдең йылға ситенә баҫып, һыуға эйелгән ыңғайы тертләп китеүенә иғтибар иттем. Ул үҙенең һыуҙағы сағылышын күреп ҡаушап ҡалған икән. Ләкин сарсауы ла, ярһыуы ла сиктән ашҡан булғандыр инде: бер мәл этем һыуҙан үҙенә баҡҡан "этҡә" ырғыны, һәм уның һыуҙағы сағылышы ла, һыу менән уның араһындағы кәртә лә юҡҡа сыҡты... Бына шулай, тормоштағы кәртәләр, икеләнеүҙәр бары тик тәүәккәллек ярҙамында артҡа сигенә икәненә инаныу арҡаһында килдем мин үҙ хәҡиҡәтемә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23
**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
18 февраль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тираҗы - 3387
Заказ - 206